ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 май (һабанай)
2021
№20 (958)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм йәмәғәт! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Хаҡы - 705 һум 12 тин. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы туғандарына, атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.*

***Мөхәрририәт.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡоштарға нимә булған?**



3

**Еңеүселәр айы ул - май**



5

**Йөрәктәрҙе йылытыр йорт**



8-9

**Ил күңеленә ауаздаш**



12-13

**ТВ-программа** 14

*АФАРИН!*

# ТАМАРАНЫҢ...

## тағы ла бер еңеүе

**Халыҡ-ара шашка буйынса ете тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина тағы бер тапҡыр был өлкәне шаулатты - ул Варшавала үткән чемпионатта еңеү яуланы. Ул унда поляк спортсыһы Наталья Садовска менән көс һынашты. Натальяға 31 йәш һәм ул атап әйткәндә бер тапҡыр ҙа алдынғылыҡты бирмәгән.**



Матч туғыҙ турҙан торған һәм уйынсылар һәр көн өсәр партия уйнаған. "Бик ҡатмарлы булды, - ти Тамара Танһыҡҡужина, - бер генә минут та иркенләр хәл юҡ ине. Наталья ла көсөргәнешле уйнаны, ул да минең тәжрибәне белә һәм төрлөсә самаланы. Бөтә көндәрҙә лә еңелеп килдем, хатта бер мәл ышанысым йомшара төшкәндәй ҙә булып китте, әммә өмөт һүнмәне. Мөмкинлегем 15-20 проценттай ғына ине. Һуңғы көндә иһә бөтөн булмышымды һәм аңымды шул шашка таҡтаһы өҫтөнә йыйҙым һәм, бәхеткә күрә, еңдем дә..."

Спортсы был чемпионатҡа былтырғы август айынан алып әҙерләнгән. Өфөлә лә, шулай уҡ Ижевскиҙа йәшәгән консультанты Алексей Чижов янында ла шөғөлләнгән. Чемпионаттағы ҡаршы яҡтың бик етди уйынсы икәнен дә, үҙенә республиканың ышанысын аҡлау яуаплылығы һалынғанын да яҡшы белә башҡорт спортсыһы. Бөгөн Тамара Танһыҡҡужина юғары еңеүенең емештәре менән ҡәнәғәт: "Әлегә ял итәм, бер ниндәй ҙә пландар ҡормайым, бер ҡайҙа ла йөрөмәйем, ғаиләм, балаларым янындамын" - тине ул телефон аша бәйләнештә.

Был аҙнала Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Т. Танһыҡҡужинаны оло еңеүе менән ҡотлап, уға Халыҡтар дуҫлығы ордены тапшырҙы. "Тамара Танһыҡҡужина - илдә ошондай күп титулға эйә булған берҙән-бер шашкасы. Ул әлеге исемде ҡатмарлы шарттарҙа яуланы: уйын ваҡытында Рәсәй флагы алынды, ләкин, баҫым яһалыуға ҡарамаҫтан, ул үҙенең оҫталығын күрһәтеп, донъяның "шашка королеваһы" титулын яҡланы", - тип билдәләне Радий Фәрит улы.

**Әйткәндәй, бөгөн, 15 майҙа донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина Өфөлә "Ватан" паркында бер үк ваҡытта рус шашкаһында уйнауҙың 250 сеансын үткәрә. Сеанстар иртәнге 10-да, ҡатнашыусыларҙы теркәү сәғәт 8-ҙән башлана. Теләгән һәр кемдең донъяның иң шәп шашкасыһы менән көс һынашыу мөмкинлеге бар.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ?

## *Халыҡ-ара ғаилә көнөндә ҡайһы бер ғаилә ҡанундары тураһында иҫкә төшөрәйек әле. Мәҫәлән, һеҙҙең ғаиләлә атай һәм әсәй вазифаһы нисегерәк үтәлде, кем баш ине?*

***Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА, шағирә, журналист:*** Беҙҙең 9 балалы ҙур ғаиләбеҙҙә атай мәрхүм баш булды. Ул үҙе ғүмерҙә лә беҙгә ҡул күтәреп һуҡмаһа ла, әсәм шикелле әрләмәһә лә, беҙ уның ҡарашынан да ҡурҡа инек. Атайым - тирә-йүндә даны таралған балта оҫтаһы ине. Ул әле мин тыуғас һалып сыҡҡан сираттағы өйөнөң тәҙрәләрен шул осорҙа уҡ евро итеп эшләгән - рамдарына ике ҡатлы быяла ҡуйылып, беҙҙең тәҙрәләр бер ваҡытта ла туңманы. Хәҙер генә шул ике, өс ҡат быялалы тәҙрәләрҙе "евро" тигән булып, сит илдә уйлап табылған, тип ебәрәләр.

Атайым Рәжәп Тайып улы оҫта мейессе, һунарсы, мал йәнле кеше булды. Ул бик егәрле булып, таң тишегенән тороп, оҫтаханаһында кешегә йә өҫтәл, йә һандыҡ, йә раммаҙар эшләй ине. Уның үҙе эшләп алған ҡырғыс станогы булып, шунда өҫтәл, ултырғыс боттарын йомро ғына итеп ҡырҙыртып, семәрләй торғайны. Башҡаларҙа булмаған инструменттары бик ҡәҙерләп лар эсендә, һәр береһе үҙ урынында һаҡлана һәм шуларҙың берәйһе юғалһа, ағайымдарға эләгә ине.

Атай мәрхүм оҫта һунарсы булып, ҡышына 5-6 баш болан, яҙ әллә нисәмә һуйыр алыр, уларҙы күрше-күләнгә, мохтаждарға өләшеп бирер ине. Ул ҡортон да көттө, йылҡы малы өсөн йәнен бирҙе. Колхоз атына һыу эсерер өсөн төнгө 3-4-тәрҙә тороп йөрөр ине. Һарайҙы тиҙәктән насар таҙартһаҡ, түшәгегеҙгә тубырсыҡ һалып йоҡлатам, тиер ине. Ныҡ намыҫлы, ҡыҙыу, тура һүҙле булды ул. Һүҙҙе күп һөйләмәне. Уның ни әйтерен беҙ күҙ ҡарашынан аңланыҡ.

Әсәйем, атайым һис ҡасан өйҙә тормаһа ла, атаң ни әйтер, унан һорағыҙ, тип торҙо гел. Атай абруйын ул булдырғандыр, тим.

Бала саҡтағы иң күңелле, иң һағындырған мәл - әсәй : "Бар, атаңды тамаҡ ашарға саҡырығыҙ!" - тиһә, ҡустыһеңлем менән бер-беребеҙҙе уҙыша-уҙыша кемалыҡтан саба инек. Минең өсөн Ер шарында атайым һымаҡ ир-ат бүтән юҡ. Ул - ир-ат эталоны. Ысын мәғәнәһендә. Аллаһҡа рәхмәтлемен миңә ошондай Атай бүләк иткән өсөн! Башҡа ир-атта уның һыҙаттарын эҙләп таба алмау иһә - минең бәлә...

12+

✓ *Беҙҙең ғаиләлә лә күп нәмәне атайыбыҙ хәл итә ине. Шулай ҙа ул өйҙә хужа булыуын танытырға тырышманы, бойорорға яратманы, әсәйебеҙ менән балалар йәки башҡа кешеләр алдында ирешеп ултырғанын да иҫләмәйем.*



УЙЛЫҒА - УЙ



# АВТОБУСТА - "ҠУЯНДАР"!

**Мәктәп биштәрҙәрен аҫҡан бер-ике шуҡ малай туҡталышҡа килгән һәр автобусҡа йүгереп инәләр ҙә шоферҙан: "Ике генә туҡталыш ултырып барырға мөмкинме? "- тип ялбаралар. Ҡырыҫ водителдең юҡ тигәнен ишетмәҫ, кире төшөп китәләр ҙә, киләһеләрен "штурмларға"тотоналар.**

Бәхеткә, осрай ҡайһы саҡ йомшаҡ күңелле, бала йәнле водителдәр ҙә. Шунда инде малайҙар, ҡыуанышып, бер аҙ бушлай ултырып барғас, рәхмәт әйтеп, төшөп ҡалалар. Ындай күренеш ҡала пассажирҙар транспортында йыш осрай. Коммерция нигеҙендә эшләүсе транспортта мәктәптән ауыр биштәрҙәрен йөкмәп ҡайтыусы малай-ҡыҙҙарға рөхсәт йышыраҡ тәтейә лә, муниципаль автобустарҙа бындай мәсьәләне водитель түгел, ә уҫал йөҙлө кондукторҙар хәл итә. Ә уларҙың төрлөһө бар.

Шулай бер мәл түләргә аҡсаһы етмәгән ирҙе ай-вайына ҡарамай, ҡыуа башланы салон хужабикәһе. Тауыштарынан ҡолаҡ тондо. Ахырҙа, төшөп китергә мәжбүр булған был ирҙең: "Һеҙҙең кеүек яһилдарҙы ҡайҙан ғына табалар икән..." - тип һукранғаны иҫтә ҡалды. Ир кеше - ярай инде, ә бит ҡаты һыуыҡтарҙа бала-сағаны ҡыуып төшөрөүҙәр хаҡында ла бик күп яҙылды. Һәм бына, ниһайәт, быйыл мартта юл хаҡын түләй алмаған 16 йәшкә тиклемге балаларҙы транспорттан ҡыуып төшөрөүҙе тыйыусы закон көсөнә инде. Был бала-саға өсөн ҡыуаныс булһа ла, транспортсылар өсөн бер ҙә яҡшы түгел ине: "Нисек инде, берәүҙәр түләй, ә икенселәр, түләрлек хәле булғанда ла, әлеге законды файҙаланып, буш йөрөргә ҡыҙталаша. Кем белә, тора-бара өйөрҙәре менән килеп инеп тә түләүҙән баш тартыуҙары бар. Уларҙың барыһын да бушлай йөрөтөргәме инде хәҙер?" - тигән һорау алдында ҡалды улар.

Ысынлап та, тағы бер проблема килеп тыуҙы: автобустарҙа бәләкәй "ҡуяндар" күбәйеп китте. Ә уларҙың күбеһе аҡсаһыҙға бер ҙә ҡыҫылмаған: чипсы кимерәләр, ҡулдарында татлы һыу. Тимәк, ата-әсәләре мәктәпкә киткәндә уларға мотлаҡ "кеҫә" аҡсаһы биреп сығара, тигән һүҙ. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер тәртипле бала тиндәрен усына йомоп, түләп төшөргә әҙерләнеп килә. Кем теләй - шул түләй, килеп сығамы инде хәҙер? Тимәк, март законы бигүк камил булып сыҡмаған, тип аңларға кәрәк.

Ошо көндәрҙә был йәһәттән килеп тыуған мәсьәләне хәл итеү маҡсатында Дәүләт Думаһына 16 йәшкә тиклемге бөтә балаларға ла йәмәғәт транспортында берҙәм проездной буйынса йөрөүҙе рөхсәт итеү хаҡында тәҡдим индерелде. Шулай дөрөҫөрәк булыр, тиҙәр был хаҡта фекер алышыусылар. Ысынлап та, әгәр дәүләт тарафынан балалар хаҡына яҡшы эш башланған икән, ул ярты-йорто булырға тейеш түгелдер, уның менән бөтәһе лә файҙалана алырға тейештер. Быныӊ өсөн автопредприятиеларға дотация түләнһә, улар бер ни ҙә юғалтмаясаҡ бит. Депутаттар ни тиер? Әгәр закон ҡабул ителә ҡалһа,был дәүләттең бөгөнгө көсөргәнеш мәлендә тағы бер изге ғәмәле булыр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# УЙЛАНДЫРА ТОРҒАН БАҪМА

**"Киске Өфө" гәзитен байтаҡ йылдар алдырам. Ике тиҫтәгә яҡын тарихы булған гәзит минең дуҫыма әүерелде, уның һәр һанын ғаилә менән көтөп алабыҙ.**



Уны ҡулға алыу менән тәү сиратта "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһы аҫтында баҫылған яуаптарға иғтибар итәм, шуны уҡый һалып сығам. Сөнки бөгөн беҙҙең йәмғиәтте борсоған иң мөһим һорауҙар, мәсьәләләр күтәрелә унда. Унан инде "Баш эшләтмәк"кә тотонабыҙ: бөтә ғаилә менән сканворд һорауҙарына яуаптар эҙләйбеҙ. Берәй ауыр һорауға яуап таба алмаһаҡ, интернеттан да, китаптарҙан да ҡараштырып, табып, яҙып ҡуябыҙ. Был урында шундай теләктәҡдимемде лә әйтеп китәйем: балалар өсөн дә башҡортса йомаҡтар, һүҙ табышмағы кеүек ҡыҙыҡлы материалдар баҫылһа, шәп булыр ине.

Гәзит уҡыусыны уйландырған хәл-ваҡиғалар, йәмғиәттәге күренештәр буйынса фекер төйнәргә әтәргес - гәзиттең икенсе-өсөнсө биттәрендәге актуаль мәҡәләләр менән йәйләп ултырып танышам. Төрлө закондарҙа үҙгәрештәр, яңылыҡтар тураһында "Ишеттегеҙме әле?" рубрикаһы, халыҡ медицинаһына арналған мәҡәләләрҙе лә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмайым. Аҙна һайын сыҡҡан, ҙур булмаған "Халыҡ дауаһы"нда ҡайһы бер үләндәрҙең фотоһүрәтен дә урынлаштырырға мөмкинлек табылһа, уғата яҡшы булыр ине, тип теләйем. Ҡыҙғаныска күрә, ҡайһы бер шифалы үсемлектәрҙе танып белмәйбеҙ шул...

"Киске Өфө"нө үҙ итеүемдең тағы бер сәбәбе бар - унда башҡорт халыҡ йолалары тураһында мәғлүмәттәр күп баҫыла. Төрлө сараларҙа ҡулланырға уңайлы итеп әҙерләнгән йола сценарийҙары ла донъя күрҙе унда, мин үҙем дә тәжрибәм менән уртаҡлашып, ямғыр теләү йолаһы тураһында сценарий яҙып баҫтырҙым. Былар беҙгә, ағинәйҙәргә, утә лә кәрәкле, мөһим яҙмалар. Сөнки балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре, мәктәп уҡыусылары менән әүҙем эшләйбеҙ. Сосновка урыҫ ауылы булғас, башҡортса ла, русса ла һөйләп, башҡорт халыҡ йолаларын күрһәтәбеҙ, байрам саралары ойоштораб ыҙ. Шулай уҡ гәзиттең "Ағинәй мәктәбе" рубрикаһын да ҡыҙыҡһынып уҡыйбыҙ, был инде ойошмабыҙҙың республикалағы тармаҡтары араһында тәжрибә уртаҡлашыу, фекер алышыу майҙаны. Әйткәндәй, беҙҙең ауылда "Киске Өфө" гәзитенең иң әүҙем, иң тоғро уҡыусыһы - Фәнилә Мусина исемле ағинәйебеҙ. Ул элек почта хеҙмәткәре булып эшләгән һәм үҙ индәренә башҡорт матбуғатына яҙҙырыу бурысын алған. Уның менән гәзиттәге мәҡәләләр буйынса ултырып фекер алышып, һөйләшеп алабыҙ.

Тағы ла бер үҙем яратып уҡыған, фәһемле һүҙҙәренә ҡолаҡ һалған рубрика - "Аҡыл - ҡаҙна". Кеше ниндәй йәштә лә уҡырға, ғилем туплар ға тейеш, ти. Был рубрика ошоға бүлышлыҡ итә лә инде. Бер бағанаға донъя аҡылын һыйҙырған ул.

"Киске Өфө" тураһында һөйләй башлаһаң, һүҙем бөтмәҫ кеүек. Уның биттәрендә донъя күргән һәр мәҡәлә, һәр рубрика - урынлы, артыҡ бер нәмә лә юҡ. Был йөкмәткеле баҫма менән дуҫлығыбыҙ дауам итһен, уны эшләүсе коллективтың ижади ҡомары һүнмәһен, тип теләйем.

**Земфира КӘРИМОВА.**
**Белорет районы**
**Сосновка ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Халыҡ-ара ғаилә көнөндә ҡайһы бер ғаилә ҡанундары тураһында иҫкә төшөрәйек әле. Мәҫәлән, һеҙҙең ғаиләлә атай һәм әсәй вазифаһы нисегерәк үтәлде, кем баш ине?***

***Даян МӘЗИТОВ, журналист:*** Ғаиләлә, әлбиттә, атай кеше баш булырға тейеш. Был элек-электән шулай. Мосолман илдәрендә генә түгел, башҡа халыҡтарҙа ла. "Нинә икән һуң?" тип аптырауcылар барҙыр. Яуап ябай ғына: "Ирҙәр көслөрәк". Ҡайһы берҙә ғаиләләге иерархияны үҙгәртергә тырышалар. Был - донъялағы тәбиғи ҡанундарға ҡаршы сығыу. Ир ҙә, ҡатын да бер төрлө була алмай, уларҙың араһындағы айырма тән төҙөлөшө менән генә сикләнмәй.

Беҙҙең ғаиләлә лә күп нәмәне атайыбыҙ хәл итә ине. Шулай ҙа ул өйҙә хужа булыуын танытырға тырышманы, бойорорға яратманы, әсәйебеҙ менән балалар йәки башҡа кешеләр алдында ирешеп ултырғанын да иҫләмәйем. Нисектер барыһы ла үҙ яйына барҙы: атай ҡарар ҡыла йәки үҙе башлай, бүтәндәр әйткәнде үтәргә керешә йәки уға әйәрә. Атайым - әсәйемде, әсәйем атайымды баҫып маташманы, яманлап һөйләп йөрөмәне, мөнәсәбәттәрен үҙ-ара асыҡлағандарҙыр. Әсәйем бер ваҡытта ла ғаилә башлығының һүҙен йыҡманы, бик кәрәккәндә генә уға иплән кенә үҙ фекерен белдерә ине. Атайым да гел ҡаты торманы, ҡатынының әйткәндәренә ҡолаҡ һалды. Ә инде беҙ берәй төрлө ваҡ мәсьәлә буйынса мөрәжәғәт итһәк, ғәрләнгәндәй булып: "Ана, әсәгеҙҙән һорағыҙ", - ти торғайны. Һәм беҙ шул тәртипте алдыҡ: атайҙы ваҡ мәшәҡәт менән борсомаҫҡа, әсәйҙән нимәнәлер хәл итеүҙе талап итмәҫкә!

Минең ғаиләлә лә әллә ни айырма юҡ, кәләшем менән үҙ урыныбыҙҙы белергә һәм бер-беребеҙҙе кәмһетмәҫкә тырышабыҙ. Хужа булыу өсөн уҫаллыҡтан бигерәк яуаплылыҡ тойғоһо кәрәктер, тип уйлайым. Әгәр ир ҡатыны һәм балалары хаҡында ныҡлы хәстәрлек күрә, ғәҙел һәм һүҙендә тороусан икән, уны хөрмәт итәсәктәр.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Үҙған тәүлектә Башҡортостанда COVID-19 йоҡтороуҙың 89 яңы осрағы асыҡланған. Пандемия башланғандан алып республикала бөтәһе 36 677 сирле теркәлгән. Әлеге көндә стационарҙа 138 кеше дауалана, 11-е - интенсив терапия бүлексәһендә. 14 майға мәғлүмәттәр буйынса, 2 кешенең вафаты, 131 кешенең пневмония диагнозы раҫланған.

✓11 майҙа Ҡаҙан мәктәбендә 19 йәшлек бер егет ҡорал тотоп, мәктәпкә килеп ингән һәм ут асҡан. Уны ҡулға алғандар. РИА Новости агентлығынан белдереүҙәренсә, ун кеше һәләк булған, уларҙың күпселеге - балалар, 21 кеше дауаханаға оҙатылған. Telegram-канал мәғлүмәттәренә ярашлы, балалар тәҙрәнән һикергән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ашығыс рәүештә республиканың барлыҡ мәктәптәрендә хәүефһеҙлек сараларын көсәйтергә ҡушты, шулай уҡ Ҡаҙандағы терактта зыян күргәндәрҙең һәммәһен дә Башҡортостан шифаханаларында бушлай реабилитация программаһы үтергә, ғаилә менән ял итергә саҡырҙы. Бынан тыш, Радий Хәбиров уларға республика күрһәтә алырҙай һәр төрлө ярҙам тәҡдим итте, тип белдерҙеләр Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә балалар баҡсаларында һәм башланғыс класта рҙа сығарылыш кисәләре мәсьәләһе күтәрелде. Һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин ата-әсәләрҙе билдәле шарттарҙа ғына сығарылыш кисәһенә индерергә тәҡдим итте. "Шундай тәҡдимем бар: кәмендә вакцинаның беренсе компонентын алған йәки сирләгәндән һуң антиматдәләре юғары булған ата-әсәләрҙе әлеге сараларға индерергә мөмкин", - тине ул. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров юғары әҙерлек тураһында указға тейешле үҙгәрештәр әҙерләргә ҡушты.

✓Рәсәйҙең Пенсия фонды икенсе балаһы 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуған йәки уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алынған ғаиләләргә ай һайын аҡса түләй. Әгәр ғаиләлә айлыҡ килем бер кешегә ике йәшлек минимумынан артмаһа, аҡса алырға мөмкин. Быйыл Башҡортостанда айлыҡ түләүҙең күләме - 10 077 һум. Закон ғәмәлгә ашырыла башлағандан алып 5,3 мең дән ашыу сертификат хужаһы бөтәһе бергә 390 миллион һум айлыҡ түләү алған. Майҙа ошо маҡсатҡа йәнә 17,5 миллион һум йүнәлтелә.

БЫНАҒАЙЫШ!

# ҠОШТАРҒА НИМӘ БУЛҒАН?

**Биологтар Башҡортостанда ҡоштар һаны кәмеүен теркәй. Социаль селтәрҙәрҙән файҙаланыусылар ҙа турғай, ҡарабаш турғай, ҡарғаларҙың аҙайыуы хаҡында белдерә. Уның шулай икәнен Башҡортостандың Орнитологтар йәмғиәте рәйесе, Биомәғлүмәт технологиялары һәм экология экспертизаһы институты директоры Виктор Валуев та раҫлай.**

"1972 йылда 9-сы класта уҡығанда сәүкәләрҙе күҙәттек. Улар шул тиклем күп ине, осҡанда болот һымаҡ, хатта бер-береһенән айырып булмай ине - төркөмдә миллиондан ашыу ҡош булғандыр. Хәҙер 200 ҡош булһа, ҙур тип иҫәпләнә, - ти ул. - Элек ихатала күгәрсендәрҙе йәшниклап тота инек, бөгөн иһә бер кварталға улар егермеләп кенә була. Турғайҙар бөтөнләй тиерлек ҡалманы, улар берәрләп кенә оса. Сыйырсыҡ, ҡарғалар һаны ла кәмене. Был хәлгә анализ яһарға кәрәк, әммә зоологтар ҡалманы, рептилияларҙы тикшереүселәр бар, ихтиологтар юҡ", - ти Орнитологтар йәмғиәте рәйесе.

Уның фекеренсә, ҡоштарҙың күбеһе ауырыу. 1981 йылдан Валуев ҡоштарҙың ҡараҫҡыһын эшләй. "Әҙерләү технологияһы буйынса ҡоштоң эске ағзалары алына. 700-ҙән ашыу ҡош түшкәһенең анализы бар. Әгәр быға тиклем орлоҡ биҙе ҡарайыуының бер нисә осрағы ғына күҙәтелһә, хәҙер бөтәһенеке лә тиерлек ҡап-ҡара. Өкөләрҙең тире аҫты майы ҡалынлығы 1-2 сантиметр була торғайны, һуңғы ваҡытта уларҙың түш һөйәге ослайып сыҡҡан", - ти эксперт.



Валуев әйтеүенсә, быны сәбәбе ҡоротҡостарға ҡаршы көслө химикат ҡулланыуҙа. "Былтыр Талбазы баҫыуында километрға яҡын ер үтеп, бер сысҡан өңөн күрмәнем. Ҡалала бәпембәне эшкәрткәндән һуң уның матдәләре ағасҡа, емешкә әләгә, һөҙөмтәлә ҡоштар зыян күрә. Әсегән миләш ашап, иҫереп йөрөгән мышар турғайҙарын күргәнегеҙ бармы? Емеш ағаста кибә һәм ҡоштар ағыуланып үлә", - ти ул.

2017 йылда Стәрлетамаҡ халҡы ҡыҙылтүштәрҙең күпләп үлеүен теркәгән. Уларҙың ашҡаҙанында юлға һипкән реагент составына ингән химикат табылған. Ҡарҙа ашарға әҙләгән ҡоштар яныулыш реагент киҫәксәләрен ашап, ағыуланған, тип уйларға урын бар.

### Теманы дауам итеп...

Беҙ бәләкәй саҡта ҡоштар ҙур туп булып, әллә ҡайҙан тауыш биреп ҡайтҡаны хәтерҙә. Ә хәҙер уларҙың көтөүе бик бәләкәй. Ҡайны берҙә уларҙың ҡасан ҡайтҡанын да күрмәй ҡалаһың, сөнки аҙлап-аҙлап ҡына осалар.

Сыйырсыҡтарҙың килеүе ауылда үҙе бер байрам ине. Һәр йортта тиерлек уларға оя яһап, көтөп торҙолар. Кемдекенә беренсе ҡунһа, оло шатлыҡҡа әйләнә ине. Ә хәҙер байтаҡ йылдар инде сыйырсыҡтар кеше эшләгән ояны үҙһенмәй. Йыраҡ юлдан арып килеп, бер нисә көн генә ауылда булалар ҙа, урманға осалар. Элегерәк улар үҙҙәре булмағанда эйәләшкән турғай-сәпсектәрҙе соролдатып ҡыуып ебәреп, йомортҡа һалып, балаларын сығарып, осорға өйрәткәс кенә урманға китә ине. Хәҙер ни ғәжәп - улар ауылды үҙһенмәй. Тыныслыҡ тапмайҙармы икән, тип уйлайым. Һәр йортта икешәр-өсәр машина, трактор, моторлы, двигателле эш ҡоралдары, музыка... Бәлки, шуларҙың тауышынан ҡасып китәләрҙер? Быйыл да ояһында оҙаҡ торманылар. Әле бына улар иртәле-кисле генә ауылға килеп, үҙенең моңло йырын һуҙа ла, тағы юҡҡа сығалар.

Сыйырсыҡтар ғына түгел, ғөмүмән, ауылда ҡоштар бик күренмәй хәҙер. Элек, мәҫәлән, ҡарлуғастар ҙа һәр йортҡа тиерлек эйәләшә торғайны. Бүртлеккә, бесәндән бушаған һарай баштарына балсыҡтан оя ҡороп, бала сығара ине. Күгәрсендәр тураһында әйтергә лә түгел. Улар һуңғы ун йылда ауылда бөтөнләй тиерлек күренмәй. Ҡарғалар ҙа аҙайҙы. Элек йылға буйындағы өс мөһабәт тирәктең һәр ботағында тиерлек оялайҙар ине. Ә хәҙер ағастың иң өҫкө ботаҡтарында һирәк-һаяҡ ҡына күренәләр.

Әллә ҡоштарҙың эпидемиология һәм эпизоотология роленә бәйләп, уларҙы махсус юҡ итеүҙәреме икән? Һуңғы ваҡытта ҡоштарҙың һәм кешеләрҙең уртаҡ ауырыуҙары барлыҡҡа килде бит. Айырыуса күсмә ҡоштар йоғошло ауырыуҙарҙы таратыусы тип танылдылар. Ҡырағай ҡоштарҙың йорт ҡоштарын гельминттар менән зарарлауы ла билдәле.

Әгәр ҙә эш, ысынлап та, шулай булһа, был бик үк яҡшыға алып бармаç ул. Ҡоштар - тәбиғәттең ғәжәйеп бер бүләге бит. Уларҙың кеше тормошонда һәм тәбиғәттә роле баһалап бөткөһөҙ. Урман, баҫыу, баҡса ҡоротҡостарын, ҡан һурыусы бөжәктәрҙе һәм талпандарҙы ла улар бөтөрә. Йыртҡыс ҡоштар сысҡан кеүек кимереүселәр һәм ҡый үләндәре орлоҡтары, шулай уҡ ауырыу, көсһөҙ һәм зәғиф хайуандарҙы юҡ итә. Талпан, серәкәйҙәрҙең күбәйеүен дә ҡоштар һаны кәмеүенә бәйле тип фекер йөрөтөргә урын бар. Ҡыҫҡаһы, был мәсьәләләргә сер сиселмәгән әле. Һуңғы һүҙҙе, моғайын, ғалимдар әйтер.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Халыҡ-ара ғаилә көнөндә ҡайһы бер ғаилә ҡанундары тураһында иҫкә төшөрәйек әле. Мәҫәлән, һеҙҙең ғаиләлә атай һәм әсәй вазифаһы нисегерәк үтәлде, кем баш ине?***

***Тамара ҒӘНИЕВА, Башҡортостандың халыҡ шағиры:*** Мин үҫкән өйҙә шул тиклем патриархат ине, атайҙың һүҙенән берәү ҙә сыға алмай. Атайым бит инде - фронтовик, комбат! Ғаиләне генә түгел, бөтөн ауылды тотоп тора. Шундай кеше янында һыйышып һәм һыйып йәшәү өсөн ҡатын-ҡыҙға йәки тулыһынса баш һалыу, йәки ҡасып китеү генә ҡала. Әсәйем баш һалған да, күрәһең. Һәм мин дә баш һалып, буйһоноп үҫтем.

"Тормош нисек булырға тейеш?" тигән барлыҡ ҡағиҙәләрҙе лә мин ошо атай-әсәйем тәрбиәһендә өйрәндем. Был ике ярым белемле, ярым наҙан булган кешеләр мин белгән иң интеллигент әҙәмдәр ине. Интеллигент - ул күп белеү, күп уҡыу ғына түгел, ә донъяға, кешеләргә мөнәсәбәте менән баһаланып, үҙ йәмғиәтендә бер ниндәй хилафлыҡ ҡылмай, ҡарғыштар алмай йәшәй белеү. Улар ҙа минә үҙ белгәндәрен һеңдерҙе, шул орлоҡто һалды. Юлда ятҡан бер һәнәк бесәнде лә һалып алмай торған бик намыҫлы, ғәрсел булдылар. Бурысҡа алыуҙы иң оят ғәмәл итеп һананылар һәм мине лә шулай өйрәттеләр. Шуға мин дә, ниндәй ауыр хәлдәрҙә лә, үҙем тапҡан тингә генә таянырға тырыштым.

Әсәйем 74 йәштә вафат булды. Бер ҡайтҡанда ауылдаштарымдан: "Һеҙҙең минең әсәйемә берәй дәғүәгеҙ бармы?" - тип һораным. Ауылдаштар: "Һинең әсәйең кеүек беҙҙә берәү генә ине",- тинеләр. Сөнки ул бөтөн ауылға писарь ролендә ине, кемгә документ, кемгә ғариза яҙа, русса яҡшы белә, грамоталы. "Әминә еңгә, ошолайтһаҡ, нисек булыр икән?" тип уға кәңәшкә ирҙәр ҙә килә ине. Һәм бөтөн ошоларҙы күреп үҫкән мин кешеләргә кәрәкле булыуҙы әҙәм ғүмеренең асылы икән тип белдем.

Бына мин ошолай бер-береһенә терәк булып йәшәй белә торған быуын вәкилдәре ҡулында тәрбиәләндем. Һәм шунда уҡ, оло бала булараҡ, бәләкәйҙәрҙе ҡарарға кәрәклекте белдем. Быға хатта өйрәтмәйҙәр ҙә ине, һин уларҙы, ҡан туғандарыңды, йәндәй күреп яратаһың һәм йәлләйһең. Был тойғолар миндә ғүмер буйына йәшәне, хатта вафат ҡустымдың балаларын да ҡарап үҫтерҙем.

Ғаилә тиңлек, бер-береңә хөрмәт нигеҙендә ҡоролһа ине ул. Әммә был бик һирәк күренеш. Үкенескә ҡаршы, хәҙер ғаиләлә йә ир кеше баш, хужа, хатта диктатор ролен үтәй. Ҡатынына ҡул күтәрә. Ҡатынына "көсө еткән" ир, минең уйымса, иң мөртәт кеше ул. Билдәле бит, ирҙәр тыумыштан физик яҡтан көслө була, тимәк, ҡатынын имгәтерен яҡшы белә.

Ҡатын-ҡыҙ ғаилә башлығы булған ғаиләләр ҙә була. Балалар атайҙарын һанға һуҡмай үҫә. Был да яҡшы түгел. Мин атай атай урынында булған, ғаиләнең именлеге, етешлеге хаҡында хәстәрлек күргән ирҙәр, тапҡанды тәләфләмәй тотона белгән ҡатын-ҡыҙ булғанда ғына балалар ҙа бәхетле булалыр, тип уйлайым. Ә ғаиләнең төп шатлығы һәм бурысы - балалар бит.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала 12 майға планлаштырылған майҙандарҙың яртыһынан күберәгенә сәселгән. Дөйөм алғанда, ошо осорға 1,107 миллион гектар майҙанда сәсеү эштәре башҡарылған, был пландың 55 проценты. Шул иҫәптән бөртөклөләр һәм бөртөклө-ҡуҙаҡлылар - 779 мең гектар, май бирә торған үсемлектәр - 211,3 мең гектар, шәкәр сөгөлдөрө - 30,2 мең гектар. Яҙғы культураларҙы сәсеү буйынса Илеш (59,3 мең гектар), Мәләүез (44,8мең гектар), Саҡмағош (42,3 мең гектар), Ауырғазы (42 мең гектар), Әлшәй (41мең гектар) райондары алда бара.

✓2020 йылда "Башҡортостан" милли паркына 66 мең турист килгән. Былтыр иһә улар 40 мең булған. 2019 йылда бөтәһе 644, уҙған йылда иһә 15 425 электрон документ бирелгән, тип белдерҙеләр милли паркта. Милли парк етәкселеге фекеренсә, туристарҙың күпләп килә башлауына карантинға бәйле эске туризмға ихтыяждың артыуы ғына түгел, ә "Экология" милли проектында ҡатнашыу ҙа йоғонто яһаған, туристик инфраструктураның сифаты күтәрелгән. Милли проект сиктәрендә ике кемпинг, өс туристик маршрут төҙөлгән, мәмерйә һәм Күперле шарлауығы тәртипкә килтерелгән.

✓Әлеге ваҡытта Башҡортостан биләмәһендә 12 меңдән ашыу спорт ҡоролмаһы эшләй. Ошо күрһәткес буйынса республика Мәскәүҙән ҡала икенсе урынды биләй. 2021 йылға Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында - бассейн, Шаранда - физкультура-һауыҡтырыу комплексы, Өфөнөң Киров районында - гимнастика буйынса спорт мәктәбе, Башҡортостандың баш ҡалаһында - ябыҡ футбол манежы, Өфөнөң Октябрь районында - халыҡ-ара Көрәш һарайы, Борайҙа - физкультура-һауыҡтырыу комплексы төҙөү һәм Күмертау ҡалаһында "Шахтер" стадионын реконструкциялау планлаштырыла.

✓14 майҙа Өфөлә "Торатау" Конгресс-холында "АРТ- Ҡоролтай" беренсе мәҙәниәт форумы асылды. Форум тәүгә уҙғарыла һәм йыл һайын мәҙәниәт өлкәһендә стратегик ҡарарҙарҙы тикшереү, ҡабул итеү майҙансығына әүерелергә тейеш. 2021 йылда форум Бөтә донъя фольклориадаһына арналған. Тотош республиканан мәҙәниәт тармағы хеҙмәткәрҙәре, Рәсәй төбәктәренән һәм сит илдәрҙән абруйлы ҡунаҡтар килгән. Көн дауамында түңәрәк өҫтәлдәр, лекциялар, оҫталыҡ дәрестәре ойоштороу ҡаралған. Форум эшендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнаша.

✓ Өфөгә өс нефть эшкәртеү заводы һәм "Өфөоргсинтез" эшмәкәрлеге кире йоғонто яһай, Стәрлетамаҡтың экологияһын БСК, "ТАУ" төркөмө предприятиелары, Салауатта - "Газпром нефтехим Салауат" бысрата.



ҠЫҪҠАСА

# АУЫЛҒА - КРЕДИТ

✓**Башҡортостан аграрийҙарына дөйөм суммаһы 9,5 миллиард һумға льготалы ҡыҫҡа сроклы кредитлауға 300-гә яҡын ғариза хупланған, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығынан.** Республика Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов белдереүенсә, Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Федоровка, Кушнаренко, Дәүләкән, Илеш, Бүздәк, Бишбүләк, Йәрмәкәй һәм Күгәрсен райондарының агросәнәғәт предприятиелары льготалы кредитлау программаһында әүҙем ҡатнаша. Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы баһалауы буйынса, тап льготалы ҡыҫҡа сроклы кредиттар республикала яҙғы баҫыу эштәрен финанслау нигеҙе булып тора. Льготалы ҡыҫҡа ваҡытлы кредиттар йылына 1-ҙән 5 процентҡа тиклем ставка менән бүленә. Кредит алыу өсөн ғаризаны тәүҙә банк, һуңынан Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы ҡарай, шулай уҡ ул махсус рөхсәте булған банктар исемлеген төҙөй.

✓**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров пассажирҙар йөрөтөү өлкәһендә тәртип булдырыу кәрәклеге хаҡында әйткәндән һуң, "Алға" системаһында теркәлеү кимәле көмендә 20 процентҡа артты.** "Башҡортостан социаль карталар регистры" акционерҙар йәмғиәте етәксеһе урынбаҫары Олег Романов фекеренсә, быңдай ыңғай күренешкә йәмәғәт транспортында контроль-касса техника ҡулланыу буйынса закон талаптарын үтәүгә күп һанлы рейдтар үткәрелеүе булышлыҡ иткән. Ыңғай үҙгәрештәрҙән тағы шуны билдәләргә мөмкин: Башҡортостан биләмәһендә эшләгән 27 шәхси ташыусы "Алға" системаһында эшләргә ғариза бирҙе. Проект бойомға ашырыла башлағандан алып, "Алға" системаһындағы әйләнеш 3,9 миллиард һум тәшкил итте. Әлеге ваҡытта унда 72 ташыусы ингән. Уларға 5,2 меңдән ашыу түләү терминалы бирелгән. Шул уҡ ваҡытта коммерция ташыусыларына бирелгән 2,5 мең терминалдың 38 проценты эшләмәй.

✓**Республиканың Төҙөлөш һәм архитектура министрлығы 2021 йылдың II кварталына ҡалаларҙа һәм муниципалитеттарҙа дөйөм торлаҡ майҙанының бер квадрат метрының уртаса баҙар хаҡын расланы.** Документтан күренеүенсә, хәҙер ҡалаларҙа торлаҡтың квадрат метрының уртаса баҙар хаҡы - 48 687 һум. Республика райондарында торлаҡтың квадрат метрының уртаса хаҡы 41 384 күләмендә билдәләнгән. Дөйөм торлаҡ майҙанының бер квадрат метрының уртаса баҙар хаҡы торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждарға бүленгән субсидияны иҫәпләү өсөн кәрәк, тиелә бойороҡта. Бер йылда республикала беренсел баҙарҙа торлаҡ 8,2 процентҡа ҡиммәтләнгән. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, 2020 йылдың IV кварталында Башҡортостанда беренсел торлаҡ баҙарында бер "квадрат"тың уртаса хаҡы 68,7 мең һумға еткән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КЕМ БЫСРАТА?

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә үткән кәңәшмәлә БР Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министры Урал Искәндәров төбәктең төп экологик проблемалары тураһында белдерҙе. Былтырғы йыл йомғаҡтары буйынса республика Рәсәй субъекттары араһында атмосфераға бысратыусы матдәләр ташлау күләме буйынса 8-се урында тора. Иң бысраҡ ҡалалар - Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат.**

Өфөгә өс нефть эшкәртеү заводы һәм "Өфөоргсинтез" эшмәкәрлеге кире йоғонто яһай, Стәрлетамаҡтың экологияһын Башҡортостан сода компанияһы, "ТАУ" төркөмө предприятиелары, Салауатта - "Газпром нефтехим Салауат" бысрата. Бөгөн республика иҡтисадының нигеҙен тотоп торған барлыҡ предприятиелар ҙа производстволарын модернизациялауҙы талап итә. СССР-ҙан республикала кире мираҫ булып экологик зыян туплаған объекттар ҡала. Шундайҙарҙың береһе - элекке "Өфөнефтехим" асыҡ акционерҙар йәмғиәте. Бында 143 гектар токсик матдәләр менән бысранған шул иҫәптән диоксин булған ер, 412 мең кубометр сәнәғәт ҡалдыҡтары тупланған 8 шлам туплау урыны һәм биналары реабилитация көтә. Был объект бөгөн Рәсәй Тәбиғәт министрлығының зыянлы матдәләр тупланған объекттары дәүләт реестрына инә һәм финанслауҙы федераль кимәлдә алырға тейеш. Был йәһәттән РФ Президенты исеменә республика Башлығынан 16 апрелдә хат ебәрелгән.

Шулай уҡ һыу сығанаҡтарының бысраныуы мәсьәләһе лә киҫкен булып ҡала һәм хәл итеүҙе көтә. Бында иң ҙур зыянды Башҡортостан сода компанияһы килтерә. Республиканың торлаҡ-коммуналь хужалығы секторы предприятиелары ла, канализацияның таҙартыу ҡоролмалары булмауы йәки уларҙың һөҙөмтәле эшләмәүе арҡаһында һыуҙарҙы бысрата. Ғәмәлдәге таҙартыу ҡоролмаларының 77 проценты туҙған. 12 районда улар бөтөнләй юҡ. Йәғни уларҙа бысраҡ һыуҙар таҙартылмай.

# БЕҘҘЕҢ ТУРИЗМ...

**Бөгөн республикала эске туризмды үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә. Быйыл иһә Башҡортостан Бөтә донъя фольклориадаһын ҡабул иткәс, ул бигерәк тә иғтибар үҙәгенә сыға. Был тема менән Өфө ҡала хакимиәтенең Эшҡыуарлыҡ, ҡулланыусылар баҙары һәм туризм буйынса идаралыҡ начальнигы Азат Рауилов таныштырҙы.**

Баш ҡала сәнәғәт туризмын үҫтереү буйынса программа эшләнгән, унда ҡатнашыусы предприятиеларҙың исемлеге булдырылған. Йылдан-йыл сәнәғәт предприятиеларына экскурсиялар һаны арта бара. Әлеге ваҡытта турфирмалар уларға 10 программа эшләгән. Бынан тыш, гастрономия туризмын үҫтереү буйынса эш алып барыла. Туроператорҙар яңы гастрономия турҙары ойоштора, рестарандарҙың гастро-киске аш программаһы бар. Ҡаланың ресторан һәм кафеларында меню инглиз телендә лә яҙыла, шулай уҡ башҡорт аш-һыуы буйынса ҡушымта эшләнә. Бөгөн 106 предприятиела шундай меню бар.

Әүҙем ял һайлаусылар өсөн Өфө йылғалары буйлап кәмәләрҙә ағыу, велопрогулкалар, тау саңғыһы үҙәктәре программалары эшләнгән. Шулай уҡ экологик һәм актив туризмды үҫтереү планлаштырыла.

Оло йәштәгеләр һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән категория өсөн "Башҡортостан ғүмер оҙайлығы. Туризм" проекты тормошҡа ашырыла. Уҡыусылар, социаль төркөмдәр өсөн экскурсиялар ойоштороу ҡарала. Әлеге ваҡытта баш ҡала 263 туристик объект ҡала эсендәге турнавигация концепцияһына ингән. Шулай уҡ ваҡиға һәм эшлекле туризм да йылдан-йыл популярлыҡ яулай бара.

# АУЫЛ ИПОТЕКАҺЫ КЕМГӘ?

**Башҡортостан льготалы ауыл ипотекаһы программаһында беренсе урында. Дөйөм алғанда, илдә күпселек килешеүҙәр Волга буйы федераль округында төҙөлә, тип белдерҙеләр Росреестрҙа. Башҡортостанда йыл башынан ауыл ипотекаһы программаһы буйынса 1118 килешеү теркәлгән. 2020 йылда иһә - 2543 "ауыл ипотекаһы". Льготалы программала ҡатнашыусылар әҙер торлаҡҡа өҫтөнлөк бирә башлаған: 2020 йылда - 1753, 2021 йылдың беренсе кварталында 1215 хоҡуҡ теркәлгән.**

Ауыл ипотекаһы Иглин, Өфө, Әбйәлил, Ҡырмыҫҡалы, Туймазы, Бүздәк, Шишмә һәм Яңауыл райондарында йәшәүселәрҙә һорау менән файҙалана.

Ауыл ипотекаһы программаһында 2021 йылдан шарттар үҙгәрҙе, тип белдерҙеләр ведомствола. Хәҙер биш ҡаттан бейегерәк йорттарҙа торлаҡ һатып алырға ярамай; тәүге взнос өсөн Әсәлек капиталын ҡулланырға мөмкин. Һатып алынған торлаҡта милеккә хоҡуҡ алғандан һуң 180 көн эсендә теркәлергә һәм был хаҡта банкка хәбәр итергә кәрәк, юғиһә банк кредит буйынса ставканы арттырырға хоҡуҡлы. Шулай уҡ, әгәр кредит йорт һалыу өсөн алынған һәм ул ике йыл эсендә төҙөлмәгән икән, ставканы күтәреүҙәре ихтимал, ти белгестәр.

# ТРАМВАЙ КИЛӘ, ЮЛ БИРЕГЕҘ!

**Өфөлә трамвай селтәрен яңыртыуға 27,6 миллиард һум тотоноу ҡуҙаллана. Инвестор биргән аҡсалар ҡаланың трамвай юлын һәм энергохужалығын, деполарҙы реконструкциялауға, ҡаланың көньяҡ һәм төньяҡ өлөшөн тоташтырған трамвай линияһы булдырыуға, шулай уҡ заманса туҡталыштарҙы йыһазландырыуға, составты яңыртыуға, маршрут селтәрен оптималләштереүгә, юл хаҡын түләүҙең заманса системаһын һәм хәрәкәт итеүҙең автоматлаштырылған системаһын булдырыу һәм индереүгә йүнәлтеләсәк.**

Ошо маҡсаттан Башҡортостан Хөкүмәте "Синара - ҡала транспортын хәл итеү" компанияһы менән беренсе килешеү төҙөнө. Республика өсөн был килешеү капиталды һаҡлау һәм капитал һалыуҙарҙы дәртләндереүҙең яңы механизмын ҡулланыуҙа беренсе аҙым булып тора, инвесторҙарға ярҙам итеү йәһәтенән, дәүләт яғынан шарттарҙың оҙайлы ваҡытҡа үҙгәрмәүен гарантиялай. "Синара"ның генераль директоры Евгений Васильев билдәләүенсә, Өфөнөң һәр кешеһе өсөн мөхит унайлы булырға тейеш. Объекттарға транспортта бара алыу мөмкинлеге һәм хәлыҡтың мобиллеге тормош сифатының мөһим күрһәткесе булып тора. Транспорттың үҫеш дәрәжәһе ҡаланың, ә ҡайһы берҙә хатта төбәктең перспективаларын һәм үҫеш темпын билдәләй. Уның компанияһы Өфөнөң транспорт системаһын яңыртыу проблемаһын комплекслы ҡараш менән хәл итергә әҙер. Бөгөн трамвай экологик транспорт төрө булып һанала. Уларҙы файҙаланыу ҙа отошораҡҡа төшә, шул уҡ ваҡытта трамвайҙарҙың хеҙмәт мөҙҙәте лә башҡа төр транспортҡа ҡарағанда оҙайлыраҡ. Заманса трамвайҙар хатта тауышһыҙ булыуы менән дә уңайлы.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында күләмле акция башлана. Унда ҡатнашыу өсөн 14 майҙан 20 июнгә тиклем вакцинация пункттарының береһендә прививка эшләтергә, үҙенсәлекле код менән флаер алырға һәм уны ufa-zdorov.ru сайтында теркәргә кәрәк. 23 июндә "Вся Уфа" телеканалының тура эфирында бөтә ҡатнашыусылар араһында ҡиммәтле бүләктәр, шул иҫәптән һуңғы моделле 10 смартфон һәм Өфөлә фатир уйнатылар. Акция тураһында тулыраҡ мәғлүмәт - ufa-zdorov.ru сайтында. Ойоштороусы - Өфөнөң Ҡаланы үҫтереү фонды.

✓Республиканың баш ҡалаһында йәнә иң шәп һыбайлыны һәм атты һайлайҙар. Өфөлә "Терра Башҡортостан" төбәк ат-спорт турниры 22 майҙа башлана. Был көндө "Аҡбуҙат" ипподромында ярыштарҙың тәүге этабы ойоштоpола, унда Әбйәлил, Күгәрсен, Тәтешле, Бишбүләк, Саҡмағош районлары вәкилдәре ҡатнаша. Республика турнирының тура трансляциялары БСТ, "Вся Уфа", "Конный мир" һәм "СТ АРТ" телеканалдарында күрһәтелә. Былтыр "Терра Башҡортостан" турнирында Шишмә районынан 15 йәшлек жокей еңеү яулағайны.

✓13 майҙа Өфөнөң 22 мәсетендә Ураҙа унайынан байрам намаҙы уҡылды. Ғәҙәттәгесә, ҡалала был байрамды ойоштороуға ҙур әһәмиәт бирелә, хәүефһеҙлек сараларына ла айырым иғтибар бүленә. "БСТ", "Рәсәй 1" телеканалдарында Юғары мөфтөй, Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе Тәлғәт Тажетдиндың байрам вәғәзенең тура трансляцияһы күрһәтелде. Эпидемиологик хәлгә бәйле һәр дини ойошма санитар-эпидемиологик талаптарҙы үтәүҙе - термометрия уҙғарыуҙы, битлек кейеүҙе һәм социаль дистанция һаҡлауҙы тәьмин итте.

✓Рәсәй 1 апрелдән алты ил - Германия, Венесуэла, Шри-Ланка, Сүриә, Үзбәкстан һәм Тажикстан менән даими пассажир авиабәйләнешен тергеҙҙе. Шул уҡ көндән, Германияның авиация властары менән килешеп, Майндағы Франкфурт, Берлин маршруттары буйынса ла даими авиабәйләнеш асылды. Бынан тыш, Куба, Белоруссия, Әрмәнстан, Әзербайжан, Мысыр, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре менән даими рейстар һаны арттырыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ГӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Илдәге иң ҡәҙерле, көтөп алынған һәм күҙ йәштәре аша йылмайырға мәжбүр иткән сираттағы Еңеү көнө Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тарафынан Еңеү паркында Советтар Союзы Геройҙары Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов) менән Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин һәйкәленә, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев ҡәберенә, Дан мемориалының Геройҙар Аллеяһына ҡуйылған Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатов менән Советтар Союзы Геройы Таһир Кусимов бюсына, Тыл хеҙмәтсәндәре һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан һәм Ватанды һаҡлап яу яландарында башын һалған яугирҙарҙарҙы бер минут тын ҡалып иҫкә алыуҙан башланды.**

# ЕҢЕҮСЕЛӘР АЙЫ УЛ - МАЙ

Баш ҡалала төп байрам саралары Ленин майҙанында гөрләне. Тантаналы парадты Рәсәй Геройы Александр Достовалов исемендәге Волга буйы федераль округының Башҡортостан кадет корпусы барабансылары взводы асты. Улар артынса Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарының бүләләре - ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев исемендәге кадет мәктәп-интернатының иң яҡшы кадеттарынан торған байраҡсылар һәм почетлы ҡарауыл үтте. Октябрь проспекты буйлап 20 парад расчетында барлығы 1519 кеше уҙҙы, уларҙы йыйылма тынлы оркестр оҙатып барҙы.

Артабан парадты Вадим Задорожныйҙың Мәскәү өлкәһендә урынлашҡан Техника музейының тарихи хәрби техникаһы дауам итте. Уға ете танк, дүрт йөк техникаһы, танкыға ҡаршы өс пушка һәм ике енел автомобиль инә. Тарихи бронетехника Өфөгә автомобилдәр менән килтерелә. Т-34-76 танкыһы 1942 йылда эшләнә. Һуғышта ҡатнашҡанда уға бер нисә тапҡыр броняға ҡаршы снаряд эләгә. Зыян күргән хәрби машина армиянан сығарыла һәм оҙаҡ йылдар тимер юлында тягач сифатында ҡулланыла. Һуңынан уны Вадим Задорожный музейы үҙенә ала һәм танк үҙе йөрөй алырлыҡ хәлгә еткереп тергеҙелә. Башҡа танкылар яу йәки йылға-һаҙлыҡтарҙы сыҡҡан урындарҙа табыла һәм тергеҙелә. Уларҙың техник өлөшөндә тәүге конструкция деталдәре мөмкин тиклем һаҡлана, ә инде был мөмкин булмағанда заманса аналогия моделдәре менән алмаштырыла. Тамашасылар шулай уҡ 63494 хәрби частың 12-се айырым инженер бригадаһының заманса техникаһын - пантон паркының механизацияланған өс ауыр күперен һәм өс йылға звеноһы менән таныша алды. Хәрби техника парадын һауанан кесе авиация самолеттары оҙатып барҙы.

Байрам саралары тураһында тәьҫораттары менән уртаҡлашып, республика Башлығы Радий Хәбиров уның быйыл ойоштороу йәһәтенән сифатлыраҡ булыуын билдәләне һәм: "Барыбыҙ ҙа аралашыуға һыуһағанбыҙ, шуға ла тантанаға кеше күп килгән. Шулай ҙа коронавирус хәүефе кәмемәй, һәм беҙ бина эсендә булырға тейешле күп сараларҙы ҡыҫҡартырға мәжбүр булдыҡ. Ветерандар менән кинәнеп аралаштым. Муниципалитеттар башлыҡтарына оло йәштәгеләргә күберәк иғтибар бирергә ҡуштым. Шуға был ындай саралар тотош республика буйынса бара. Мин бигерәк тә хәрби техниканы күберәк күрһәтеүҙәрен теләйем. Улар менән балалар ҙа теләп таныша. Бөгөн парад ҡараусылар Тыуған илде һаҡларға кәрәклеген аңлай. Өфөгә "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" исеме бирелеүе лә баш ҡаланың Еңеү өсөн, тотош ил өсөн күрһәткән хеҙмәт фиҙаҡәрлегенә дөрөҫ баһа булып тора", - тип белдерҙе. Радий Фәрит улы шулай уҡ һуғыш балалары тураһында закон ҡабул ителеүе, был категория өсөн таныштмалар эшләнеүе, ҙур булмаһа ла ярҙам, шул иҫәптән медицина учреждениелары тарафынан да, ҡаралыуы, йылына бер тапҡыр аҡсалата түләүҙәр күҙалланыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Был көндә тотош Башҡортостан буйынса төрлө саралар үтте, һәр ерҙә иҫән ҡалған ветерандарҙы, тыл хеҙмәткәрҙәрен тәбрикләнеләр. Әлбиттә, бай һәм йөкмәткеле концерт программалары ла, күкте йәйғор төҫтәренә мансыған салют та байрамға рух өҫтәне.











ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# БАЛАЛАРҘЫ ҺАҠЛАЙЫҠ!

**Сит ҡайғы булмай, фажиғә берләштерә, тиҙәр. Ошо көндәрҙә генә Бөйөк Еңеү байрамы барыбыҙҙы ла берләштергәйне, унан һуң мосолмандар Ураҙа гәйетен оло ваҡиға итеп көтә инек. Көтмәгәндә-уйламағанда ҡайғы берләштерҙе: изге Рамаҙан айы тип тормай, 11 майҙа ут күршеләребеҙ Татарстандың баш ҡалаһында үҙен "Аллаһ" тип уйлаған бер әҙәм аҡтығы 175-се гимназияға инеп, юлында осраған кешеләргә һәм тыныс ҡына дәрестә ултырған уҡыусыларға ата башлай. Һөҙөмтәлә 9 кеше, шул иҫәптән 7 бала һәләк була, 30-ға яҡын кеше төрлө йәрәхәттәр ала. Ошоға бәйле 12 июнь Татарстан Республикаһында матәм көнө тип иғлан ителде.**

Өфө ҡалаһы хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһе лә һәләк булғандарҙы бер минут тын тороп иҫкә алыуҙан башланды. Ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков баш ҡала мәктәптәрен тиҙ арала хәүефһеҙлек буйынса тикшерергә, белем биреү учреждениеларына инеү режимын көсәйтергә, металл тикшереү ҡоралдарының, хәүеф төймәләренең булыу-булмауын барларға ҡушты.

Ниндәй генә хәл-торош булмаһын - тормош барыбер дауам итә: тереләргә үҙҙәре һәм мәңгелеккә юл алғандар өсөн дә йәшәргә кәрәк. Оператив кәңәшмәлә лә көн үҙәгенә башҡа бихисап мәсьәләләр сығарылды. Хакимиәттең Төҙөлөш, юлдарҙы һәм яңалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Константин Пеппе Зәки Вәлиди урамы һәм Салауат Юлаев проспекты киҫешкән урындағы юл сиселеше реконструкцияһы барышы менән таныштырҙы. Подрядсылар объектта ике сменала эшләй, әлеге ваҡытта унда 80 кеше һәм 18 берәмек техника йәлеп ителгән, тип белдерҙе ул. Бөгөнгә 28 балканың 22-һе ҡуйылған, дөйөм оҙонлоғо 73,6 метр булған күперҙең металл конструкцияларын ҡороуҙың 7-се этабы, йәғни дөйөм күләмдең 63 проценты башҡарылған.

Баш ҡала өсөнсө йыл "Башҡортостан ихаталары" республика программаһында ҡатнаша. Быйыл, бүленгән саралар күләменән сығып, 17 ихата (78 күп фатирлы йорт) территорияһын төҙөкләндереү планлаштырыла. Әлеге ваҡытта 10 ихатала эш башланған да инде.

Быйыл яҙғы һәм йәйге миҙгел һәр кемгә үҙ сәләмәтлегенә икеләтә яуаплы булыуҙы талап итә, сөнки тажҙәхмәт тә сигенергә уйламай, шул уҡ ваҡытта геморрагик биҙгәк, йәғни сыскан биҙгәге лә эргәлә генә. Республика клиник инфекцион дауаханаһының табип-инфекционисы Анастасия Нурмөхәмәтова белдереүенсә, был сирҙең иң ҙур тәбиғи сығанағы Урал һәм Волга буйы федераль округтарында. Бигерәк тә 20-50 йәшлек ир-ат йыш ауырый. Зарарланыу тын юлдары аша инә, шул уҡ ваҡытта тәбиғәттә (урамда, баҡсала һ.б.) булып, бинаға ингәс ҡулды йыумаған осраҡта ла зарарланырға мөмкин.

Земфира ХӘБИРОВА.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ашҡаҙан эрозияһы

❖ 10 өлөш андыҙ тамыры һәм тамырһабағы, 15 өлөш еркәүек (таволга вязолистная) сәскәһе һәм үләне, 1 өлөш татлы тамыр (солодка), 1 өлөш шифалы календула сәскәһен ҡушып, ваҡларға. Килеп сыҡҡан йыйылманың 1 балғалағына 1,5 стакан һыу ҡойорға һәм 5 минут парҙа ҡайнатырға. 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм үләндәрҙе һығып ташларға. Төнәтмәне ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә. Ҡалған ярты стакан дауаны төнгөләккә эсеп ятырға. Был рәүешле 2-3 аҙна дауаланырға. Әгәр ҙә тәүге аҙнала уҡ хәл яҡшырыуы тойолмаһа, 2 балғалаҡ йыйылманы 1,5 стакан һыуға һалып әҙерләп эсергә кәрәк.

❖ Әгәр ашҡаҙан һуты секрецияһы түбән булған осраҡта ауырыһағыҙ, түбәндәге дауа ярҙам итер. 20 өлөш юл япрағы (подорожник большой), 20 өлөш гөлйемеш, 15 өлөш татлы тамыр, 10 өлөш әрем үләнен, 10 өлөш меңъяпраҡ үләнен, 10 өлөш бөтнөк үләне (мята перечная) япрағын ваҡлап, ҡушырға. Килеп сыҡҡан йыйылманың 2 грамына 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, һыуығансы төнәтеп, һөҙөргә. Ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Бынан тыш, ашарҙан ярты сәғәт алда ас ҡарынға ярты стакан картуф һуты эсеү һәм ашарҙан алда көнөнә 4 тапҡыр 30-40 мл етен орлоғо төнәтмәһен (1,5 стакан ҡайнар һыуға 2 ҡалаҡ етен орлоғо) эсеү ҙә файҙалы.

### Ҡурылдай астмаһы

Ҡайын бөрөһө, кесерткән япрағы (крапива двудомная), шифалы ромашка кәрзинкәһе, күгүлән үләне (спорыш), мәтрүшкә үләне, шифалы календула кәрзинкәһен 1-әр ҡалаҡ, ҡайын япрағын 2 ҡалаҡ алып ҡушырға һәм ҡатырға ҡапта һаҡларға. 2 ҡалаҡ ваҡланған йыйылмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, сәй кеүек бешерергә һәм көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Әҙерләмә тамамланғансы эсергә. Етенсе-һигеҙенсе көнгә ауырыуҙың хәле яҡшыра.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.

✓ *Ауыр оҙон юл үтеп, командировка ҡағыҙында күрһәтелгән дүрт ай урынына һигеҙ айға һуҙылған юл ғазабынан иҫән-һау ҡайтып еткәндәрҙән өс баш малды түләтеүҙәренә иҫ-аҡылыбыҙ китә бөгөн.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Таҫтамал һәм ашъяулыҡтарҙы орнаментлағанда Дим буйы һәм Ағиҙелдең урта ағымы башҡорттарында йыш ҡына балаҫ етештереүҙәге тәжрибә ҡулланылған: геометрик орнамент асалап һуғыу ысулы менән башҡарылған.



*Аса биҙәкле таҫтамал (БР, Туймазы районы, Ҡандракүл ауылы). Г.И. Мөхәмәтшин һүрәте, 1960*

Урал алды территорияһында киң таралған рамлы урынағастар, яҫы ҡылыс һәм көрөҫтәр 50-60 см киңлектәге туҡымала ҙур ҡатмарлы биҙәктәр эшләргә мөмкинлек биргән. Таҫтамал остарындағы биҙәк, ғәҙәттәгесә, буй һыҙаттарға төшөрөлгән, урталағыһы киңерәк булған. Ҡыҙыл ерлектә ырғаҡлы киртләс ҡыя шаҡмаҡ, ҡыя сатраш, мөйөш, ике осло ырғаҡ формаһындағы төрлө төҫтәге фигуралар асыҡ күренеп торған.



*Рамлы урынағас (Көньяҡ Урал алды). Г.И. Мөхәмәтшин һүрәте. 1958*

Асалап һуғыу, йәки бүлеп һуғыу ҙа тиҙәр (закладное тканье), ысулы тураһында балаҫ һуғыуға арналған бүлектә телгә алынды. Бында шуны ғына әйтеп китеү кәрәк: малсылыҡҡа өҫтөнлөк бирелгән Башҡортостандың көньяғында бындай ысул менән үҫемлек сүстәренән туҡыма һуғыу тик көньяҡ-көнбайыш төбәктә генә осраған. Бындай әйберҙәр төньяҡтараҡ - Ыҡ һәм Ағиҙел йылғалары араһында киң таралған; Дим буйы ауылдары туҡыманы асалап һуғыу таралған өлкәнең көньяҡ сиге булып торған. Шуға ҡарамаҫтан, Әлшәй һәм Дәүләкән райондарында эшләнгән таҫтамал, ашъяулыҡ һәм башҡа әйберҙәр юғары сифаты, лабиринтҡа оҡшаш үтә ҡатмарлы биҙәкле булыуы менән айырылған. Тимәк, Дим йылғаһы буйы башҡорттарында асалап һуғыу ғәҙәти күренеш булған.



*Асалап һуғылған биҙәк (БР, Дәүләкән районы).*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ШАҢДАУ

# "ӘҘӘМ ЫШАНМАҪЛЫҠ СӘЙӘХӘТ"

**"Киске Өфө"нөң 18-19-сы һандарында журналист Сәлимйән Бәҙретдиновтың "Әҙәм ышанмаҫлыҡ сәйәхәт" тигән яҙмаларын уҡығас, тылдағылар ҙа һуғыш яланындағылар кеүек үк михнәттең әсеһен етерлек татыған икән шул, тип тетрәнелде. Ә ул ваҡиғалар тураһында тере шаһиттар менән аралашҡандар ошо хәтирәләрҙе яҙып ебәрҙе. Уларҙы гәзит уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**



## УЛ БЕҘҘЕҢ ҠАРТАТАЙЫБЫҘ

**Сәлимйән Бәҙретдиновтың "Әҙәм ышанмаҫлыҡ сәйәхәт" тигән мәҡәләһендә бәйән ителгән Украинаға мал ҡыуыусылар башлыҡтарының береһе Ғөбәйҙулла Кәлимуллин минең иремдең ҡартатаһы. Ошо арала оло ҡайнымдың беҙгә килеп еткән архивын барланыҡ. Һәр төрлө яҙмалар һаҡланған йәшник беҙгә Гөлфәриҙә әбейебеҙҙән аманат булып күскәйне.**

Яҙмаларҙан күренеүенсә лә, ишеткән-белгәнебеҙ буйынса ла, Ғөбәйҙулла Кәлимуллин 1891 йылдың 12 июлендә Илсе ауылында тыуа. Һуғыштан алда Гөләйҙә исемле ҡыҙ менән ғаилә ҡора. Дүрт балаға: Гөлфәриҙәгә, Шәрифуллаға, Рәйсәгә, Хариҫҡа ғүмер бирәләр. Ирем Рауилдың атаһы Хариҫҡа ике генә йәш булғанда әсәләре үлеп китә. Ғөбәйҙулла ҡартатай байтаҡ ҡына ваҡыт балаларҙы үҙе ҡарай. Һуңыраҡ Сабира исемле ҡатынға өйләнә. Заманына күрә уҡымышлы кеше була, руссаһын да яҡшы ғына белә. Беҙҙә бик боронғо китаптар һаҡлана. Улар ҙа ҡартатайҙыҡы булманымы икән, тип уйлайбыҙ. Ауыл хакимиәте башлығы ла, төҙөүселәр бригадаһы етәксеһе лә булып эшләй. Ҡул аҫтында эшләүселәргә хеҙмәт хаҡы яҙылған табель ҡағыҙҙары ла, аттарға дубыр (конюшня) төҙөтөү тураһындағы яҙмалары ла һаҡланған йәшниктә. Ҡартатайыбыҙ Ғөбәйҙулла заманында Илсе ауылының тарихын да яҙған булған. Үкенес, ауылдың бер намыҫһыҙ кешеһенән ҡабат әйләнеп ҡайтмай яҙма. Берәйһендә һаҡланмаймы икән ул? Табылһа, күпме мәғлүмәткә эйә булыр ине илселәр.

1939 йылда хәрби билет бирелә ҡартатайға. Һуғышҡа алынмай, хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ булыуы тураһында хәрби билетында ла яҙмалар бар, медицина хеҙмәткәрҙәре тарафынан бирелгән справка ла һаҡлана. Әммә һуғыш барған саҡта бер ни тиклем ваҡыт хеҙмәт армияһында була.

Тағы шуға иғтибар иттек: һөйләүселәр менән ҡағыҙҙағы даталар бер ни тиклем тура килмәй. "Ҡырҡ алты йыл үткән бит инде. Алдараҡ булһа, бәлки, күберәк тә хәтерләр инек. Онотолоп та бара инде", - ти Сәлимйән Бәҙретдиновҡа мәғлүмәт биреүселәр үҙҙәре лә. Йылдар үтә килә һуғыштан һуңғы ауыр йылдар ҡатламы аҫтында теүәл ваҡыт онотолғандыр ҙа, бәлки. Бына ҡартатайға бирелгән тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ һаҡланған. Уны Башҡорт АССР-ның хәрби комиссариаты 1944 йылдың 24 апрелендә, Украинаға ебәрер алдынан әҙерләп бирә. Командировка танытмаһы ла бар. Заготскот етәксеһе Ясаковтың ҡултамғаһы ҡуйылған. 1944 йылдың 30 майындағы 70-се һанлы бойороҡҡа ярашлы, 1 июндә ҡулдарына бирелгән. Командировка ваҡыты 125 көн булып, 1944 йылдың 10 октябренә тиклем, тип билдәләнгән. Ҡартатай гуртоправ, йәғни көтөү башлығы итеп ҡуйыла. Бөтмөрлөгө, йыйнаҡлығы, кәрәк саҡта талапсан да булыуы, тел белеүе лә оло юлға етәксе итеп һайланыуға сәбәп булғандыр. Кәрәклеһен теркәп барыу ғәҙәте лә һәр кемдә лә булмай бит ул. Иң мөһиме, ҡулдарына Һарытау өлкәһендә бирелгән маршрут ҡағыҙы ла һаҡланған. Унда инеү һәм сығыу пункттары итеп өлкәнең ун өс районы күрһәтелгән. Аҫтында ошондай иҫкәрмә лә бар:

1. Өлкәнең һәр районында маршрут тураһында тулы һәм өҫтәмә мәғлүмәт инеү пунктындағы контроль тикшереү посы һәм Райземотдел тарафынан бирелә.

2. Маршруттан ситләшеү мал ҡыуыуҙағы (перегона скота) башҡа тәртип боҙоуҙар кеүек үк суд тикшереүенә тапшырыласаҡ .

3. Артабанғы мал ҡыуыу маршруттары: Украинаның Тамбов, Воронеж, Курск өлкәләре.

Ауыр оҙон юл үтеп, командировка ҡағыҙында күрһәтелгән дүрт ай урынына һигеҙ айға һуҙылған юл ғазабынан иҫән-һау ҡайтып еткәндәрҙән өс баш малды түләтеүҙәренә иҫ-аҡылыбыҙ китә бөгөн. Ә ул, баҡһаң, маршрут ҡағыҙының иҫкәрмәһенең икенсе пунктында, юлға сыҡҡанда уҡ иҫкәртелгән булған икән шул. Мал ҡыуыусыларҙың һәр ҡайһыһы артабан да илгә хеҙмәт итеп йәшәй. Юл аҙабы ла онотола төшкәндер. Улар өсөн иң ҙур ҡыуаныс, иң ҙур бүләк һәм иң мөһиме - тыуған ергә иҫән-һау әйләнеп ҡайтыу булғандыр. Был фиҙаҡәрлек өсөн түштәренә орден- миҙалдар таҡмаһалар ҙа, беҙ онотмайыҡ уларҙы, яҡташтар!

**Зилә КӘЛИМУЛЛИНА.**
**Учалы районы Илсе ауылы.**

## ӘСӘЙЕМ ҺӨЙЛӘГӘНДӘР

**Беҙ күргәнде балалар күрмәһен инде, тип, йыш ҡабатлай торғайны әсәйем, Әсмә Ҡаранаева. Ул Мәләүез районы Иҫке Муса ауылынан, тыл ветераны, Бөйөк Ватан һуғышы осорон һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙы былай тип хәтерләй торғайны:**

"Украинаны немец баҫҡынсыларынан азат итеү менән беҙгә, 15-16 йәшлек йәш-елкенсәккә, шул тарафҡа мал оҙатыу бурысын йөкмәттеләр. Райондың

✓ ***Паромда беҙҙе "Учалылар!" тип ҡысҡырып эҙләйҙәр икән. Шунан беҙҙең урынға шулай уҡ Башҡортостандан һарыҡ ҡыуып китеп барғандарҙы урынлаштыралар. Волганан сығып барғанда паром ярыла ла, һыу төбөнә китәләр.***



төрлө ауылдарынан бер урынға тана малы йыйыла ла, беҙ өлкән йәштәге бер ағай менән юлға сығабыҙ. Ул ағай юлдың апаруҡ өлөшөн атҡа еғелгән, беҙҙең кейем-һалым, аҙыҡ-түлек тейәлгән арбала үтә. Кейем тигәнем шул сабата инде. Бер яҡҡа ғына биш йөҙ саҡрым самаһы ер үтергә кәрәк. Йәйәү барғас, сабата тиҙ туҙа, уны тиҙ генә алыштырмаҫҡа тырышаһың, арзан булһа ла сабатаны экономиялайһың инде, йәнәһе.

Йылы йәй көндәрендә төндәрен дала уртаһында беҙ, ергә иҫке-моҫҡо әйбер түшәп, арба аҫтына ятабыҙ, ағайыбыҙ арбала йоҡлай. Көслө ел-дауыл да, көндөҙгө эҫе ҡояш та әллә ни ҡурҡытмай, ә бына дала бүреләренең һөжүме йәнгә тейә ине. Үҙебеҙ ҙә уларҙан ҡурҡабыҙ, шул уҡ ваҡытта йөҙәрләгән баш малды ла һаҡларға кәрәк бит. Юғалған башмаҡ-тана өсөн һорау бигерәк ҡаты булды. Юлда берәй ҡазаға осрап үлеп ҡалған малдарҙың башын арбаға тейәп, отчет өсөн алып ҡайта торғайныҡ. Көтөүҙе Ырымбур өлкәһе сигендә ятҡан Орск ҡалаһына тиклем ҡыуып алып барабыҙ, урындағыларға тапшырабыҙ, ары улар ҡыуалап китә. Ә беҙ тиҙерәк тыуған яҡҡа ашығабыҙ. Унда һуғыш һәм унан һуңғы осорҙағы аслыҡ-яланғаслыҡ хөкөм һөрһә лә, тыуған яҡ, әсәй, кескәй туғандар көтә бит. Ни әйтһәң дә, тыуған йорт йылыһы үҙенә әйҙәй.

Ҡайтып, бер аҙ ял итеүгә, икенсе көтөү йыйыла, тағы юлға сығаһың. Бигерәк тә малдарҙы ҡышҡы осорҙа ҡыуалау хәтерҙә ныҡ ҡалған. Беҙҙә көндәр һыуыҡ торһа, өйгә инеп, утын менән йылытылған усаҡта йылынырға була, ә дала ягында ауылдар һирәк, мейескә лә тик тиҙәк яғалар. Сит кешеләр өйҙәренә теләр-теләмәҫ кенә индерә.

Бына шулай, мең михнәттәр күргән алыҫ Украина халҡына ярҙам итеүҙе изге бурысыбыҙ тип һананыҡ, шуға күрә эҫеһенә лә, һыуығына ла түҙҙек, бығаса бер генә лә үкенмәйем. Заманы шулай ине. Беҙ күргәнде хәҙерге йәштәргә күрергә яҙмаһын..."

**Әмир ХӘЛИТОВ.**
**Көйөргәҙе районы.**

# МИН ҮҘЕМ ӘҢГӘМӘЛӘШТЕМ

**Мин 20 йылдан ашыу Учалы радиоһында хәбәрсе булып эшләнем, Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы менән дә хеҙмәттәшлек иттем. Ун йыл элек Сәлимйән Бәҙретдиновтың яҙмаларында һүрәтләнгән ваҡиғаларҙа ҡатнашыусы өс кеше - Учалы ҡалаһынан Фәрзәнә Хәмитова, Ураҙ ауылынан Мөхәмәҙи Буранбаев, Илтабандан Әхмәт Закиров менән ҡорған әңгәмәм радионан тапшырылғайны. Был мал ҡыуған апай-ағайҙар гүр эйәһе инде хәҙер. Миндә һаҡланып ҡалған ошо әңгәмәне "Киске Өфө"гәзите уҡыусылары иғтибарына ла тәҡдим итергә булдым.**

**Мөхәмәҙи Буранбаев:** 1944 йылдың яҙында мине идараға саҡырып алдылар ҙа, азат ителгән илгә мал ҡыуып барырға кәрәк, бараһыңмы, тип һоранылар. Бармай ҡалайтаһың, барам, тинем. Шулай итеп, 5 апрелдә 450 баш малды өс төркөмгә бүлделәр ҙә, сығып киттек йәйәүләп Украинаға.

**Автор: Был йылды яҙ иртә килһә лә, үҙәндәрҙә ҡар ята, үлән үҫмәгән була әле. Тәүҙә Белоретка тиклем бесән тейәлгән арба оҙатып бара уларҙы. Урал тауҙары аша артылып, малҡайҙарға Волга һәм Дон йылғаларын йөҙөп сығырға тура килә.**

**Фәрзәнә Хәмитова:** Мал аяғы менән ҙур ара үтеп булмай, күп булһа, 15 километр үтә инек. Урал йылғаһын биш мәртәбә йөҙөп сыҡтыҡ, малҡайҙар ҙа шәп йөҙә икән. Йылғаларҙы йөҙөп сыға торғас, һыйырҙар нык ябыҡты, ашарға үлән юҡ, мал ҡайҙа етте шунда саба, ҡайны берҙәре һуҡырайҙы, уларын Башҡортостанда булғанда колхоз-совхозға тапшырып китә инек.

Юлда күрә килдебеҙ: бөтә нәмә ҡыйралған, ватылған. Һуғыш китеп бара, уның артынан беҙ китеп барабыҙ...

**Автор: Юлсыларға тегеп бирелгән күн сарыҡ Белоретҡа тиклем дә түҙмәй. Ҡыуғынсыларға ял юҡ, мал тарала, ҡаса, Белоретҡа тиклем килгәнсе кире ҡайтыу яғына йүгерә. Шулай ҙа кеше генә түгел, мал да үҙ яҙмышына күнә икән.**

**Мөхәмәҙи Буранбаев:** Көндөҙөн мал ҡыуабыҙ, кисен туҡтағас, ҡарауыллайбыҙ. Һәр көтөүгә етешәр кеше. Арабыҙҙа өс ҡатын-ҡыҙ булды. Күберәк беҙҙең кеүек малайҙарға йүгерергә тура килде инде. Урман аша Маҡар районына килеп еткәнсе этләндек.

Маҡарҙа ярты арба сабата һатып алдыҡ. Юлға сыҡҡанда күндән сарыҡ тегеп биргәйнеләр, тик ул Белоретка еткәнсе лә түҙмәне. Улар ысыҡҡа йәйелеп китте, усаҡҡа киптерергә ҡуйғайныҡ, ялҡында ҡатты ла ҡуйҙы. Апайым резина сарыҡ теккәйне, уны "ҡара көнгә" тип, тоҡсайға һалып ҡуйҙым.

**Автор: Юлсыларға йылы аш тураһында хыялланырға ғына ҡала. Һигеҙ ай буйына һөт, эремсек, ҡатыҡ менән туҡланырға тура килә уларға.**

**Фәрзәнә Хәмитова:** Райондан бер кило ит биргәйнеләр юлға сыҡҡанда, башҡа бер нәмә лә юҡ. Һөтҡатыҡ ҡына үҙебеҙҙеке булды. Әсмә исемле апайыбыҙ ҡатыҡ ойота, эремсек эшләй торғайны.

**Мөхәмәҙи Буранбаев:** Колхоз идараһынан өсәр кило һоло оно биргән булдылар, шунан йәймә бешергән булдыҡ. Бер сабата өс көнгә етә ине, шуға күрә күберәк ялан аяҡ барырға тура килде. Көн-төн буйы ямғыр яуған ваҡыттар ҙа булды. Бер ышыҡ юҡ, беребеҙҙә лә плащ һымаҡ нәмә булманы. Әле бына аптырайым: ныҡлыҡты беҙгә Хоҙай Тәғәлә биргәндер инде. Шул тиклем ыҙаланып барҙыҡ, эт күрмәгәнде күрҙек. Волгаға килеп еткәс, бар тирә-яҡ емереклек кенә ине.

**Автор: Көн дә саң-туҙан артынан барған юлсылар тыуған яҡтарына ҡасан ҡайтырҙарын да белмәй. Маҡсаттары - үҙҙәренә йөкмәтелгән бурысты үтәү. Һәләк булғандар, тигән хәбәр ҙә тарала Учалы ерендә.**

**Фәрзәнә Хәмитова:** Беҙ ул көндө паромда Волга аша сығырға тейеш инек. Бер һуҡыр башмағыбыҙ әллә ҡайҙа булды ла ҡуйҙы. Ике көн эҙләнек, ә паромда беҙҙе "Учалылар!" тип ҡысҡырып эҙләйҙәр икән. Шунан беҙҙең урынға шулай уҡ Башҡортостандан һарыҡ ҡыуып китеп барғандарҙы урынлаштыралар. Волганан сығып барғанда паром ярыла ла, һыу төбөнә китәләр.

**Автор: Һарыҡтар ғына түгел, кешеләр ҙә батып үлә был мәхшәрҙә. "Учалылар Волганы сыҡҡанда һәләк булды" тигән телеграмма Учалыға китә. Юлсыларға тағы өс көн үҙ сиратын көтөргә тура килә. Паром бәләкәй булғанлыҡтан, 50-шәрләп кенә сығаралар малдарҙы. Бары бер Ҡәзәкәй ҡушаматлы һыйыр ғына һыуға һикерә. Ярға сыҡҡас, өс көн малдарҙы ашатып, ял иттереп, артабан юлды дауам итәләр. Ә алда прожекторҙар уты, самолет гөрөлдәүе күңелгә шом өҫтәй. Әммә артҡа юл юҡ. Алда - Украина!**

**Фәрзәнә Хәмитова:** Украина халҡы беҙҙе ҡаршы алырға күмәкләп сыҡҡайны. Беҙҙең ҡыҙыл флагта "Азат ителгән районға" тип яҙылғайны. Шунан танып алғандарҙыр инде.

**Әхмәт Закиров:** Украинала ҡар яумаған ине әле. Ҡара һыуыҡ. Һыйырҙарҙы тапшырһаҡ та, таратып бөткәндәрен көтөргә тура килде. Малды таратып бөткәс, украин халҡы менән өс көн буйы баҫыуҙа эшләнек.

**Мөхәмәҙи Буранбаев:** Биҙрә менән кукуруз йыйыштыҡ. Шунан һуң поезға билет алып, һалам түшәлгән дөйөм вагонда ҡайттыҡ. Ашарға бер көнлөк ҡоро паек бирҙеләр. Шулай итеп, Өфөгә килеп төштөк.

**Автор: Тимер юлы вагонында тыуған яҡҡа ҡайта учалылар. Баш ҡалаға килеп еткәс, артабан нисек ҡайтыу мәсьәләһе килеп баҫа. Урыҫ телен белмәү сәбәпле ҡаңғырып ҡала улар.**

**Әхмәт Закиров:** Фәрзәнә лә, Мөхәмәҙи ҙә - беребеҙ ҙә урыҫса белмәй. Артабан ҡайтырға билет юҡ. Дөрөҫөрәге, билет бар, уны алырға вокзалға инһәк, беҙҙе, сарыҡ, фуфайка кейгән кешеләрҙе, ҡыуа ла сығаралар. Мунсала ҡунып йөрөйбөҙ. Беҙҙең арттан берәү ҡарап йөрөгән икән. Иртән сыҡһаҡ, беҙҙе саҡырып алды ла, беҙҙең нишләп йөрөүебеҙҙе һорашты. Украинанан мал ҡыуып ҡайтып килеүебеҙҙе нисек етте шулай аңлаттыҡ. Ул беҙгә заготскотҡа барырға кәңәш бирҙе. Шунан һуң ғына беҙгә билет алып биреп, ҡайтарып ебәрҙеләр.

**Мөхәмәҙи Буранбаев:** Беҙҙе күрергә тип бөтә ауыл халҡы йыйылды. Колхоз идараһында әйтеүҙәренсә, уларға беҙҙең үлеү тураһында хәбәр килгән, хат-маҙар булмағас, илашып, төңөлөп бөткән булғандар. Ә шулай ҙа 450 баш малдан юғалған 3-әүҙең хаҡын беҙҙән матур ғына итеп түләттеләр. Беҙгә командировка аҡсаһы тейеш ине, көнөнә 12 тәңкә, туғыҙ айға ҡабатлаһаң, күп кенә сумма йыйылғандыр инде, әммә бер тин дә түләмәнеләр...

**Гәүһәр МОЗАФАРОВА.**
**Учалы районы.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ирҙәр үлә, башын һала...

1942 йылдың ноябрь аҙаҡтарында - декабрь башында Сталинград фронтында хәл иткес ваҡиғалар башлана. Котельниково районында немецтарҙың генерал Манштейн командалыҡ иткән танк армияһы, фельдмаршал Паулюстың ҡамауҙа тороп ҡалған армияһын ҡотҡарырға ынтылып, көслө һөжүм башлай. Ҡыҙыл Армияның ошо һөжүмгә ҡаршы торған 5-се танк армияһы составында һуғышҡан 8-се атлы корпус яугирҙарына, дошманды Сталинградҡа үткәрмәү маҡсатында оператив киңлеккә сығып, немецтар биләгән торлаҡ пункттарына табан хәрәкәт итергә бойорола.

Генерал-майор Шайморатов, полк командирҙарын, политработниктарҙы йыйып, командование тарафынан ҡуйылған боевой маҡсатты, был нисек кенә ауыр булмаһын, мотлаҡ үтәү зарурлығын белдерә. Был бурыс үтә ауырҙарҙан була - башҡорт атлылары дошман самолеттарының бер туҡтауһыҙ дауам иткән бомбаға тотоуы һәҙөмтәһендә күп юғалтыуҙарға дусар ителә. Комиссар Сәғит Әлибаев ошо саҡта 275-се һәм 294-се атлы полктарҙың ваҡытлыса берләштерелеп, офицер Евграфовтың командир итеп тәғәйенләнеүе хаҡында көндәлектәренә теркәп ҡуйған. Ошо ҡыйыу командир яугирҙарҙы ике тапҡыр атаҡаға алып бара, әммә ике көндән һуң, ауыр яраланып, сафтан сыға. Уның урынына тәүҙә майор Фәйзи Ғафаров, һуңынан Хөсәйен Иҙрисов ҡуйыла. Еңел яралылар, тыл подразделениелары һалдаттары ла алғы сафҡа ебәрелә. Һуғыш хәрәкәттәре бик көсөргәнешле шарттарҙа бара.

1942 йылдың декабрь баштарында 112-се Башҡорт атлы дивизияһына Юғары Баш командование вәкиле, генерал-полковник Ока Иванович Городовиков килә, ул Граждандар һуғышы йылдарында Миңлеғәли Шайморатов менән бергә хеҙмәт иткән була. Ул офицерҙар менән кәңәшмә уҙғара, яугирҙар менән осрашып, часть алдында ҡуйылған яуаплы бурыстар хаҡында һөйләй.

1942 йылдың 16 декабрендә беҙҙең ғәскәрҙәрҙең Урта Дон һөжүм итеү операцияһы башлана. Төп маҡсат - Сталинград янында ҡамауҙа ҡалған Паулюс армияһына ярҙамға ынтылыусы немец частарын тар-мар итеү. Яңы Калитванан Түбәнге Чирскиға тиклемге 430 саҡрымға тиклем һуҙылған фронтта һуғыш хәрәкәттәре көсәйгәндән-көсәйә бара.

Башҡорт дивизияһы яугирҙары Чернышковский ҡалаһы һәм Чернышков станцияһына табан һөжүм итә. Подполковник Г.Е. Фондеранцев етәкселегендәге 294-се атлы полк, дошман оборонаһын емереп, 25 декабрь иртәһендә беҙҙең өсөн мөһим булған бер ҡалҡыулыҡты ала. 275-се полк 26 декабрҙә Деев исемле ауылға етеп, артабан боевой приказда күрһәтелгән Сиволобово ауылына ябырылып ябырыла.

Авангардҡа сығарылған 313-сө атлы полк шулай уҡ Сиволобовоға һөжүм башлай. Әммә немецтарҙың "юнкерс" самолеттары беҙҙең яугирҙар өҫтөнә бомбалар яуҙыра, ауылға ябырылып килгән яугирҙарға ҡаршы немец һалдаттары ла ҡутҡарелә. 294-се атлы полктың 1-се эскадроны, аяуһыҙ ут аҫтына эләгеп, баҙабырап ҡала. Яугирҙар артҡа табан сигенә башлай. Әммә шул моментта арттан көслө "Ура!" тауышы яңғырай. Генерал Шайморатов, һыбай килеш, яугирҙарҙы атлы атаҡаға үҙе күтәрә. "Артҡа юл юҡ! Алға, Сиволобовоға, башҡорт бөркөттәре!" - тип оран һала генерал. Беҙҙең артиллеристар ҙа ярҙамға килә, автоматтан ут яуҙырып килгән фашистар өҫтөнә миналар яуа. 313-сө полк командирының политбүлек буйынса урынбаҫары Байғужа Сәйетгәлин атлы атаҡа башында бара. Ошо ҡеүәтле һөжүм уңышлы тамамлана: дошман яу яланын ташлап, артҡа сигенә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Бөгөнгө балаларҙы элеккеләре, совет осоро етемдәре менән сағыштырғанда, айырма - иҫ китерлек. Элеккеләрендә инициатива күп булған, улар булғанына шөкөр итергә өйрәнгән. Хәҙергеләр - ҡулланыусы, улар әҙергә өйрәнеп бара.*



# ЙӨРӘКТӘРҘЕ

**Хәтер йомғаҡтарын таратып, тарих төпкөлөнә күҙ һалһаҡ, бынан 100 йыл элек булған ваҡиғалар ҙа кисәгеләй күҙ алдынан үтә: Граждандар һуғышы, революция, ҡот осҡос аслыҡ. Ошо ваҡытта, 1921 йылдың майында, яңы ойошторолған Башҡортостан Хөкүмәте башҡорт балаларын һаҡлап ҡалыу өсөн Өфө ҡалаһында балалар йорто асыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Билдәле шәхес Шәһит Хоҙайбирҙин был инициативаны үҙ ҡулына ала һәм балалар йорто асыла. Тәүге ваҡытта бында тик бәләкәй, мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы ғына йыялар һәм бер мәсьәләгә иғтибар итәләр: былай эшләгәндә төрлө йәштәге бер туған балаларҙы айырырға тура килә, ә райондар буйынса ундайҙар бихисап. Шуға балалар йортон үҫтереү, киңәйтеү ихтыяжы килеп тыуа. Һөҙөмтәлә балалар йорттарын ҡушып, 3-17 йәшлек ҡан-ҡәрҙәш балаларҙы бергә тәрбиәләү маҡсатында ҙур бинаға күсерәләр. Шәһит Хоҙайбирҙин вафат булғас, 1924 йылда, учреждениеға уның исеме бирелә. Бөгөн ул Башҡортостан Республикаһының Етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар өсөн дәүләт бюджет учреждениеһы, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Ғаилә тәрбиәһенә булышлыҡ итеү үҙәге тип атала. Үҙ эшмәкәрлегендә төп девиз итеп "Йөрәктәрҙе йылытыр йорт" тигән һүҙҙәрҙе алған учреждениеның үткәненә һәм бөгөнгөһөнә күҙ һалыу, яҡындараҡ танышыу маҡсатынан бер нисә сәғәт уның эсендә булып, социаль педагог Люциә ӘХМӘТКИРӘЕВА һәм үҙәк директоры Фәнисә БӘҘРЕТДИНОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Исемен заманға яраҡлаштырып үҙгәртеүгә ҡарамаҫтан, бындай ойошмалар халыҡ телендә барыбер күберәген күңелде өшөткөс атама менән йөрөтөлә - балалар йорто. Бер яҡтан ҡараһаң, балалар бер гонаһһыҙ, саф күңелле, икенсе яҡтан, улар бала саҡтан, ҡайһылары хатта әсә ҡарынында уҡ аяуһыҙ яҙмышҡа дусар ителгән. Педагог булараҡ, етем балалар менән эшләү ниндәй һабаҡтар бирә?**

**Ф. Бәҙретдинова:** Бынан 16 йыл элек ошо учреждениеға директор булып килдем. Балалар йорто, ғөмүмән, шундай система - ни тиклем уның эсенә нығыраҡ инәһең, шул тиклем һорауҙар арта, күбәйә. 17-се йыл эшләү дәүеремдә барыбер ҙә һорауҙарыма яуап табып бөтә алмайым, сөнки етемлектең милләте лә, төҫө лә юҡ, аңлап бөтөп булмай торған йөрәк өҙгөс бер күренеш. Эш урыныбыҙ балалар йортонда булһа ла, ул эш түгел, ул - йәшәү, ошо балалар менән бер һулыш алырға өйрәнеү. Коллективҡа осраҡлы кешеләр килеп эләгә икән, тимәк, ниндәйҙер сабыйыбыҙҙың яҙмыш дәфтәрендә бер бит йыртылып ҡалды тигән һүҙ. Сөнки ошо тәрбиә процесы - йәшәү рәүеше өҙлөкһөҙ бара, бер генә ерҙә лә хата ебәрергә тейеш түгелһең. Балалар йортонда Хоҙай биргән көс менән йәнле, ғәмле кешеләр генә эшләй ала. Аллаһы Тәғәлә беҙгә һынау бирә, тибеҙ бит, балалар йортонда эшләү - ул көн дә һынауҙар аша үтеү, янда тартылған уҡ кеүек һең. Бер бала бер һорау менән инә, икенсеһенә икенсе мәсьәләне хәл итергә кәрәк, берeһе ауырып киткән - уның проблемаларын йырып сығырға кәрәк, сөнки беҙгә һап-һау ғына балалар килмәй, төрлө хәлдәр була. Бер баланың яҙмышы икенсеһенә оҡшамаған, уларҙы бер төрлө генә тәрбиәләү рецебы юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ улар менән бергә тормошто таныйбыҙ, тормошто өйрәнәбеҙ, күңел байлығыбыҙҙы арттырабыҙ. Ғәҙәти мәктәптә беҙ балаларға дәрес бирһәк, бында балалар беҙгә һабаҡ бирә, биргән һабаҡтары ҡабатланмай, йәғни беҙ күп нәмәгә уларҙан өйрәнәбеҙ.

**Ғәмәлдә, балалар йорто менән ғаилә тәрбиәһенә булышлыҡ итеү үҙәге араһында айырма нимәлә?**

**Л. Әхмәткирәева:** Был йортта 2005 йылдан бирле эшләйем. 2015 йылда үҙәктә балаларҙы ғаиләгә урынлаштырыуға булышлыҡ итеүсе хеҙмәт булдырылды. Уның төп маҡсаты - һәр баланың ғаиләлә йәшәү, ғаиләлә тәрбиәләнеү хоҡуғын тормошҡа ашырыу. Һәр бала ғаиләлә йәшәп, улым, ҡыҙым, балам, тигән наҙлы һүҙҙәрҙе ишеткеһе килә. Шуға күрә, бала беҙгә килеп эләгеү менән төрлө юлдар аша уның туғандарын табыу буйынса эш башлайбыҙ. Иҫән ата-әсәйҙәр менән осрашыу юлдарын ҡарайбыҙ, яҡындары менән булған бәйләнештәрҙе һаҡларға, нығытырға тырышабыҙ. Һәр бала балиғ булғас үҙенең затын, нәҫелен табыу теләге менән яна. Шуға күрә, бала ошо эҙләнеүҙәр юлында күңелһеҙ хәлдәргә юлыҡмаһын өсөн беҙҙең профессиональ ярҙам бөгөн һәм ошо мәлдә мөһим.



Хоҡуҡтарынан мәхрүм ителгән атай-әсәйҙәр үҙҙәрен ғәйепле тойоп, сабыйҙары янына килергә оялып та тороуы мөмкин. Уларға бәйләнешкә сығып, "Килегеҙ, көтәбеҙ, балағыҙ менән аралашып йәшәргә кәрәк, беҙ уны бергә тәрбиәләргә тейешбеҙ", тип аңлатабыҙ, килә алмағандарына үҙебеҙ барабыҙ. Беҙҙә ике бер туған малай тәрбиәләнә, уларҙың әсәләрен ике йыллап эҙләнек - бар ул, бер урында ғына йәшәмәй. Бер әхирәтендә туҡталғанында барып таптыҡ. Шулай уның эргәһенә йылына бер барып әйләнәбеҙ. Нисек кенә булмаһын - балаһы өсөн, хатта уларҙы бәләкәй саҡтан уҡ айырһалар ҙа, ул барыбер әсәй. Беҙҙең учреждениенан сыҡҡас, бала барыбер уны эҙләйәсәк.

**Ф. Бәҙретдинова:** Хатта ул бер тапҡыр килеп күрмәһә лә, бала өсөн әсәй алыҫтағы иҫ киткес бер яҡты ҡояш кеүек. Шундай аңлатып бөтмәҫлек хәҡиҡәт. Хатта имен ғаиләләрҙә лә ата-әсәне ул хәтлем ҡәҙерле итеп күрмәгәндәр бар. Ә был балалар шул тиклем әсәйҙәрен яҡын күрәләр, ошо ике бер туғандың бәләкәсе күстәнәстәрен, үҙенә бирелгән бүләктәрҙе әсәһенә тип йыя, һүрәттәр төшөрә. Әсәләре эргәһенә оло байрамға барғандай әҙерләнә. Әсәй яғынан бер нәмә лә, хатта сәләм дә, файҙа ла юҡ, әммә иммәһәм дә әсәм яҡшы, тигәндәй, балалар өсөн иң ҡәҙерлеһе - әсәй. Әгәр әсәй бала өсөн ҡояш була алмай икән, уның образын икенсе бер яҡын кеше алыштырырға тейеш.

Үҙәктең эш процесы баланы ғаиләгә әҙерләүгә ҡоролған. Беренсенән, беҙ балалар йортон Хөкүмәттең 2015 йылдың 15 сентябрендәге 481-се ҡарары буйынса үҙгәртеп ҡороп, йәшәү шарттарын ғаиләләге шарттарға яҡынлаштырҙыҡ. Ғаилә-төркөмдәрҙә 8 бала, унда бер туғандар, бер-береһе менән электән таныш булғандар, беҙгә тиклем бергә тәрбиәләнгәндәр бергә йәшәйҙәр. Һәр ғаиләнең айырым гардеробы, ашау, душ-бәҙрәф, ял бүлмәләре бар.

Ә эшкә килгән ваҡытта - 2005 йылда - балалар йортонда 130 бала ине, барыһы бергә бер ашханала ашай, армиялағы кеүек, 10-12-шәр бала бергә йәшәгән бүлмәләр бар ине. Хәҙер бүлмәләрҙә 2-3-әр бала йәшәй, балаларҙың үҙе менән ҡалыу киңлеге бар. Эштә лә кеше араһында булыу арыта бит, балаларға ла шулай, уларҙың да үҙ алдына ғына ҡалып, үҙ тормошона, үҙ уйҙарына сумғыһы килә, уларҙың ундай минуттары күп, сөнки улар шул тиклем яҙмыш тарафынан ҡыйырһытылып килгән, хатта атаһы әсәһен балаһының күҙ алдында үлтергән осраҡтар ҙа бар. Бала күңеле шундай ҡурҡыныс хәлдәрҙе кисереп килә.

**Элекке балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр менән хәҙергеләре араһында айырма бармы? Сөнки хәҙерге балалар йүнле атай-әсәй тәрбиәһен күрмәгән, күптәренең күңеле ҡатҡан, ышанысы бөткән…**

**Ф. Бәҙретдинова:** Эйе, улар ябай образдарҙы ла икенсе төрлө ҡабул итә: атай-әсәй эсергә, һуғышырға тейеш. Бер генә миҫал: ғәҙәттә, барыһын да иләктән үткәреп, ентекләп тикшереп кенә эшкә алам, әммә бер хеҙмәткәрҙе, саф башҡорттар йәшәгән райондан булғас, артыҡ соҡсоноп тикшереп торманым. Мәктәпкәсә йәштәге балалар төркөмөнә ҡуйҙыҡ. Ә был кеше алкоголь ҡулланыу менән мауыҡҡан булған икән. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң ҡыҙҙар уның эшкә "төшөрөп" килеүе тураһындағы шиктәрен белдерҙе. Әммә иң шаҡ ҡатырғаны: кескәйҙәрҙең барыһының да уны яратыуы, уны уратып алып һыйынышып ултырыуы, "әсәй еҫе килә", тип әйтеүе булды. Был бит ҡот осҡос: балаларға әсә һөтө менән араҡы еҫе әсәй еҫе булып ингән һәм хәтерендә ҡалған.

Эйе, дөрөҫ әйтәһегеҙ, бөгөнгө балалар шул тиклем кешеләргә ышаныс юғалтып килә, сөнки уларҙы иң яҡын кешеләре алдаған. Тәүге осорҙа улар өсөн үҙҙәрен ғаиләнән алған опека ла, беҙ ҙә - дошман. Беҙҙең яҡшылыҡ теләгәнебеҙҙе аңлай алмай. Шуға балалар килгәнде күтәп алып, һәр беребеҙ уның менән һөйләшәбеҙ, нисек булһа ла күңеленә юл табырға тырышабыҙ. Ҡайһы бүлмәгә ҡуйырға, кем менән урынлаштырырға тип баш ватабыҙ, ҡайҙан килеүенә ҡарап, беҙҙә таныштары юҡмы икәнен асыҡлайбыҙ. Хәҙер Үҙәгебеҙ Башҡортостан Республикаһының Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының көслө командаһына ҡарай һәм бергәләшеп етемлектең сәбәптәрен төптән эҙләйбеҙ, төрлө проекттарҙы тормошҡа ашырабыҙ, ғилми күҙлектән өйрәнәбеҙ.

Бөгөнгө балаларҙы элеккеләре, совет осоро етемдәре менән сағыштырғанда, айырма - иҫ китерлек. Элеккеләрендә инициатива күп булған, улар булғанына шөкөр итергә өйрәнгән. Хәҙергеләр - ҡулланыусы, улар әҙергә өйрәнеп бара, сөнки уларға бар нәмәне әҙерләп биреп кенә торалар. Бөгөн балаларға үҫешер өсөн барлыҡ шарттар бар, әммә инициатива етешмәй. Сәбәбе - йә бала үҫмер осоронда килеп эләгә, бер-ике йыл ғына тәрбиәләнеп өлгөрә. Элеккеләрҙең гендарына алкоголь кермәгән, улар айыҡ аҡыллы, таҙа рухлы балалар булған, ә хәҙергеләргә бер-ике йылда ғына яңы тормош нескәлектәрен биреп бөтөп булмай. Беҙгә ошо балаларҙың аңын да, тәнен дә, йәнен дә, күңел яраларын да дауаларға кәрәк.

**Л. Әхмәткирәева:** Ысынлап та, бала беҙгә ниндәй багаж менән килгән - шул ҙур роль уйнай. Һирәк-мирәк булһа ла, ата-әсәләре насар юлда булмаған балалар ҙа осрай. Уларҙы йә бала табыу йортонда уҡ ҡалдырып киткәндәр, шуға күрә улар тормоштоң кире яҡтарын күреп өлгөрмәгән. Уларҙы тәрбиәләү үҙе бер йүнәлеш буйынса бара. Ә инде ата-әсәләре ҡот осҡос тормошта йәшәгән, шуны күпмелер күреп өлгөргән балалар тиҙ генә үҙгәреп китә алмай. Тормоштоң матурлығы, яҡтылығы, тәртип уларға оҙаҡ һеңә.

Хәҙерге уңайлыҡҡа ынтылыу, матур кейем, тәмле ризыҡ, телефон, интернет - бына ошоноң кеүек замана күренештәрен дөрөҫ ҡуллана белмәүҙәре менән дә айырыла хәҙерге балалар. Ҡулланыусы ҡарашы көслө һәм артығы менән, сөнки балалар йорттарында бер әйберең туҙһа, шунда уҡ икенсеһе бирелә, йыртылды икән - яңыһын тотторалар. Баланың әйбер, дәфтәр, уҡыу әсбаптары тип башы ҡатмай - уның бер борсолоуы ла юҡ. Система балаларҙы ни тиклем ҡәҙерләп ҡурсалаһа ла, шул ҡулланыусы ҡарашы уларҙы боҙа. Ауыл ерҙәрендә балаларға төрлө эштәр табылып торһа, ҡала ерендә ундай эштәр юҡ. Беҙ ҙә уларға хеҙмәт тәрбиәһе бирергә тырышабыҙ, әммә етерлек кимәлдә түгел.

**Ғаиләлә ата-әсә ниндәй, уларҙың холҡо-характеры балаларға күсә. Бында ла тәрбиәселәрҙең холоҡ-фиғеле балаларға күсәме?**

**Ф. Бәҙретдинова:** Әлбиттә, беҙ бер ваҡытта ла бер-беребеҙҙең йөҙөн йыртып, тәмһеҙләшеп йөрөмәйбеҙ. Һәр кем үҙ эшен, үҙ бурысын белә. Минең өсөн ошонда эшләгән коллектив - алтынға бәрәбәр, сөнки улар көн дә һынауға әҙер торған кешеләр. Маҡтанып әйтмәйем, башҡа күп коллективтарҙан айырмалы, беҙҙә таҙа, сәләмәт мөхит хөкөм һөрә. Бөтөнөбөҙ бергә бер һулышта йәшәйбеҙ. Мөхит ҙур роль уйнай. Был бит мәктәп түгел, был - йорт. Балалар көн оҙоно ғына түгел, тәүлек әйләнәһенә, аҙналар, йылдар дауамында ошо йортта йәшәй. Уларҙың һәр минуты ошо һауаны һулап үтә - таҙа һауамы ул, бысраҡмы - барыһы ла тәрбиәселәрҙән тора.

Ғәҙәти ғаиләлә нимәләр күҙәтәбеҙ - бында ла шундай хәлдәрҙе кисерәбеҙ: балалар ғашиҡ була, тәүге мөхәббәт хистәренән яныпкөйәләр, илашалар. Ҡыҙҙары, егеттәре менән таныштыралар, территорияла ғына прогулкаға сығып йөрөргә лә рөхсәт итәбеҙ. Уларҙы тыйып, ҡасып киткән хәл-торошҡа еткергәнсе, күңелдәренә инеп, аңлаһаң, ҡайҙа киткәнен белһәң, өйҙәге әсәй кеүек серҙәш булһаң, улар ҙа һинең ышанысыңды аҡлай. Шуға һәр хәл-торошҡа балалар күҙлегенән ҡарап, уларҙы аңларға тырышабыҙ.

**Ошо үҙәктә генә түгел, ғөмүмән, балалар йорттарында тәрбиәләнгән балаларҙың 95 проценты социаль етем тигән статистика мәғлүмәттәре бар…**

**Л. Әхмәткирәева:** Дөйөм шулай, ә беҙҙә был һан 80 процент тәшкил итә, йәғни уларҙың атай-әсәйҙәре бар. Ҡалғандары - үкһеҙ етемдәр. Әммә уларҙың да ата-әсәләре насар юлдан киткән. Бер генә осраҡ булды - бер ҡыҙҙың әсәһе фажиғәле һәләк булғандан һуң килеп эләкте, туғандары үҙҙәренә алып өлгөрмәгәйне. Нормаль ғаиләләрҙә бала етем ҡалғанда ла туғандары үҙҙәренә тәрбиәгә ала, бик һирәк осраҡта ғы-

# ЙЫЛЫТЫР ЙОРТ

***✓ Был - йәмғиәттең фажиғәһе. Балалар йорттарының күплеге һәм уларҙың тотош бер быуат эшләүе дәүләттең йөҙөн биҙәмәй, сөнки алдынғы ҡарашлы, иманлы, халҡы өсөн янған йәмғиәттең балалар, ҡарттар йорттары булмай.***

на балалар йортона килеп эләгәләр.

**Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай, тиҙәр. Насар тәрбиә өлгөһөн күреп килеп, һуңынан бында матур тәрбиә, мөнәсәбәт күреп үҫеп, бынан сыҡҡас, ҡабат тәүге тормошона кире ҡайтмайҙармы? Ни тиһәң дә, ҡаны, гены ағыуланған... Уларҙың артабанғы тормошо менән ҡыҙыҡһынаһығыҙмы, улар үҙҙәре килеп йөрөймө, ғөмүмән, тормоштары артабан нисек дауам итә?**

**Л. Әхмәткирәева:** Әлбиттә, киләләр, ярҙам һорайҙар. 18 йәштәре тулғас, фатирға сиратта тороусылар документтар яңыртыу, ғариза яҙыу кеүек һорауҙар менән килә. Уҡыу йорттарына кереү ваҡыты еткәс, тағы һорауҙары тыуырға мөмкин. Шуға, теләйһеңме, юҡмы, бәйләнештәр өҙөлмәй, бала беҙҙең учреждение стеналарын ҡалдырып киткәс тә улар менән эшләүҙе дауам итәбеҙ. Икенсе яҡтан, хәҙер юғары технологиялар заманы, үҙҙәре килмәгәндә лә йәһәт кенә интернет селтәре аша һөйләшеп алабыҙ, һорауҙарына яуаптар бирәбеҙ, юлыбыҙ төшһә, инеп сығабыҙ, уларҙың юлы төшһә, улар кереп һөйләшеп сыға.

Детдом балаһы күңеле ҡыйырһытылған булһа ла, башҡа балаларҙан нимәһе менән айырыла: ул үҙенә генә таянып, үҙенә генә ышанып өйрәнгән. Уларҙың шундай көслө яғы бар. Улар кеше нимә әйтер тип уйламай, ниндәй мөмкинлек бар, шуны файҙаланырға тырыша һәм оҙаҡ уйлап тормай. Әйтәләр бит, "Аҡыллы булып, бер ғәмәл дә ҡылмағанға ҡарағанда, уйламайынса нимәлер эшләү яҡшыраҡ" (Лучше безумное действие, чем умное бездействие). Был тап ошо балаларға тура килә лә инде. Уларға кешенең нимә тип әйтеүе түгел, ә йәшәү өсөн көрәш мөһим.

Үҙәктән сығыусылар махсус һөнәри белем биреү учреждениеларын тамамлай, бәғзеләре юғары уҡыу йорттарына ла инә. Ағаһы Өфө нефть техник университетын тамамлағайны, хәҙер һеңлеһе шунда уҡып йөрөй. Мәктәптә уҡығанда тыныс ҡына, уртаса ғына уҡыған ҡыҙ ине. Бына шулай аптыратып та ҡуялар. Шуға, балалар йортонда тәрбиәләнеүселәргә икенсе сорт балалар тип ҡарарға ярамай - улар ҙа беҙҙең кеүек, әммә тормош тарафынан нығырыҡ ҡыйырһытылған кешеләр.

**Ф. Бәҙретдинова:** Балалар йортонан сыҡҡан һәм насар юлда йөрөгән берәүҙе күрһәләр, барыһын да шундай икән тип фекер йөрөтәләр. Ә бит бындай насар юлға баҫҡандар, юлдан яҙғандар беҙ ғәҙәти күреп өйрәнгән ғаиләләрҙә лә бар һәм бик күп. Тулы ғаиләләр, киреһенсә, бындай кире күренештәрҙе йәшерергә, ғаиләһенең абруйын һаҡлап ҡалырға тырыша. Ә беҙ тәрбиәләнеүселәребеҙҙең һәр береһен белеп торабыҙ, сөнки улар беҙҙең учреждениенан сығып киткәс тә уларҙан тулыһынса азат була алмайбыҙ.

Күптәр балалар йорттарында тәрбиәләнеүселәрҙең яҙмышын белмәй. Уларҙы аңлау өсөн аҙға ғына булһа ла ошо балаларҙың күлдәген кейеп, үҙеңде уларҙың урынына ҡуйып ҡарарға кәрәк. Беҙҙең балалар ғәҙәти мәктәптә уҡый, был да балаларға ҙур тормошҡа сығыу өсөн ҙур адаптация булып тора.

**Ошо мәктәп балалары, ата-әсәләр уларҙы нисек ҡабул итә?**

**Ф. Бәҙретдинова:** 99-сы мәктәптә балаларыбыҙ өс тиҫтә йыллап уҡый. Белем усағы коллективы менән бер булып бергә эшләйбеҙ. Бер мәлдә мәктәпте ябыу тураһында һүҙ барҙы. БР мәғариф министрына барып, хәл-торошто аңлатып, һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итә алдыҡ, сөнки барлыҡ мәктәптәр ҙә балалар йорттарынан килгән балалар менән эшләү нескәлектәрен, уларҙың үҙенсәлектәрен аңлап бөтөрә алмай. Мәктәптәге уҡытыусылар, ата-әсәләр менән бергә эшләп өйрәнгәнбеҙ. Улар беҙҙең балаларҙы нисек бар, шулай ҡабул иткәндәр һәм проблемалар юҡ, коллектив та аңлай белә. Мәктәптә уҡыған синыфташтары тыуған көндәренә ҡунаҡҡа саҡыра, улар беҙҙең байрамдарға килә, шулай улар менән бер ғаилә булып бөткәнбеҙ. Мәктәптән ундыҡ тип әйтергә була. Синыфташтарының ата-әсәләре беҙҙең балаларҙы ялдарға һорап, үҙҙәренә алып ҡайта. Закон буйынса, эйе, беҙ балаларҙы ебәрергә тейеш түгел, әммә кешелек сифаттары закон менән генә көйләнә алмай.

**Үҙәктән сығыусылар араһында махсус урта һөнәри белем биреү, юғары уҡыу йорттарына инеү статистикаһы ниндәйерәк?**

**Ф. Бәҙретдинова:** Беренсенән, беҙҙең балалар 9-сы синыфтан һуң махсус һөнәри уҡыу йорттарына инеү яғын ҡарай. Сөнки тейешенсә атай-әсәй тәрбиәһе ала алмаған балаларҙың база белемдәре лә ныҡлы түгел, шуға күрә БДИ тапшырыу ҙа ҡурҡыта. Икенсенән, 9-сы синыфтан һуң һөнәр ала башлау улар өсөн уңайлыраҡ та. Мәҫәлән, быйыл 11 бала 9-сы синыфты тамамлай. Бөгөнгө көндә улар барыһы ла ҡайҙа, ниндәй колледж-техникумға барырын белә, сөнки был эш алдан уҡ башлана. Уҡыу йылы башынан уҡ барасаҡ уҡыу йорто, йәшәйәсәк ятағы менән таныштырабыҙ. Уҡыу йорттарын һайлағанда унда элекке сығарылыштарҙан уҡыусылар булғанлығына ла иғтибар итәбеҙ, сөнки балалар йортонда ҡасандыр йәшәгәндәр уларға туған кеүек. Икенсенән, һайлаған һөнәрҙәре үҙҙәрен киләсәктә ашата алырлыҡ, эш табырлыҡ булырға тейеш. Шуны ныҡ күҙ уңында тотабыҙ.

Профориентация - күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә, хәҙер балаларҙы эшкә алырға, эшкә урынлаштырырға мөмкин. Әммә, әгәр беҙҙең учреждение балалары эшкә урынлашһа, уларҙың пенсияһы килеүе туҡтай. Шул уҡ ваҡытта балаларҙың эшләргә теләктәре бар. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Айгөл Гәрәева етәкселегендәге беҙҙең Үҙәктең попечителдәр советы менән һөйләшеп, кәңәшләшеп, ике малайыбыҙҙы эшкә урынлаштырҙыҡ. Улар дәрестән ҡайтҡас, билдәле бер ваҡытта автосервиҫка эшкә йөрөй, машина ремонтларға өйрәнә. Юл йөрөргә карталар бирәбеҙ, барып ҡулаҡса эшләп ҡайталар.

Минән бик йыш: "Һеҙҙең үҙәктән сыҡҡан балалар араһында һуңынан билдәле булып киткән кешеләр бармы?" - тип һорайҙар. Беҙҙең коллектив өсөн уларҙың билдәле булыуынан да бигерәк үҙҙәренә кәрәкле һөнәр алып, ғаилә ҡороп, аяҡтарында ныҡ баҫып тороуҙары, сабыйҙарын үҙҙәре тәрбиәләп үҫтереүе ҙур ҡаҙаныш һәм ғорурлыҡ. Уларҙың юғары уҡыу йортон тамамлауы түгел, бары тик ошо йәмғиәттең төбөнә тәгәрәмәй, уның һынауҙары алдында ныҡлы булып ҡала белеүҙәре мөһим. Эшебеҙҙең һөҙөмтәһе ошо.

**Башҡортостан буйынса әллә күпме балаһыҙ ғаиләләр бар. Улар һеҙгә килеп, тәрбиәгә, ғаиләгә бала ала. Кире ҡайтарыу осраҡтары буламы, балалар ғаиләләргә бирелгәс, улар менән бәйләнештә тораһығыҙмы?**

**Л. Әхмәткирәева:** Үкенескә күрә, тәрбиәгә бала алып, кире ҡайтарған осраҡтар ҙа бар, әммә күп түгел, өс-дүрт йылға бер булып тора. Бер биш йыл тирәһе элек, әсәһе лә, өләсәһе лә төрмәлә ултырған бер баланы патронат ғаиләгә тапшырғайныҡ. Бала шундай матур тәрбиә алып, башҡорт теленә өйрәнеп, мәктәптә ихлас уҡып йөрөй ине. Бер арала әсә кеше төрмәнән сығып, хоҡуғын яҡлап, баланы үҙ тәрбиәһенә алды. Үкенескә күрә, һуңынан, төрлө сәбәптәр арҡаһында бала ҡабат приютҡа эләкте. Шундай тарих булды.

Бөгөнгө тәрбиәләнеүселәрҙең дүрттән бер өлөшө - кире ҡайтарылған балалар, йәғни ҡасандыр ата-әсәләре иркенән мәхрүм ителеп, олатай-өләсәй тәрбиәһенән алынған ейән-ейәнсәрҙәр. Быының сәбәптәре нимәлә... Үкенескә күрә, олатай-өләсәйҙәрҙең хәҙерге заман үҫмерҙәрен тәрбиәләү өсөн ресурстары ла етерлек булмай. Шул сәбәпле кире ҡайтарыу осраҡтары килеп сыға. Ә баланы ғаиләгә алып, алама булды, урлаша, тәртипһеҙ һ.б. сәбәптәр менән кире ҡайтарыуҙар бөтөнләй юҡ. Хатта балаларҙың сәләмәтлек торошо ла тәрбиәгә алыусы ғаиләләрҙе ҡурҡытмай. Хәҙер шуныһы ҡыуаныслы - бала алырға теләүсе кандидаттарҙы үҙебеҙ уҡытабыҙ. 80 сәғәткә ҡаралған махсус әҙерлекте үҙебеҙҙең психологтар, медперсонал, юристар алып бара. Бындай әҙерлек курстарында улар белем алыу менән бергә һаулыҡтары сикләнгән балалар менән эшләү үҙенсәлектәрен дә өйрәнә. Шуға күрә бындай балаларҙың да ғаиләгә тәрбиәгә китеү мөмкинлектәре киңәйҙе.

**Ф. Бәҙретдинова:** Ғаиләгә бала алырға теләүселәр менән эшләү системаһы йылдан-йыл камиллаша бара. Балалар йорттарынан бала алырға килеүселәр һаны әлегә артыҡ күп түгел, улар алтынға бәрәбәр. Уртаса статистика буйынса айына бер генә лә булырға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта беҙҙә 2018 йылдан матур бер остазлыҡ (наставничество) проекты эшләп килә. Уны "Беҙҙең балалар" шәфҡәтлелек фонды менән берлектә тормошҡа ашырабыҙ. Был фонд бөтә республика буйынса балалар йорттарында һәм үҙәктәрҙә тәрбиәләнеүсе балаларға остаздар әҙерләй. Был шул тиклем матур күренеш. Балалар үҙҙәренә генә тип тәғәйенләнгән остаздарын көтөп ала. Күптәренең бит килеп хәлдәрен белеүсе лә юҡ. Остаздар - үҙҙәре теләп аңлы рәүештә килгән әҙерлекле ирекмәндәр, йәштәр. Улар - баланың дуҫы, шәхсән һинә генә килгән кеше, бергәләп киноға баралар, баланың ҡыҙыҡһыныуҙары менән йәшәйҙәр: ниндәйҙер түңәрәккә йөрөтөү мөмкинлеген ҡарай, ҡайҙалыр ял итергә алып барырға, өйөнә лә алып ҡайтырға, хатта ҡунаҡҡа, каникулдарға ла алып ҡайтып йөрөргә мөмкин. Бының өсөн үҙҙәре йәшәгән райондағы опека бүлегенән рөхсәт алыу ғына кәрәк. Балалар остаздары булыуы менән ныҡ ғорурлана һәм беҙгә лә рәхәт. Балалар ҙа бер үк шарттар, бер үк кешеләр араһында арый, уларға ла ошо мөхитте алмаштырып алыу кәрәк. Балалар йорттарынан сығып киткәс тә бала остазы менән бәйләнешен өҙмәй. Остаздар - улар беҙҙең менән бер фекерле, бер уйлы кешеләр. Бөгөнгә, Аллаға шөкөр, 95 процент бала кемдәре менән дә булһа аралашып тора, бары 5 кенә процент баланың бер кеме лә юҡ. Ошондай балаларға тәү сиратта остаздар тәғәйенләнә лә инде.



**Ғәҙәттә, 100 йыллыҡты юбилей тип ҡабул итергә күнеккәнбеҙ, әммә балалар йортоноң 100 йыллығын билдәләүҙе байрам тип әйтергә тел дә әйләнмәй, күңелдә лә ниндәйҙер ауыр тойғо ята...**

**Ф. Бәҙретдинова:** Дөрөҫөн әйткәндә, был - йәмғиәттең фажиғәһе. Балалар йорттарының күплеге һәм уларҙың тотош бер быуат эшләүе дәүләттең йөҙөн биҙәмәй, сөнки алдынғы ҡарашлы, иманлы, халҡы өсөн янған йәмғиәттең балалар, ҡарттар йорттары булмай. Дин алға киткән илдәрҙә бит бындай учреждениелар юҡ. Ҡасандыр сараһыҙлыҡтан килеп сыҡҡан был проблема - беҙҙең йәмғиәт өсөн кире күренеш, уның етешһеҙлеге һәм беҙ уны бөтөрөү өҫтөндә эшләргә тейеш. Бөгөн балалар йорттары булыуының төп сәбәбе - эскелек һәм наркомания. Мин эшләй башлаған йылдарҙа наркоман балалар бик килмәй ине, хәҙер шундай категория менән дә эшләргә тура килә. Бына ошо ике бик ҡурҡыныс фажиғә, улар һинең бөтә гендарың буйлап тарала, йолҡоп алып та сығарып булмай торған афәт.

Балалар йорттары булмаһын өсөн дин, әҙәп, әхлаҡ тәрбиәһен көсәйтергә кәрәк. Ҡайһылыр осорҙа дини тәрбиәнең өҙөлөп тороуы, ошо рухи ҡиммәттәр етмәгәнгә күрә етемдәр барлыҡҡа килә. Атай-әсәй вафат булып та етем ҡалырға мөмкин, әммә аңлы ҡарашлы туғандар бит балаларҙы тиҙ генә үҙҙәренә ала, балалар йортона илтмәй. Хатта туғандары яҡшы йәшәгән, барлыҡ мөмкинлектәре, шарттары булған кешеләрҙең туғандарының да балалары беҙҙә тәрбиәләнеүе аяныслы күренеш. Улар үҙ нәҫеленең балаһын, үҙ ҡанын ҡурсауға алырға теләмәй. Үкенескә күрә, ундай осраҡтар ҙа юҡ түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн Башҡортостан Республикаһының Етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар өсөн дәүләт бюджет учреждениеһы, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге ғаилә тәрбиәһенә булышлыҡ итеү үҙәгендә 40 хеҙмәткәр эшләй. Тәү ҡарашҡа, бер балаға 1 хеҙмәткәр тура килгән кеүек, әммә уларҙың һәр береһе үҙ урынында. Сөнки балалар һәр минут иғтибар талап итә. Учреждение менән танышып йөрөгән мәлдә мәктәпкәсә йәштәгеләр төркөмө урамдан прогулкала йөрөп инеп киләләр ине. Апайҙарын күреү менән һәр береһе уларҙы урап алды, хатта таныш булмаған бер малай миңә лә ҡулын һуҙып йүгереп килеп: "Урамда йығылдым, ҡулым ауырта..." - тип усын һуҙҙы. "Хәҙер дауалайбыҙ, әйҙә, икәүләп "өф-өф" итәйек әле", - тием эргәһенә сүгәләп. Ул арала эргәмә икенсеһе килеп баҫты: "Апай, ә һеҙҙең исемегеҙ нисек?" Исемемде әйтәм. Күрәһең, бала өсөн ҡабатлауы ауыр булғандыр, уйланып торҙо ла, "ярай инде", тип ары йүгерҙе. Шул арала ошо бәләкәй генә сабыйҙарҙың күҙҙәрендә өмөт саткылары сағылып китте: улар һәр бер килгән кешегә өмөтләнеп ҡарай: "Һин минең әсәйем (атайым) түгелме?", "Һин мине алырға килдеңме?" Етемлек әселеге бәғерҙәрҙе өтөп алыу менән бер рәттән, йөрәктәрҙе йылытыр, күңелдәрҙә өмөт осҡоно ҡабындырыр йорт...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ ***Йөрәктәрендә ғорур батырлыҡ ярһыуы ашҡына ине. Сөнки бөгөн һәр бер боецтың ҡулында тыуған илдән килгән бүләк бар. Бөгөн, байрамды алдан уҡ ҡаршы алып торор өсөн, һәр бер боецҡа бер индивидуаль бүләк бирелде.***



## III. БҮЛӘК ҺӘМ СӘЛӘМ ТАПШЫРҒАНДА

29 октябрҙең төнөндә беҙ дивизия менән берлектә "К" ҡалаһына барып еттек. Был ваҡытта инде беҙҙең бүләктәр тейәлгән эшелон шул ҡаланың станцияһында тора ине. Обстановка һәм шарттарҙың ҡушыуы буйынса беҙ бүләктәрҙе ошо урында дивизияға тапшырырға тейеш инек. Шул сәбәпле, ваҡыттың һуң булыуына ҡарамаҫтан, ҡала гостиницаларының береһендә дивизияның башында генерал-майор М.М. Шайморатов иптәш торған вәкилдәр менән рәсми осрашыу ойоштороҙоҡ.

Башҡортостан халҡы алыҫ Дон далаһындағы бер ҡалаға үҙенең боец улдарын ҡунаҡҡа саҡырып һый бирҙе. Был мәжлес үҙенә генә хас бер мәжлес ине. Бында Башҡортостан халҡының вәкилдәре булған башҡорт ҡыҙҙары бөтәһе лә Башҡортостандан килгән ашамлыҡтар менән башҡорт атлы дивизияһының етәкселәрен ҡунаҡ итте. Шуның менән улар воиндарға халыҡтың сәләмен, мөхәббәтен һәм хәстәрлеген тапшырҙы. Шуға күрә лә, ошо мәжлестә дивизия кешеләренә Башҡортостан партия ойошмаһының, Башҡортостан хөкүмәтененң һәм бөтә Башҡортостан халҡының М. Вальшин иптәш теле аша тапшырылған сәләменә яуап итеп һөйләгән һүҙендә М.М. Шайморатов иптәш:

- Ҡәҙерле ҡунаҡ иптәштәр һәм туған халыҡтың вәкилдәре! Мин һеҙҙең йөҙөгөҙҙә беҙҙе, Ҡыҙыл Армия воиндарын, был тиклем һөйгән, беҙҙен өсөн был тиклем хәстәрлек күргән Башҡортостан халҡының асыҡ йөҙөн күрәм һәм мөхәббәтле йөрәгененң йылыһын һиҙәм. Бынау өҫтәлдә торған хуш еҫле балдың төмендә мин бөтә Башҡортостан ҡырҙарында үҫкән сәскәләрҙең йөрәккә батырлыҡ бирә торған мөкәддәс еҫтәрен тоям. Шул ҡайнар мөхәббәтле изге хистәр һәм тәмле еҫтәр беҙҙе подвигҡа саҡыра, башҡармайынса кисерелмәй торған изге бурыс йөкләтә. Ә беҙ ул бурысты намыҫ менән үтәрбеҙ. Кәрәк була икән, уның өсөн беҙ ҡаныбыҙҙы ла, йәнебеҙҙе лә ҡыҙғанмабыҙ, - тип, тапҡыр һүҙҙәр менән мәжлестәге иптәштәрҙең уртаҡ настроениеһын асып һалды.

Беҙ был осрашыуҙа дивизия вәкилдәренең йөҙөндә бөтә дивизия боецтарының, командирҙарының һәм политработниктарының батырлыйғын, ҡыйыулығын һәм тыуған илгә ысын күңелдән бирелеүҙәренең сағылыуын күрҙек. Беҙҙе был мәжлестә, барынан да бигерәк, Т. Кусимов, С. Әлибаев, Ғ. Макаев һәм Сәйетғәлин иптәштәрҙең күкрәктәрендә балҡып торған Ҡыҙыл Йондоҙ ордендарын күреү шатландырҙы. Был ордендарҙың нурҙары үтә беҙ дивизияның үткән боевой юлын күҙ алдына баҫтырҙыҡ, һәм башҡорт егеттәренең онотолмаҫ данлы подвигтарын күрҙек.

Шул матур төндөң иртәгеһе көнөнә - 31 октябрҙә боецтарға тыуған илдең бүләктәрен һәм күстәнәстәрен өләштек. Делегация члендары дивизияның частарына таралды. Беренсе тапҡыр делегаттар подполковник Т. Кусимов командирлыҡ иткән частың боецтары менән осрашты. Команда тауыштары алыҫ урамдарға китеп яңғыраны. Часть стройға баҫты. Подполковник Т. Кусимов иптәш митинг асып, тәүге һүҙҙе Башҡортостан Совнаркомы председателе урынбаҫары М. Вальшин иптәшкә бирҙе.

Бынан һуң Башҡортостан халыҡ артисҡаһы Бәҙәр Йосопова, дивизия вәкилдәренән - Сибаев, Нафиҡов һәм Белов иптәштәр һөйләне. Иптәш Әлибаев сығыштарға йомғаҡ яһап:



# ДОН ДАЛАҺЫНДА

Сәйфи ҠУДАШ

- Башҡортостан халҡына беҙҙән сәләм алып ҡайтығыҙ һәм бай бүләктәр өсөн рәхмәт еткерегеҙ. Беҙ уларҙың наказын эҙмә-эҙ үтәрбеҙ. Дошманды еңеп, илебеҙгә ҡайтырбыҙ. Беҙҙе был тарихи көнгә бөйөк полководец иптәш Сталин алып бара, - тине.

Ул төндө беҙ дивизияның частары менән бергә юлға сығып киттек.

## IV. ДАЛА ТӨНӨ

Ҡояш офоҡҡа яҡынлашыу менән частарҙа юлға сығырға ҡыҙыу хәрәкәт һәм ашығыс әҙерлек башланды: бөгөн боецтарҙың бөтә хәрәкәттәрендә әлегә тиклем булмаған бер йылдамлыҡ һиҙелә. Биттәрендә йәшерергә мөмкин булмаған шатлыҡ балҡый. Йөрәктәрендә ғорур батырлыҡ ярһыуы ашҡына ине. Сөнки бөгөн һәр бер боецтың ҡулында, ҡуйынында һәм кесәһендә тыуған илдән килгән бүләк бар. Бөгөн, байрамды алдан уҡ ҡаршы алып торор өсөн, һәр бер боецҡа бер индивидуаль бүләк бирелде йөҙәр грамм араҡы, берәр килограмм колбаса, берәр килограмм пряник һәм берәр тауыҡ таратылды.

Бөгөн боецтар Башҡортостан ҡыҙҙары сигеп ебәргән кисеттәр эсендә килгән тәмәкеләрҙе тарта. Яҡын күреп яҙылған хаттарҙы уҡыйҙар. Быларҙың бөтәһе бергә - фронт менән тылдың берҙәмлеге байрам итә. Ә ул берҙәмлектең шанлы ҡеүәте беҙҙе данлыҡлы еңеү тантанаһына алып бара.

Ҡояш байыу менән һауа ҡапыл һалҡынайып китте: частар ҡуҙғалып киткән саҡта ҡала урамдарында бер ни тиклем тығыҙлыҡ һәм буталышыу һиҙелгән һымаҡ булғайны. Ләкин ул бик тиҙ йүнәтелде. Мин дивизияның маршта үткән оҙон юлындағы тормошон белмәнем: ләкин уның бөгөнгө ҡуҙғалып китеү ваҡыты ниндәйҙер бер тантананы, байрамды хәтерләтә ине.

Бер частың ҡурайсылары Х. Ибраһимовтың "Салауат маршы"н уйнай. Икенсе частың гармунсылары, "Карабай"ҙы уйнап, егеттәрҙең дәрттәрен елкендерә. Өсөнсө частың ҡурайсылары "Урал"ды һыҙҙыра. Уларға ҡушылып, кемдер - бер боец:

- Яҡшы атка меней ҡулына алған

Уҡ-һаҙаҡ та тигән ҡоралын.

Аямаған йәнен, түккән ҡанын,

Һаҡлаған ул башҡорт Уралын, -

тип йырлап ебәрҙе.

Ҡала хеҙмәтсәндәре, атлы воиндарға боевой уңыш теләп, уларҙы оҙатып ҡалды. Дивизияның ҡаланан сығып, километрҙарға һуҙылған частары ҡуйы, оҙон әрем ҡаплаған һәм төндөң ҡараңғылығы менән бөркәнеп ятҡан дала ҡосағына инеп юғалды.

Төнгө дала тын. Тик, тәгәрмәстәрҙең шыҡылдауҙары, ат тояҡтарының тыпылдауҙары ғына был тәрән тынлыҡҡа ҡағылып, алыҫтарға яңғырап китә. Беҙҙең делегаттарҙың ҡайһы берәүҙәре машинаға ултырып, ҡайһылары атҡа атланып китте. Мин Л. Батталова, Ф. Хурамшиналар менән подполковник Кобянов һәм С. Шакирьянов иптәштәр командирлыҡ иткән бер частың боецтары араһында арбаға ултырып барабыҙ. С. Шакирьянов иптәш әленән-әле беҙҙең яңға килә лә:

- Урын яйһыҙ түгелме, өшөмәйһегеҙме? - тип, хәлебеҙҙе белеп китә. Ихтимал, ул төн бик һалҡын йә бик йылы булғандыр, ләкин беҙҙе биләп алған уйҙар, кисерештәр һауаның былай йәки тегеләй булыуы тураһында иғтибар итергә мөмкинлек бирмәй ине.

Ул яҡта ундай төндәр бик күп була торғандыр, әлбиттә. Ә беҙҙең өсөн ул бер генә төн булып ҡалды. Бәлки, ғүмергә бер генә тапҡыр үткәргән төн булып ҡалыр ҙа ул. Төн бик ҡыҫҡа була торған урындарҙа ике шәфәҡ - киске шәфәҡ менән таң шәфәғе ялғана, тиҙәр. Ҡояш байығас, һауа ҡапыл ҡараңғыланып китте.

Төн ҡараңғыланған һайын, киске шәфәк, офоҡта мамыҡ ҡар һырындылары һымаҡ булып ҡатлауланып, күперәп торған аҡ болоттарға мәк сәскәһе төҫлө ҡуйы ҡыҙыллыҡ бөркөп бөҙрәләндерҙе. Күп тә үтмәне, беҙҙең алда, һул яҡта икенсе бер шәфәҡ ҡалҡты. Мин нисектер, абайламаҫтан, нисек былай булды һуң әле, ҡояш байыу менән таң шәфәғе лә яна башланы, тип уйларға өлгөрмәнем, дәһшәтле күкрәү мине һиҫкәндереп ебәрҙе. Иғтибарымды төйөнләп, ҡыҙыллыҡтарҙы ысынлап күҙәтә башланым һәм үҙ-үҙемә:

- Иҫәр, көньяҡта ниндәй шәфәҡ нуры булһын инде тағы, - тип көлдөм.

Ысынлап та, был ҡыҙыллыҡ, теге ысын шәфәҡ ҡыҙыллығына аҙ ғына ла оҡшамай ине. Был ҡыҙыллыҡ шәүләһе күкте үртәгән көньяҡ офоҡ өҫтөндә бер туҡтауһыҙ йәшелле-ҡыҙыллы ут йәҙрәләре осоп тора. Бер туҡтауһыҙ гөрһөлдәү яңғырай. Шуның өҫтөнә һауала, бик бейектән осоп барған самолет моторының геүелдәүе килеп ҡушыла. Ашҡынған атын тыйып, беҙҙең арба менән йәнәшә барған С. Шакирьянов иптәш беҙҙең һүҙһеҙ һорауыбыҙға яуап итеп:

- Күрәһегеҙ һәм ишетәһегеҙҙер инде, фронт линияһына бик яҡын ерҙән үтеп барабыҙ, - тине.

Аҡрын, ләкин бик һалҡын ел ҡуҙғалды. Беҙҙең дивизияның төнгө хәрәкәтен дошмандан ышыҡлағра ярҙамлашҡан һымаҡ булып, күк йөҙөнә йоҡа ғына болот ҡатламы таралды. Ат тояҡтарының тыпылдауҙары тағы ла асығыраҡ ишетелә башланы. Мин уңған һәм түҙемле башҡорт аттарының ошо ватан һуғышы көндәрендә үткән оҙон юлдарын уйлап барам.

Бына, эйәр өҫтөндә ныҡлы ултырған бер егет, атын елдереп, ниндәйҙер ашығыс йомош менән алға уҙып бара. Ҡараңғыла төҫө танырлыҡ уҡ асыҡ беленмәгән был тумалаҡ һәм йылғыр ат Башҡортостандың бер колхозында йәки совхозында ҡолон сағында уҡ пионерҙар шефлығында иркәләнеп үҫкәндер. Унан һуң унған һәм ат яратыусан конюхтар уны:

"Ерән ҡашка атҡайым,

Башын сайҡай малҡайым.

Алдарында һолоһо бөтһә,

Өҙөлә йөрәк майҡайым" -

тип, йырлай-йырлай тәрбиәләгәндәрҙер.

Хәҙер ул пионерҙарҙың да, конюхтарҙың да ышаныҫын аҡлап, өҫтөндәге егетте уттан да, һыуҙан да алып сыға. Оҙон юл үтеүҙәренә ҡарамаҫтан, бөгөн генә муйынына беренсе тапҡыр ҡороҡ һалып атланған ат һымаҡ, ҡайҙа баҫырын белмәй, ер һелкетеп китеп бара.

Көнсығыш яғы күгелйемләнеп яҡтыра төштө. Болон уртаһында үҙенең тиңһеҙ матурлығына ғорурланып ултырған сәскә һымаҡ, бөтә йондоҙҙарҙан нурлыраҡ янып, серлерәк йымылдап һәм көслөрәк балҡып, сулпан ҡалҡты. Боецтарҙа арыу һәм йоҡомһорау һиҙелмәй әле. Бер егет иптәшенә үткән бер бойҙың иҫтәлеген һөйләп бара:

- Был төндән дә ҡараңғыраҡ йәйге бер төн ине, һөжүм иткән немецтарға ҡаршы һөжүм менән яуап бирҙек - һәм аралашып һуғыша башланыҡ. Бөгөнгө кеүек, хәтеремдә, бер бесән эскерте янына һуҙылып яттым да, ата башланым. Атыш шундай ҡаты бара, ата улды, әсә - ҡыҙҙы белмәй тигән төҫлө, берәүҙең ни нәмә эшләгәнен икенсеһе белмәй торған буталыш китте. Бына бер ваҡыт беҙҙең Ғәйфулла ҡайҙандыр килеп эскерттең икенсе бер башына ятты ла, үҙебеҙҙең яҡҡа ҡарай ата ла башланы. Мин аптырай башланым, әллә, мин әйтәм, ҡулса эсендә ҡалып, түңәрәк оборона алып барабыҙмы икән? - тием. Аптырағас, түҙмәнем:

- Ғәйфулла, Ғәйфулла! Ниңә улай үҙебеҙҙекеләргә ҡарай атаһың, был яҡҡа ҡарап ат, тип ҡысҡырҙым. Ә Ғәйфулла ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә, тигән кеүек, һаман ата ғына бирә. Түҙмәнем, шыуышып, уның янына уҡ барҙым. Ҡараһам, малай, мин һиңә әйтәйем, ҡуҙҙәрен бомба булып ярыла яҙҙы тегенең өҫтөнә. Ғәйфулла түгел, немец!

Ул да мине танып өлгөрҙө. Беҙҙен арала, күҙ асып йомғансы хәрәкәт яһап, маҡсатҡа етеү өсөн ярыш башланды. Ләкин был бермә-бер көрәштә мин өҫтөн һәм өлгөр булып сыҡтым. Нисек хәрәкәт иткәнемде, хәнйәрҙе нисек итеп немецтың бысраҡ тәненә ҡаҙағанымды әле булһа хәтерләй алмайым. Тик, мин арҡаһына хәнйәр ҡаҙағас, үҙен-үҙе белмәй салҡан әйләнеп ҡысҡырған немецтың тупаҫ тауышы ғына ҡолағымда яңғырап ҡалды...

Тыңлаусы егет, иптәшенең һүҙенән ҡәнәғәтләнеп, хуплап бара.

✔ ***Килен бүләге - элдек илле-туҡһан дана әҙерләнә. Бөтә ауыл кешеләренә еткерергә лә риза улар. Сөнки элдек - ябай суҡлы үрмес кенә түгел, ул - бәхет теләй-теләй ишелгән тылсымлы бау, йырҙарҙа йырланған бәхет ебе.***



Атыш күкрәүе һаман баҫылмай. Тик беҙ фронт линияһынан арҡараҡ киттек буғай, күкрәү тауышы торған һайын тоноҡлана һәм беҙгә аҙыраҡ ишетелә башланы. Таң беленеүгә беҙ туктау өсөн билдәләнгән бер казачий станицаға барып еттек.

Туктау менән боецтар маскироваться итергә һәм аттарҙы тәрбиәләргә, тамаҡтарын туйҙырыуу хәстәренә тотондо. Таң, үҙенең бөтә мөһабәтлеге һәм енеүсән көсө менән маһайып, ғорур рәүештә күкте биләп алды.

### V. АҘАШҠАН ҠАРТ

Бер төндә туктауһыҙ алтмыш километр юл үтеү асыҡтырҙы ла, арытты ла. Сәй эсеп, аҙыраҡ серем итеп алмаҡсы булдыҡ. Ләкин күҙгә йоҡо килмәне, баштан уйҙар китмәне. Боецтарҙың поход һуңындағы тормоштары мине тышҡа тартты, һауаға сыҡтым.

Өйҙән сығып, болдорға баҫыу менән минең күҙгә емерелеп һәм янып ер менән тигеҙләнгән ниндәйҙер бер ҡаралты урындары ташланды. Янған ағастарҙың һәрәйеп ҡалған ҡоромло бағаналары алдыма теҙелеп баҫты. Бер ваҡыт был ағастарҙы ниндәйҙер бер ҡарт, үҫмер ағастар кеүек, йәш һәм матур уйҙар менән янып ултыртҡандыр. Улар йәшлек төҫлө күпереп атҡан энйе сәскәләрен ҡарттың эҙҙәренә һибеп, уның ғүмер юлын биҙәкләгәндәрҙер. Ә хәҙер ул ағастар кемдеңдер ҡара, ҡәбәхәт һәм енәйәтле эшен онотмаҫ өсөн ҡуйылған ҡара бағаналар һымаҡ ултыра. Ентекләберәк ҡараһаң, ул бағаналарҙа фашистарҙың күмер төҫлө ҡара һәм ерәнгес мәкерле биттәре күренгән һымаҡ була. Өйҙең икенсе башындағы ишектән сыҡҡан бер ҡатындан:

- Бында пожар-фәлән булдымы әллә? - тип һораным. Ул уйға ҡалды. Быҫраҡ бер нәмәне күреп ерәнгән кеше һымаҡ, сирҡанып, төҫөн үҙгәртте һәм унан һуң:

- Шул, ләғнәт төшкөрө немецтар, самолеттан яндырғыс бомба ташлап, шулай харап иткән бындағы ҡаралтыларҙы һәм матур баҡсаны. Баҡса һәм ҡаралтылар тағы ла бер хәл әле уның. Шунда йоҡлап ятҡан биш йәшлек бер бала янып үлгән. Уны ҡотҡарам тип, баланың әсәһе, утҡа бешеп, күҙһеҙ ҡалған. Мин үҙем бындағы кеше түгел. Дон аръяғынан ҡасып килдек. Беҙҙең станицала ошо көндә немецтар хакимлыҡ итә әле, - тип көрһөндө.

Ҡатын үҙ юлына китте. Минең иғтибарымды күрше двордағы япрағын ҡойған ҡарт алма ағасына һөйәлеп, тәрән уйға сумған бер ҡарт үҙенә тартты. Мин тәүҙә уның янынан үтеп киттем һәм ҡарттың торошон күҙәттем. Уның күҙҙәре, ерҙәге магнит тарафынан тартылған энә төҫлө, аяҡтарына текәлеп ҡараған да, ҡатып ҡалған. Ауыҙындағы трубкаһы уны, беренсе ҡарауға, трубка тартып торған бер кеше итеп күрһәтә. Ләкин ул трубкаһын да күптән уҡ онотҡан булырға кәрәк. Шул көйгә, үлеп ҡалған кеше һымаҡ булып, ағасҡа һөйәлгән хәлдә хәрәкәтһеҙ тик тора. Был күренеш мине бик ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Ләкин уны былдай ҡиәфәттә тороу хәленән ҡотҡарыр һәм уятыр өсөн, тәмәке төрҙөм дә, янына уҡ барып:

- Хәйерле көн, атай, рөхсәт итегеҙ әле, тәмәке тоҡандырырға, - тинем. Ул йоҡонан ҡапыл уятылған кеше төҫлө һиҫкәнеп китте һәм миңә ут бирер өсөн трубкаһын йыш-йыш һурырға тотондо. Ләкин трубкаһы күптән уҡ һүнгәйне инде уның. Ул, кеҫәһенән алып, саҡмаһын саҡты. Тәмәке тоҡандырҙыҡ. Шул арала мин уны баштан аяҡ ҡарап алдым. Битен керпе энәһе кеүек һаҡал япҡан уртаса буйлы, йыуантыҡ һәм таҙа бер казак ҡарты ине ул. Әңгәмә башларға һылтау эҙләп, мин уға:

- Әллә бабай әбейҙе һағынып, шулай уйға батҡан инде? - тип йылмайҙым. Тик бына шаярып әйтелгән һүҙҙәр менән әллә, төҙәмәй атып, бабайҙың ауыртҡан еренә тейҙерҙем, әллә ҡартҡа оҡшамаған бер хәрәкәт яһаным. Зәңгәр күҙҙәрен күтәреп, миңә ҡараны ла:

- Һағынһаң да, илаһаң да, әбейең юҡ инде хәҙер, балаҡайым, - тине ул. Мин үҙемдең шаярып биргән һорауыма үкенгәнмен һәм:

- Күптән үлдеме? - тип һораным.

- Күптән түгел, тупрағы ла һыуынмағандыр, тиер инем, уның кәүҙәһен ҡосаҡлаған ҡәбере юҡ, - тигәс, мин уның һүҙен бүлдерҙем:

- Нисек ҡәбере юҡ?

- Шулай, хәҙер бик ябай эш икән ул үлгәс ҡәберһеҙ ҡалыу. Ана, ишетәһеңме, нисек атыш бара? Ул туптар Дондың уң яҡ ярындағы беҙҙең станицала ярыла. Ана шунда немец ташлаған бомба менән минең ҡырыҡ йыл бергә йәшәгән һөйөклө ҡарсығымдың кәүҙәһе, йыйып алып сепрәккә төйнәрлеге лә ҡалмайынса, юҡҡа сыҡты. Бына шул хәлдә башыма һыйҙыра алмайынса уйлап, уйылып төшәм. Өйөмдө емерҙеләр, малдарымды таланылар немецтар. Үҙем саҡ ҡасып ҡотолдом. Станицала хәҙер минең бер нәмәм дә юҡ. Ләкин шунда ҡайтҡым килә. Әллә ҡарсығымдың ҡаны тарта? Бөгөн төшөмдә лә күрҙем мәрхүмдең үҙен. Икәүләшеп баҡсала, алланып бешкән алмаларҙы корзинаға тултырабыҙ икән. Бына бер ваҡыт баҡсаның ҡоймаһы шатырҙап емерелә башланы. Бағаналар ауҙылар, таҡталар селпәрәмә килде. Унан баҡсаға ҙур һәм ҡот осҡос йәмһеҙ бер ҡабан килеп инде лә, ағастарҙы аҡтарып йыға, алмаларҙы тапап иҙә башланы. Ул ғына ла түгел, ауыҙынан ут бөркөп, ҡарсыҡҡа табан ташланды. Ҡарайым, күҙ алдында ҡулға торлоҡ бер нәмә лә юҡ. Ул арала булманы, ҡабан ҡәрәгенән ҙур ауыҙын асты ла, ҡарсыҡты йотоп та ебәрҙе. Шул ваҡыт минең күҙҙәрем һарғайып бешкән ғәләмәт ҙур бер ҡабаҡҡа төштө. Йәшен тиҙлеге менән хәрәкәт яһап, ҡабаҡты күтәреп алдым да бөтә көс һәм асыу менән ҡабандың өҫтөнә ырғыттым. Ҡабаҡтың ярылып китеүе булды, уның эсенән берҙән-бер артлы башҡа ҡабаҡтар сығып, шартларға тотондо. Баҡсаны ҡаплаған төтөн асылып китте. Ҡараһам, ҡабандың бото-боткаһы, ҡулы-ҡулға өҙгөләнеп, ҡара ҡан менән тулған соҡор эсендә ята. Ә ҡарсыҡ, үрмәләп, шул соҡорҙан сығырға маташа. Уны һөйрәп сығарырға ҡул һуҙғайным, уяныпкиттем.

Көс һәм тир һеңгән тыуған ерҙең йөрәккә яҡынлығын бына бөгөн белдем. Уйламай йөрөгәнмен икән, йүләр, әлегә хәтле. Мин бит ул ерҙә алтмыш биш йыл йәшәнем. Хәҙер шул ер немецтарҙың быҫраҡ табаны аҫтында тапалып мәсхәрәләнә. Ишетәһеңме, ана ул минең тыуған ерем нисек ауыр һыҡрап ыңғыраша? Уны ҡоллоҡтан ҡотҡарырға, азат итергә кәрәк, - тине. Ҡарттың күҙҙәренән эре борсаҡ кеүек йәш бөртөктәре атылып сыҡты.

Мин бик уңайһыҙ хәлдә ҡалдым. Ләкин ҡарт үҙенең һуңғы һүҙҙәрен әйткән саҡта беҙҙең янға килгән майор Фәйзи иптәш Ғафаров миңә ярҙамға килде. Ул ҡарттың арҡаһынан һөйөп:

- Ҡотҡарырбыҙ, бабай, һинең тыуған ерерде генә түгел, немецтар баҫып ингән бөтә өлкәләрҙе лә ҡотҡарырбыҙ. Изге тупрағыбыҙҙа бер генә оккупант та ҡалмаясаҡ! Беҙ шуға китеп барабыҙ, - тигәс, ҡарт итләс ҡулының һырты менән күҙҙәренең йәшен һөртөп алды һәм:

- Шул бәхетле көндә түҙемһеҙлек менән һағынып көтәбеҙ, - тине.

Беҙ старший лейтенант М. Хәкимов менән частың артбатареяһына боецтар менән осрашырға киттек. Боецтар йыйылғансы, беҙҙе немецтарҙың көлөн күккә осора торған пушкалар менән таныштырҙылар. Немецтарҙан тартып алынған аттарҙы күрһәттеләр.

Боецтар тиҙ йыйылды. Беҙ уларға тыуған илдең сәләмен тапшырҙыҡ. Халыҡтың ышанысын һәм өмөтөн белдерҙек. Боецтарҙан: орденлы политрук Хөсәйенов, парторг Имелбаев, орденлы политрук Мостафин, военфельдшер Ғәлимов һәм старший лейтенант М. Хәкимов иптәштәр һөйләне. Улар үҙҙәренең һүҙҙәрендә бүләк өсөн рәхмәт әйтте. Халыҡтың ышанысын аҡларға һүҙ бирҙеләр һәм шуны бөтә Башҡортостан халҡына еткереүҙе һоранылар.

Митингынан һуң мин боецтар араһында йөрөнөм. Ике боец ҡустәнәс тауыҡтарҙы бешерергә әҙерләнә һәм үҙ-ара һөйләшә. Береһе әйтә:

- Малай, минең ҡатындың тауығы, моғайын, һинә эләккәндер әле, - тигәс, икенсеһе:

- Ә минең ҡатындың тауығы, бәлки, һинә эләккәндер, - тип көлөштөләр ҙә, тауыҡтарҙы бергә бешереп ашарға булдылар.

Бер ағас төбөнә ултырып, Имелбаев иптәштең шиғырҙарын уҡыныҡ. Мин уға рифма, ритмдар тураһында һөйләнем. Сюжетлы нәмәләр яҙырға кәңәштәр бирҙем. Боецтарҙан айырылғы килмәнә лә, ебәрелгән машина, беҙҙе ултыртып, штабҡа алып китте.

Ул кисте беҙ тағы ла М.М. Шайморатов иптәштә ҡунаҡта булдыҡ. Бында Ә. Абдуллин. Д. Әритколов, И.И. Гулинов, Кузнецов, А. Ғималетдинов иптәштәр һәм редакция работниктарынан А. Карнай, Ә. Ихсан һәм Йәмилевтәр ҡатнашты.

Кисә бик күңелле үтте. Иптәш Шайморатов гармун тартты. Беҙ уның яратҡан көйҙәрен йырланыҡ, шиғыр һөйләнек. Иртәгеһен тағы ла төндә күсеп киткән дивизия артынан киттек.

Икенсе ноябрҙә беҙ тағы ла Кобяков һәм Шакирьянов иптәштәр командирлыҡ иткән часҡа барып, йыйылыш үткәрҙек. Бында беҙҙе йыйылышҡа тиклем частың айырым төр ҡоралды бүлектәрендә йөрөтөп, һәр бер төр ҡоралдарҙы күрһәтеп сыҡтылар. Хатта ҡайны берҙәренән атып та күрһәттеләр.

Күпер төбөндәге бер баҡсала, баштан аяҡ ҡоралланып, тәртипле теҙелгән боецтар беҙҙе ҡаршы алды. Беҙ боецтарға Башҡортостан халҡының сәләмен еткерҙек һәм наказын тапшырҙыҡ. Боецтар, политработниктар һәм командирҙар исеменән һөйләгән медалле Аҫылбаев, орденлы Хөсәйенев, Миңлеғолов, Имелбаев, Шакирьянов һәм Кобяков иптәштәр киләсәк һуғыштарҙа ла частың элекке командиры, майор Нафиҡов кеүек батыр һуғышырға вәғәҙә бирҙе. Фронтка күберәк ҡорал, кейем, аҙыҡ, яҡшы аттар биреүҙе һоранылар.

Митинг бөткәндә генә ҡайҙандыр дошмандың бер разведчик самолёты килеп сыҡты. Боецтар бик тиҙлек менән йәшенде. Шакирьянов иптәш:

- Ҡоҙғон себеш тибергә эҙләп йөрөй. Ләкин бында себештәр юҡ шул, бәлки, Урал бөркөттәре генә йыйылған, - тип көлдө.

Беҙ, боецтарҙың сәләмдәрен һәм һорауҙарын Башҡортостан халҡына еткерергә һүҙ биреп, часть менән хушлаштыҡ.

Өсөнсө ноябрҙә беҙ дивизия менән айырылышырға билдәләнгән пунктҡа - Хопер йылғаһы буйындағы "С" станицаһына килдек.

**(Дауамы. Башы 19-сы һанда).**

*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*

# ЭЛДЕК - БӘХЕТ ЕБЕ



**Ҡатай, оло ҡатай, балаҡатай ырыуы башҡорттарында ла ҡыҙҙар атай йортонда саҡта уҡ сигеү-ҡайыу эшенә ултыра, әсәһе йә яҡын туғандары ярҙамында сүпләм ысулы менән күтәртеп һуғылған тукымаһан тегелгән шаршау, киндер ептән һуғылған таҫтамалдар әҙерләй. Йәш киленгә донъя көтә башлау менән кәрәк була торған йорт йыһаздары - тәҙрә ҡормалары, мейес ҡашағаһы ябыуҙары, урын-һике ҡаралдыһы, мендәр-түшәк - һәммәһе лә хәстәрләнә.**

Йәш киленде кейәү йортона күсереп алып ҡайтыу мәлен бик күркәм итә торған үҙенсәлекле туй йолаларының береһе - элдек өләшеү. Килен кеше алдан әҙерләгән элдектәрҙе кейәү егете йәки кейәү бала үҙе йыйылған халыҡҡа килен исеменән тарата.

Элдек - элеү һүҙенән алынған. Элдек йәтеш кенә эленеп тә, бәйләнеп тә тора, ике яғаны ҡуша бәйләп була, урҙаға йә түшәмгә суҡлап тағып ҡуйһаң, йортто биҙәүгә лә ярай. Элдек кейемгә лә, күстәнәс-бүләк йөрөтмәле бәләкәй ҡапсыкты бәйләргә лә ярай. Бүләк элдектәр кейемгә, тәҙрәкәҙгә башына, машиналарға, йорт йыһазына ҡуйыла.

Элдек яһау өсөн төрлө төҫтәге ептәр алына. Тигеҙ һәм ныҡ иләнгән уртаса ҡалынлыҡтағы йөн, киндер, мамыҡ еп тура килә. Борон йөнептән бигерәк, киже йәки етендән иләнгән епте ҡулланғандар.

Башҡорт халҡында ҡулдан иләнгән еп һәр ваҡыт ҡәҙерле һәм кәрәкле бүләк һаналған. Еп киндерҙән, етендән, йөндән иләп яһалған, уны етештереүгә күп көс, ваҡыт, оҫталыҡ кәрәк булған. Бөтә кеше лә еп иләй һалып бармаған, епкә ҡытлыҡ замандар ҙа булған, сөнки халыҡ үҙе бөтә кейемен үҙе етештергән. Ямауға ла, тегеүгә лә, бәйләүгә лә еп күп кәрәк булған.

Бөгөн магазиндарҙа ептең ниндәйен теләһәң, шундайын табып була. Элдектәр ҙә сағыуыраҡ, эре суҡлы, ялтыр-йолтор булып китә. Шулай ҙа халыҡ һәр нәмәнең самаһын онотмай, епте юҡҡа сарыф итмәй. Әүәле шаршау, эскәтир йәки өҫтәл ябыуы, таҫтамалдарҙы һуҡҡандан артып ҡалған епте төрлө төҫкә манып, артабан туйҙы йәмләй, балаларҙы һәм өлкәндәргә берҙәй ҡыҙыҡһындыра торған элдек яһаған балаҡатайҙар. "Элдекҡә бигерәк тә бала-сага кинәнә", тип алдан юрап, матурыраҡ эшләргә тырышалар.

Туй ҡыҙған мәлдә ҡыҙ бирнәһенең бер өлөшө - элдектәр йыйылған халыҡ өҫтөнә һибелә, шаугөр килешеп, һәр береһе элдектәрҙе таратып алырға тырыша.

Килен бүләге - элдек илле-туҡһан дана әҙерләнә. Яҡын туған-тыумаһаһына ғына түгел, бөтә ауыл кешеләренә еткерергә лә риза улар. Сөнки балаҡатайҙа элдек - ябай суҡлы үрмес кенә түгел, ул - бәхет теләй-теләй ишелгән тылсымлы бау, йырҙарҙа йырланған бәхет ебе.

**Кинйә МӘЗИТ.**

*✓ Уның бер тәғлимәте бик күптәргә һабаҡ булып тора: "Үҙенең балаһын күрәләтә башҡорт мәктәбенә уҡырға бирмәгән атай-әсәй - башҡорт халҡын ҡоротоусы, милләт тамырына балта сабыусы", - ти ул.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРҘӘР ХИСЛЕРӘКМЕ?

■ Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә хислерәк, тип белдерә Вашингтон университеты менән Джорж Мейсон университеты белгестәре. Һәр хәлдә, беренсе ҡараштан улар йышыраҡ ғашиҡ була, тип раҫлай улар. Төрлө илдәрҙә йәшәгән 70 мең кешенән һорау алғандан һуң, тап ир-егеттәрҙең көтөлмәгән ярһыулыҡҡа һәләтле икәне асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ир-аттарҙың 48 проценты тәү ҡараштан ғашиҡ булған, ҡатын-ҡыҙҙар араһында бындайҙар иҫәбе 28 процент ҡына. Ир-егеттәр яратҡан кешеһенә йышыраҡ хыянат та итә, ситкә йөрөүселәр һаны улар араһында 33 процент, ҡатын-ҡыҙҙарҙа - 19.

■ Америка ғалимдары раҫлауынса, бәләкәй генә сағынан даими рәүештә телевизор ҡараған балалар йәше тулған мәләнән үк үҫеш буйынса тиҫтерҙәренән ҡалыша башлай. Тайпылыштар психик йәһәттән һәм аҡыл үҫешендә күҙәтелгән. Белгестәр 259 ғаиләне тикшергәндән һуң бындай һығымтаға килгән. Бигерәк тә өлкәндәр өсөн тәғәйенләнгән тапшырыуҙар зыян килтерә. Мәҫәлән, бала һөйләшмәүе ихтимал, сөнки ата-әсә уның менән тейешенсә шөғөлләнмәй. Иң ҡыҙығы, был факт ғаиләнең түбән йә юғары килемле булыуына ҡарамай. Ғөмүмән, тәүге ике йылда бала өсөн телевизор мәғлүмәт биреүсе функцияһы үтәмәй. Киреһенсә, ул баланың аҡылын үҫтереүгә зыян яһай. Хатта балалар өсөн махсус тәғәйенләнгән тапшырыуҙар ҙа хәлде ҡотҡара алмай. Шуға ла балағыҙ үҙ йәшенә күрә дөрөҫ үҫешһен өсөн уның менән бергә телевизор ҡарамағыҙ, ә уның менән аралашығыҙ, ти ғалимдар.

■ Күҙҙәр - күңел көҙгөһө тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Кешенең хис-тойғоһо күҙҙәрҙә сағыла. Кемдәндер ҡарашы асыҡ, ягымлы, кемдер ауыр ҡарашлы. Күҙҙәр - кешенең эске донъяһын да сағылдыра. Күреү һәләте психика менән бәйле, ти ғалимдар. Германияла психосоматика офтальмологияһына нигеҙ һалыусы доктор Вольфганг Шульц-Цеден әйтеүенсә, күҙ ауырыуҙарының 40 процентының психологик нигеҙе бар. Мәҫәлән, кеше ҡурҡҡанда уның күҙ ҡараһы ҙурая, асыуланғанда, киреһенсә, ҡыҫыла. Ныҡ тулҡынланғанда күҙ ҡараһы киңәйә, күреү һәләте түбәнәйә. Кеше тынысланғас та күреү һәләте кире ҡайта. Күҙҙәргә иң ҙур зыянды ҡурҡыу тойғоһо килтерә. Ул ҡан баҫымын һәм күҙ эсе баҫымын күтәрә, әгәр был торош гел ҡабатланып торһа, глаукома барлыҡҡа килеүе бар. Эске конфликт, тойғоларҙы "баҫыу" - күреү һәләте насарайыуының төп сәбәптәре. Был организмдың һаҡланыу реакцияһы.

■ Алтын менән борондан дауаланғандар. Алтын һәм уның ҡушылмаларынан яһалған препараттар туберкулез, тирене, периферик нервы системаһын, күҙҙе һәм ҡайһы бер эске ағзаларҙы зарарлаусы проказа сирен, ҡыҙыл сөсө ауырыуын дауалай. Алтын, алтындың көмөш менән аҡ алтын ҡушылмаһынан биҙәүестәр тағыу истерия, депрессия, эпилепсиянан арҙам итә, тип иҫәпләнә, сөнки кешене тынысландыра, кәйефен яҡшырта. Алтын шешеүгә, микробтарға, бактерияларға ҡаршы ҡулланыла, аллергия булдырмай. Шуға ла киҙеү эпидемияһы ваҡытында алтын биҙәүестәр тағырға кәңәш итәләр. Алтын шулай уҡ ҡан баҫымын түбәнәйтә, матдәләр алышыныуын, ҡан әйләнешен яҡшырта.

ХӘТЕРЛӘП...

# ИЛ КҮҢЕЛЕНӘ АУАЗДАШ



**Өфөнөң Сипайлово биҫтәһендәге М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы 1994 йылда тәү башлап бик күп зыялы шәхестәребеҙҙең тырышлығы, илһөйәр ныҡлығы, ынтыматлығы арҡаһында асылды. Өфөнөң башҡорттар күп йәшәгән был төбәгендә мәктәптәр бихисап ине, әммә тап башҡорт мәктәбен асыу өсөн башҡорт йәмәғәтселегенә ныҡлы талап итергә, юлларға, махсус йөрөргә кәрәк булды.**

Мәктәп үҙенең сирек быуатлыҡ тарихын барлаған көндәрҙә уның алыштырғыһыҙ директоры Шәмсулла Хәбибулла улы Хәбибрахманов Салауат Юлаев орденына лайыҡ булды. Шәмсулла Хәбибрахманов Октябрь районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе лә булып тора. Уның эшмәкәрлеге - сабырлыҡ һәм төплө аҡыл менән һәр мәсьәләне әҙмә-әҙлекле хәл итеү, үҙ туған мәктәбенә, уҡытыусылар коллективына таяныу. Сирек быуат ҡына эшләһә лә, Сипайлово биҫтәһендәге Башҡорт лицейы баш ҡалала һәм республикала киң билдәле: уҡыу бер смена ғына бара, икенсе смена - төштән һуң дәрестәрен башлаусы Сәнғәт мәктәбенә бирелә. Лицейҙың үҙ Сәнғәт мәктәбе бар, унда йыр, бейеү, ҡурай, фортепиано, художество бүлектәре һәр уҡыусыны һәләтенә ҡарап үҙенә йәлеп итеп тора. Туғыҙынсы синыфты тамамлағанда уҡыусылар сәнғәти һөнәр нигеҙҙәрен үҙләштереүе хаҡында таныҡлыҡ алып сыға.

Лицейға Мөхәмәт Исҡужиндың исеме бирелеү шулай уҡ бик мөһим ваҡиға, һәм был шәхес башҡорт мәғрифәтсеһе данын алған даукәр зат булараҡ тарихи замандашыбыҙ. Ул Өфөлә Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһын асыусы кешеләребеҙҙең алдынғы сафында йөрөгән аҡыл эйәһе, милләтебеҙҙең туған телен һәм ватансылыҡ рухын һаҡларлыҡ-яҡларлыҡ уҡыу йорто булдырыу иң мөһим эш икәнен аңлап, шул маҡсатын арымай-талмай тормошҡа ашырҙы. Баш ҡаланың һәр төбәгендә, һәр районында үҙ башҡорт мәктәбе астырыуҙы ҙур ныҡышмалыҡ һалып юллай ул. Сипайловолағы яңы йорттарға күсенгән йәш башҡорт ғаиләләрен барлап, өйбөрөнсә йөрөп сығып, уларҙың балалары өсөн башҡорт лицейы асылырға тейешлеген, тап шул мәктәптә бөтә башҡорт балалары бер ғаилә булып тупланып белем алырға кәрәклеген аңлата. Шулай ул бик күп башҡортто манҡортлоҡтан ҡотҡара. Уның ватансылыҡ рухы менән һуғарылған бер тәғлимәте бик күптәргә һабаҡ булып тора: "Үҙенең балаһын күрәләтә башҡорт мәктәбенә уҡырға бирмәгән атай-әсәй - башҡорт халҡын ҡоротоусы, милләт тамырына балта сабыусы", - ти ул. Бына шулай уҡыу йортоноң төп маҡсаты билдәләнә: туған халҡыбыҙҙы башҡорт телен, тарихын, мәҙәниәтен бергә өйрәнгән балаларыбыҙ ғына дауам итәсәк. Бала йәнле халыҡ, тип дан алған башҡорт өсөнсә меңйыллыҡта ла балаларын, ғаиләһен, илен бер халыҡ булып йәшәү бәхетенән мәхрүм итмәйәсәк.

136-сы Башҡорт лицейында 2005 йылдарҙан башлап Шәжәрә байрамдары үтә, тип ишеткәнем бар ине. Быйыл, 14 апрель көндө, мәктәптең ошо сараһында ҡатнашырға насип булды. Кисә Башҡортостан Республикаһының тәүге оранлы шағиры Шәйехзада Бабич иҫтәлеге менән бәйле ине. Бабич тураһында уҡыусылар төшөргән фильм күрһәтелде, сәхнәнән уның шиғырҙары яңғыраны. Лицейҙа уҡыусы үҫмер егеттәр бик тасуири, тәрән аңлап һәп яратып Бабич уйҙарын яңғыратты. Егерме беренсе быуатта ла уның фекерҙәре һаман кәрәкле, һаман ил күңеленә ауаздаш икәнен раҫланы.

Башҡорт лицейы уҡытыусылары, уҡыусылары әҙерләгән концерт программаһы экранда сағылған кадрҙар менән биҙәлде. Ул кадрҙар тупланмаһы "Башҡортостанда шәжәрә байрамдары ҡасан үткәрелә башланы һуң?", тигән ябай ғына һорауҙан башлана. Яуабы: Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләте составына инеүенең 450 йыллығына әҙерләнеү сиктәрендә, 2005 йылда, республикабыҙ Президенты Мортаза Рәхимов указы буйынса Башҡортостан Хөкүмәте Шәжәрә байрамдарын үткәреү тураһында Ҡарар ҡабул итә. Шул ваҡыттан бирле 136-сы Башҡорт лицейы Октябрь районында шәжәрә байрамдарын үткәреү бурысын үҙ өҫтөнә ала һәм 2007 йылдың май айында был мәктәптә тәү башлап оло байрам, оло йыйын - "Ырыуҙар шәжәрәһе" байрамы уҙғарыла. Ҡунаҡтары ла бик күренекле замандаштарыбыҙ, республикала үҙ хеҙмәте менән танылыу яулаған шәхестәр була: Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Миҙхәт Мәмбәтов; профессор, фольклорсы Салауат Ғәлин; шағирҙар Фәкиһа Туғыҙбаева, Ҡәҙим Аралбай;

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# АРПА ҮҪЕНТЕҺЕ



**Баҡсасылар уны ер участкаһында, ә дачаһы булмағандар тәҙрә төбөндә иркен гөл һауыттарына сәсеп тә үҫтерә ала. Беҙгә был культураның бөртөклөһө, ярмаһы түгел, ә шытып сыҡҡан йәшел үҫентеһе кәрәк.**

Арпа шытып сыҡҡандан һуң 8-14 көн үткәс, йәки шытым оҙонлоғо 15-20 см тирәһе үҫкәс, ҡыҡып алырға ла махсус киптергестә йә духовкала ҡыҙыу булмаған температурала киптереп алырға һәм уны кофе тартҡыста онтаҡҡа әйләндереп, тәбиғи дарыу булараҡ файҙаланырға мөмкин. Был йәшел онтаҡтың иң беренсе файҙаһы - организм күҙәнәктәрен йәшәртеү һәләте. Бынан тыш, арпа үләне онтағында кальций һыйыр һөтөндәгенә ҡарағанда 11 тапҡырға, ә тимер шпинаттағынан 5 тапҡырға күберәк. Йәшел онтаҡтың файҙалы матдәләре организм тарафынан 20 минут эсендә тулыһынса үҙләштерелә.

Арпа үҫентеһенең ҡиммәте уның составындағы хлорофилдың күплеге менән аңлатыла. Тап ошо матдә ҡан составын яҡшырта һәм һауыҡтыра, ҡартайыу процесын әкренәйтә. Был тәбиғи дауа шулай уҡ елһенеүгә ҡаршы һәм бәүел ҡыуҙырыу һәләтенә эйә, ул организмды нығыта, һимереүҙән, шәкәр сиренән, дисбактериоздан һаҡлау сара. Аш һеңдереүҙе яҡшырта, эсәк-ашҡаҙан юлдарын таҙарта, эс ҡатыуҙан ярҙам итә.

Йәшел онтаҡты нисек ҡулланырға? 1 балғалаҡ онтаҡты бер стакан яңы һығылған һут йәки бүлмә температураһындағы һыу менән болғатып, ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә ике тапҡыр эсергә кәңәш ителә. Бер аҙ шулай дауаланғандан һуң үҙегеҙҙә көс һәм дәрт артыуын, еңеллек тойорһоғоҙ, ләкин шул уҡ ваҡытта ҡайһы берәүҙәрҙең тәненә сабыртма сығып, баш ауыртыу йә эс йомшарыу күренештәре күҙәтелһә - ҡурҡмағыҙ: тимәк, организмда таҙарыныу процесы башланды. Был осраҡта йәшел онтаҡ миҡдарын ҡулланыуҙы бер аҙ кәметергә мөмкин.

***✓ Тыңлай белеү нормаль аралашыуҙың иң кәрәкле һыҙаты булып тора. Ғүмеребеҙҙең күп өлөшө телмәр өйрәнеүгә, уҡыуға һәм яҙыуға сарыф ителһә лә, беҙ башҡаларҙы тыңларға өйрәнмәгәнбеҙ.***



профессор, филология фәндәре докторы Фирҙәүес Хисаметдинова; профессор, тау инженеры-геолог Минниәхмәт Моталов. Бына ошо күркәм ҡунаҡтар төркөмө мәктәптең ҡотбәрәкәтен арттырып, фәһемле сығыштарын, изге теләктәрен ҡалдыра.

Киләһе 2008 йылда Башҡорт лицейындағы тарих байрамы "Өфө ҡалғаһенә нигеҙ һалыныуға 435 йыл тулыу айҡанлы Октябрь районы халҡы шәжәрәһе байрамы", тип исемләнә. Биҫтәлә йәшәгән бик күп хеҙмәт ветерандары саҡырыла, ата-әсәләр ҡатнаша. Йәнә бер йыл үтеүгә, 2009 йылда, лицей уҡытыусылары үҙҙәренең рухи остазы, педагог, мәғрифәтсе Мөхәмәт Исҡужин шәжәрәһенә бағышланған "Мөхәмәт олатай тамырҙары" тигән кисә уҙғара. Ҡунаҡтары - мәктәп бик тә яҡын күргән ғаилә ағзалары, Исҡужин ырыуы вәкилдәре: иң бәләкәс Ибраһим, атаһы Айрат, ҡартатаһы Фәрғәт, уның атаһы Тимербулат Искужиндар. Шулай уҡ Мөхәмәт ағайҙың улдары Юлай менән Рәмил Исҡужиндар ҙа байрам түрендә була. Даукәр йәнле уҙаман, арҙаҡлы Мөхәмәт Исҡужин тоҡомдары менән осрашыу бик ныҡ хәтерҙә ҡала.

2010 йылдағы шәжәрә байрамы Уҡытыусылар йылына бағышлана. Октябрь районы уҡытыусыларының ғаилә династиялары, шәжәрәләре "Быуындар бәйләнеше" тигән дөйөм бер сафҡа туплана. Артабанғы байрам "Киләсәгем! Ас ишегеңде! Был мин - Рәми!", тип исемләнә һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл айҡанлы ҡунаҡтар йыя. Улар араһында шағирҙың улы Азамат Ғарипов та була. 2012 йылдағы Шәжәрә байрамы "Ҡаһым түрә" тип атала, ошо исемдәге бөйөк йыр көйөн бөтә уҡыусылар отоп, өйрәнеп йырлай, байрам 1812 йылғы Бөйөк Ватан һуғышының 200 йыллығына бағышлана. Ҡурайсы Рөстәм Шәрипов менән "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы етәксеһе Илдар Шәйәхмәтовтар менән осрашыу көнө буйы бара. Һәр класҡа инеп, айырым мәҙәни-тарихи дәрестәр үткәрә был ике илһөйәр зат: ҡурай моңона уралған иҫтәлектәр яңғырай, балалар яугир кейемдәре менән яҡындан таныша.

2013 йылғы шәжәрә тантанаһы шулай уҡ тәрән эстәлекле итеп ойоштоpола: Сипайлово биҫтәһенә нигеҙ һалыныуға 30 йыл тулыу айҡанлы бындағы иң тәүге урамға исеме ҡуйылған бөйөк башҡорт шағиры ла телгә алына. Ул - иҫ киткес талантлы шағир һәм драматург Баязит Бикбай, уның тыуыуына 105 йыл тулыу хөрмәтенә "Ил онотмаҫ, киләсәктә беҙҙе ғорур йырға ҡушып йырларҙар", тигән баш аҫтында шиғранә шәжәрә кисәһе үтә.

2014 йылда Башҡорт лицейында үткән шәжәрә байрамы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙарына бағышлана. "Утта янмай, һыуҙа батмай, тамырҙары ҡоромай..." тип дан йырлау кисәһенә саҡырылған ҡунаҡтар бик танһыҡ замандаштарыбыҙҙан була һәм улар ифрат матур сығыштары менән байрамды күтәрә.

2015 йылда ла бик ҡыҙыҡлы үтә мәктәптең шәжәрә байрамы. Башҡорт халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 135 йыл тулыуға һәм "2015 йыл - әҙәбиәт йылы" тип нарыҡланған рухи кисә "Мәшһүр ырыуҙашым, тамырҙарың тоташҡандар Кәлсер-Табынға..." тип атала. Бынан ары, 2016, 2017, 2018 йылдарҙағы шәжәрә байрамдары Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына бағышлана. Уларҙың йөкмәткеһен байытып, күренекле шәхестәр саҡырыла.

2019 йылда ла Мөхәмәт Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы коллективы шәжәрә байрамына яңы ҡунаҡтар йыя. "Халыҡтар дуҫлығы һәм берҙәмлеге менән йәшәй йөҙйәшәр Башҡортостан..." тигән оран аҫтында үтә был сара. Ошо кисәләрҙең барыһын да ойоштороусы, сценарийҙар авторы, ҡунаҡтарҙы саҡырыусы кеше - директор урынбаҫары, тарих уҡытыусыһы Гөлсирә Хәтмуллинаның да исемен әйтеп үтмәй мөмкин түгел.

Шулай итеп, быйыл Мөхәмәт Исҡужин исемен йөрөткән башҡорт лицейында ойошторолған Шәжәрә байрамдары тураһындағы видеофильм ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаралды. Ул кадрҙар уйландырҙы, һоҡландырҙы. Шәжәрә байрамында булып ҡайтҡас, күңелдә бер һорау төйнәлде: Өфөлә бына тигән милли тәрбиә эшен алға ҡуйған мәктәп бар. Ундай уҡыу йорттары бик аҙ. Ундай мәктәптәр бик ҡәҙерле. Һәр башҡорт мәктәбе ошондай ентекле яуаплылыҡ менән милли тәрбиә эшен алып барамы? Үҙең йәшәгән төбәк, биҫтә, район, ауыл халҡы өсөн шәжәрә байрамдары үткәреү бик тә фәһемле. Был мөмкинлекте һәр мәктәптә файҙаланырға була. Уларҙың һайлаған темалары, саҡырған ҡунаҡтары бер мәртәбә-байлыҡ булһа, ошо мәктәптә уҡыған балалар һәм эшләгән уҡытыусылар - үҙҙәре бер дәрәжә. Башҡорт мәктәбендә уҡыу һәм уҡытыуҙың ҡәҙерен белеү шулай була.

**Сәрүәр СУРИНА.**

## ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

### Йәнә бер кирәмәт тураһында

Бер ваҡыт сауҙа менән шөғөлләнеүсе әҙәмдәр Мысыр тарафынан диңгеҙ менән Мәҙинәгә барыу өсөн бер кәмәгә инеп ултыралар. Кәмәлә барған көндә ел-дауыл сығып китә, тау-тау тулҡындар ҡалҡып, кәмәне һелкетә башлай. Уныһы батыу дәрәжәһенә етә. Кәмәләгеләр өмөттәрен өҙөп, тәүбә ҡыла һәм ярлыҡау һорай башлай. Кәмәнең бер мөйөшөндә насар ғына кейемдә бер әҙәм ултырған була. Был кеше кәмәнән сыға ла һыу өҫтөндә йөрөй һәм намаҙ уҡый башлай. Кәмәләге халыҡ: "Әй, Алланың изге бәндәһе, беҙгә лә илтифат ит", - тип үтенә. Шәйех уларға иғтибар ҙа итмәй икән, тегеләр тағы ла: "Кәмәбеҙ бата, харап булабыҙ, зинһар, ярҙам ит!" - тип ялбаралар, илайҙар, ти. Был шәйех: "Аллаһы Тәғәләгә яҡынлыҡ ҡылығыҙ - ярҙам итермен", - тигәс, халыҡ: "Әй, шәйех, нимә менән яҡынлыҡ итәйек, әйтә һал!" - тиҙәр. Уның: "Донъя ҡыуыуҙы туҡтатыу һәм әхирәтте һөйөү менән", - тигән һүҙҙәрен ишетеп, халыҡ: "Ҡабул ҡылдыҡ, өҫтөбөҙгә алдыҡ, зинһар, ярҙам ит!" - тип ялбаралар. Шәйех: "Кәмәгеҙҙән минең яныма сығығыҙ", - ти. Быларҙың барсаһы ла сығып, һыуға һис батмайынса, шәйехтең тирәһенә йыйылалар. Ике йөҙләп әҙәм һыуға төшкәс тә кәмәләре бөтөн әйберҙәре менән ҡуша батып, күҙгә күренмәҫ була. Шәйех был әҙәмдәргә: "Хәҙер бына ҡурҡыныстан имен булығыҙ инде", - тигәс, кешеләр: "Үҙебеҙ имен ҡалдыҡ та ул, ләкин кәмәбеҙҙә Мәҙинә фәҡирҙәренә тейеш малдар бар ине, харап булды шул",- тиҙәр икән. Шул саҡ шәйех намаҙ уҡып, доғаһын ҡыла һәм әлеге кәмәләре, эсендәге нәмәләре менән кире ҡалҡып та сыға, ти. Барса халыҡ кәмәгә ултырып, Мәҙинә тарафына китәләр, барып етеп, кәмәнән төшөп, малдарының фәҡирҙәргә тигәнен дә, үҙҙәренекен дә фәҡирҙәргә саҙаҡа ҡылалар. Был кешеләр шулай итеп яҡшыларҙан һәм ғибәҙәт ҡылыусыларҙан булып китә. Ә уларҙы ҡотҡарған шәйех иһә кирәмәт-мөғжизә эйәһе Уйыс әл-Ҡарани хәҙрәттәре булып сыға...

**(Дауамы бар).**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ТЫҢЛАЙ БЕЛ

Һөйләшкәндә әңгәмәсеңде тыңлай белеү бик мөһим. Ике ҡатын тураһындағы бер тарих һис тә иҫемдән сыҡмай. Урамда китеп барғанда улар өсөнсөһөн осрата. Әхирәттәрҙең береһе уның менән әңгәмәләшә башлай һәм ун минут буйына хәбәр һөйләй, ә осраған ҡатын уны тыңлап ҡына тора. Хушлашып айырылышҡас, был ҡатын икенсеһенә: "Бына, исмаһам, донъялағы иң шәп ҡатындарҙың береһе", - ти. "Нисек инде улай, ул бит бер ауыҙ һүҙ ҙә өндәшмәне", - тип ҡаршы төшә икенсеһе. "Беләм, - тип яуап бирә беренсеһе, - ләкин ул бит тыңланы. Был уның аҡыллылығын күрһәтә".

Үҙеңдә тыңлай белеү оҫталығын үҫтереп, һине лә бик аҡыллы кеше тип иҫәпләй башлаясаҡтарына инанырһың. Һөйләгәндәребеҙҙе тыңларға һәләтле кеше яҡшы дуҫ була алыуын беҙ барыбыҙ ҙа аңлайбыҙ. Тик тыңлай белеү онотолған һәләткә әүерелгән хәҙер. Моғайын, күҙәткәнең барҙыр: ҡайһы берәүҙәр уйындағын бер тынала һөйләп бөтә лә, артабанғы телмәрен уйлап, һинең һөйләгәнеңде ишетмәй ҙә.

Тыңлай белеү нормаль аралашыуҙың иң кәрәкле һыҙаты булып тора. Ғүмеребеҙҙең күп өлөшө телмәр өйрәнеүгә, уҡыуға һәм яҙыуға сарыф ителһә лә, беҙ башҡаларҙы тыңларға өйрәнмәгәнбеҙ. Ғөмүмән алғанда, кеше уйлағанын һөйләп бөтөрөргә теләй, ә иптәшең һинең һөйләгәнеңде тыңламаһа, кәйеф ҡырыла.

Ә бит тыңлай белеү һөйләү белеүгә ҡарағанда нығыраҡ тәьҫир итә. Донъя хәҙер яҡшы тыңлаусыларға сарсаған. Битарафлыҡ - ул иң алама сифат. Ләкин яҡшы итеп тыңлай белеү - ул өндәшмәй ҡалыу ҙа түгел. Юҡҡа-барға ҡыҙып барыу һәм төшөнкөлөккә бирелеү, сарказм, әңгәмәсең менән риза булмау - былар барыһы ла шәхестең тарҡалыуында үҙ ролен уйнай.

Әгәр һин шулай итһәң, әңгәмәсең үҙен рәнйетелгән итеп тоясаҡ. Ул: "Минең әйтер һүҙҙәрем күп, тик мине тыңлаһындар ине", - тип уйлай. Ул иғтибарлы тыңлаусыны табыу өсөн бөтәһен дә эшләйәсәк. Мәҫәлән, бала үҙен тыңламаһалар, иғтибар йәлеп итеү өсөн берәй нәмәне вата һуғасаҡ, йә туғаны менән һуғышып китәсәк. Уҡыусы дәрескә килмәйәсәк йә бөтөнләй уҡыуҙан баш тартасаҡ. Ир йәки ҡатын үҙ-үҙенә бикләнәсәк, йә буш ваҡытын өйҙән ситтә үткәрәсәк. Хеҙмәткәр ялыу яҙасаҡ, йәки икенсе урынға күсереүҙе һораясаҡ. Ҡыҫҡаһы, һәр кем үҙен ишеттерергә мәжбүр итә ала.

Яҡшы тыңлаусы булыу өсөн кеше быны үҙе теләргә тейеш. Шул саҡта һин ялҡытҡыс йәки әһәмиәтһеҙ тип иҫәпләгән кешеләрҙең ҡыҙыҡлы булыуын асыҡларһың. Ысынында иһә, күңелһеҙ кешеләр юҡ - тик ҡыҙыҡһындыра алмаған тыңлаусылар ғына бар!

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 17 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет.[16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское.[16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ничто не случается дважды". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.00 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30, 5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Будни и праздники Серафимы Глюкиной". [18+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Моя семья". [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 18 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 2.10, 3.05 Время покажет.[16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ничто не случается дважды". Новые серии. [16+]
22.30 Т/с "Гурзуф". [16+]
0.00 "Евровидение-2021". Первый полуфинал. Прямой эфир.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Брифинг по организации детского летнего отдыха.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Генеральная уборка. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Будни и праздники Серафимы Глюкиной". [18+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Сумасшедший". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 19 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 2.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ничто не случается дважды". Новые серии. [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Гурзуф". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.15 Автограф. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30, 4.30 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Двое и одна". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**5.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 20 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 2.10, 3.05 Время покажет.[16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Сегодня вечером". [16+]
23.05 Т/с "Гурзуф". [16+]
0.00 "Евровидение-2021". Второй полуфинал. Прямой эфир.

### БСТ

**7.00, 9.15 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.15, 16.15 Территория женского счастья.**
**12.15, 5.30 Счастливый час.**
**13.15, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**18.00 "Гора новостей".**
**18.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Продлись, продлись очарованье..." [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Близнецы". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**

## 21 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 1.50 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
14.40, 15.15, 2.40 Давай поженимся! [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
16.50 Поле чудес. [16+]
18.05 Чемпионат мира по хоккею-2021. Сборная России - сборная Чехии. Прямой эфир из Латвии. В перерывах - Вечерние новости (с субтитрами).
20.40 Время.
21.10 Юбилейный вечер Вячеслава Добрынина. [12+]
22.40 Вечерний Ургант. [16+]
23.35 Д/ф Премьера. "Дело Сахарова". К 100-летию со дня рождения. [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]
4.45 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 23.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00, 4.15 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Поздняя встреча". [6+]**
**2.00 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**

## 22 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.25, 12.25 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.05 Х/ф "Ковчег". [12+]
15.35 Д/ф "Владимир Ивашов. Баллада о любви". [12+]
16.25 Х/ф "Баллада о солдате". [0+]
18.05 Чемпионат мира по хоккею-2021. Сборная России - сборная Великобритании. Прямой эфир из Латвии.
20.40 Время.
21.00 Сегодня вечером. [16+]
23.20 "Пусть говорят". Специальный выпуск. [16+]
0.00 Конкурс "Евровидение-2021". Финал. Прямой эфир.
4.10 Модный приговор. [6+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 История одного села. [12+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Башҡорттар. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Концерт Иделя Нургалина. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.30 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Безымянная звезда". [12+]**
**3.15 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**5.00 "Йырҙарҙа йылдар". Лучшие исполнители башкирских народных песен. [12+]**

## 23 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Медсестра". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.10 Д/ф "Правдивая история. Тегеран-43". [12+]
15.55 Премьера. "Доктора против интернета". [12+]
17.00 Юбилейный вечер Юрия Николаева. [12+]
19.20 Победитель. [12+]
21.00 Время.
22.00 "Dance Революция". Новый сезон. [12+]
23.45 Т/с Премьера. "Налет-2". [16+]
0.45 Д/с "В поисках Дон Кихота". [18+]
2.30 Модный приговор. [6+]
3.20 Давай поженимся! [16+]
4.00 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.30 Историческая среда.[12+]**
**17.00 80-летию образования Союза композиторов РБ посвящается... Торжественный концерт. [12+]**
**19.00 Заветное слово наследия. [12+]**
**19.45 Лидеры региона. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**0.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.30 Х/ф "10 негритят". [12+]**
**2.45 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 май "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 12+
**22 май "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 май "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айтматов), драма. 16+
**22 май "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 18.00 12+
**23 май "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22 май "Три поросенка"** (С. Михалков). 12.00, 14.00. 0+
**23 май "Маша и медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер). 12.00, 14.00 0+
**22-23 май "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**18 май** Башҡортостандың халыҡ артисы, бейеүсе **Зөлфиә Ҡудашеваның юбилей кисәһе**. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**19 май "№13"** (Р. Куни), комедия. 16+
**21 май** 88-се ижад миҙгелен тамамлау. **"Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+
**22 май "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), әкиәт. 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**20 май** 30-сы ижад миҙгелен тамамлау. **Премьера! "Нисек кейәүгә сығырға?.."** (Н. Ғәйетбай), комедия. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Май (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (5) дүшәмбе | 3:38 | 5:08 | 13:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |
| 18 (6) шишәмбе | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 19:49 | 21:19 | 22:49 |
| 19 (7) шаршамбы | 3:35 | 5:05 | 13:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 20 (8) кесе йома | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 19:52 | 21:22 | 22:52 |
| 21 (9) йома | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 19:54 | 21:24 | 22:54 |
| 22 (10) шәмбе | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 19:56 | 21:26 | 22:56 |
| 23 (11) йәкшәмбе | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 19:57 | 21:27 | 22:57 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

Өфө ҡала округы хакимиәтенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө буйынса баш идаралығы коллективы идаралыҡтың элекке начальник урынбаҫары Динар Дитар улы Халитовтың,

**атаһының**

вафаты айҡанлы, ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

✓ *Башҡорт теле - ул бөйөк Урал батыр теле, ҡаһарман һәм сәсән Салауат Юлаев теле, Әхмәтзәки Вәлиди теле. Туған телһеҙ беҙ - йырһыҙ, моңһоҙ бер маңҡорт, тарихи хәтерен юйған әҙәм генә ни бары.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 15 МАЙ - ХАЛЫҠ-АРА ҒАИЛӘ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**18-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сбруй. Уҡлау. Ҡайыш. Сауҙа. Ҡойма. Ля. Һуҡа. Саң. Ҡамсы. Һандыҡ. Ыҡлау. Май. Башаҡ. Үсле. Етер. Лөғәт. Күн. Әсмә. Таба. Күреп. Крейсер. Намаҙ.

**Вертикаль буйынса:** Сыбыртҡы. Сәңгелдәк. Монумент. Уғыҙ. Абакан. Алиһә. Солоҡ. Мурҙа. Быйма. Йәһүд. Йүгән. Серге. Йомош. Рух. Ҡаҡ. Беләк. Арба. Сана. Асы. Ҡотоп.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# МАҢҠОРТ БУЛМАЙЫҠ!

**Ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған изге аманаттай, быуындан-быуынға һаҡланған һәм йәшәгән милли телебеҙҙе юҡҡа сығармайыҡ тиһәк, ҡәҙерле ата-әсәләр, балағыҙ бөгөн мәктәптә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ та, Рәсәй Конституцияһына ярашлы туған тел булараҡ та өйрәнергә һәм белем алырға тейеш! Шуға мотлаҡ өлгәшәйек, туғандар!**

"Балабыҙ урыҫ телендә генә уҡыһын", - тип ғариза яҙһағыҙ йәки ҡул ҡуйһағыҙ, иртәгә һуң буласаҡ! Үҙ телебеҙҙе үҙебеҙ хөкөм итеп, башҡорт телен юҡҡа сығарыуға беренсе аҙым буласаҡ ул, милләттәштәр. Балағыҙ урыҫ телен дә өйрәнһен, башҡорт телен дә уҡыһын. Башҡорт теле - ул бөйөк Урал батыр теле, ҡаһарман һәм сәсән Салауат Юлаев теле. Башҡорт халҡының юлбашсыһы һәм донъя кимәлендәге ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди теле. Туған телһеҙ беҙ - йырһыҙ, моңһоҙ бер маңҡорт, тарихи хәтерен юйған әҙәм генә ни бары. Туған телебеҙ бөтһә, халҡыбыҙ ҙа бөтә - шуны онотмайыҡ, аңһыҙлыҡ күрһәтмәйек, милләттәштәр!




**Ҡәҙим АРАЛБАЙ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

*АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА*

# ТУҒАН ТЕЛДӘ ЛӘ...

**Белем алыу теле (телдәре) тигән төшөнсә нимәне аңлата?** Беренсенән, ул уҡыу-уҡытыу теле. Мәктәпкәсә, башланғыс дөйөм һәм төп дөйөм белемде туған телдә алыу, йәғни балалар баҡсаларындағы төркөмдәрҙә, милли мәктәптәрҙә уҡытыуҙы һәм тәрбиә биреүҙе туған телдә ойоштороу. Икенсенән, туған тел булараҡ өйрәнелгән тел. Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре иҫәбенән туған телде һайлау, шул иҫәптә, уҡытыу рус телендә барған балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә рус телен туған тел булараҡ һайлау. Өсөнсөнән, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ, башҡорт телен уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәр һәм кластарҙа, уҡытыу туған телдәрҙә алып барылған мәктәптәрҙә һәм кластарҙа, шулай уҡ уҡыусыларҙың милли составы төрлө булған, әммә уҡытыу башҡорт телендә алып барылған мәктәптәрҙә һәм кластарҙа өйрәнелгән тел. Белем алыу теле (телдәре) мәғариф ойошмаларының локаль акттары, йәғни ойошманың етәксеһе тарафынан раҫланып, идара итеү советтары менән килешелгән белем биреү теле (телдәре) тураһындағы положениелар менән көйләнә.

**Белем алыу телен (телдәрен) һайлау тәртибе нисек?** Балаларҙы, уҡыусыларҙы мәктәпкәсә, башланғыс дөйөм һәм төп дөйөм белем биреү программалары буйынса уҡырға алғанда уларҙың ата-әсәһе (законлы вәкилдәре) ғариза буйынса белем алыу телен, Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре иҫәбенән өйрәнелә торған туған телде, шулай уҡ туған тел булараҡ рус телен, Рәсәй Федерацияһы республикаларының дәүләт телдәрен һайлай.

**Ғариза ҡасан бирелә?** Белем алыу теле (телдәре) ата-әсә (законлы вәкилдәр) тарафынан ғаризаларҙа балалар баҡсаһына ҡабул иткәндә, беренсе класҡа төшкәндә, белем алыуҙың киләһе кимәленә күскәндә (апрель - июнь айҙарында, йәғни яңы уҡыу йылына уҡыу планы раҫланғанға тиклем ата-әсәләр йыйылыштарында), бер мәғариф ойошмаһынан икенсеһенә күскәндә, йә ниндәйҙер объектив сәбәптәр арҡаһында уҡыу йылы барышында уҡыу урынын алыштырғанда күрһәтелә. Балаларҙы беренсе класҡа ҡабул итеү этаптары: беренсе этап 1 апрелдән 30 июнгә тиклем - мәктәпкә тәү сиратта алынырға тейешле йәки өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә булған, шулай уҡ бер тәғәйен биләмәгә беркетелгән балалар өсөн; икенсе этап - 6 июлдән 5 сентябргә тиклем - тәғәйен биләмәгә беркетелмәгән балалар өсөн. Иғтибар! Бер мәғариф ойошмаһынан икенсеһенә күскәндә уҡыусыға яңы мәғариф учреждениеһында өйрәнелгән телдәр исемлеге бирелә. Бала элек өйрәнелгән тел исемлектә булмаһа, уға шәхси уҡыу программаһы тәҡдим ителергә тейеш!

**Ғаризаны нисек бирергә мөмкин?** Балалар баҡсаһына ҡабул иткәндә "Балалар баҡсаһына электрон сират" мәғлүмәт сервисы аша, йә мәктәпкәсә мәғариф ойошмаһы етәкселегенә шәхсән тапшырырға була. Мәктәпкә төшкәндә һәм (йәки) икенсе мәктәпкә күскәндә ғаризалар шәхсән тапшырыла. Шулай уҡ почта аша заказлы хат менән, мәктәптең электрон почтаһына, мәктәптең рәсми сайты аша һәм дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр сервисы ярҙамында ғариза бирергә мөмкин. Белем алыуҙың киләһе кимәленә күскәндә ғариза шәхсән, ата-әсәләр йыйылышында тапшырыла.

**Туған телде өйрәнмәҫкә мөмкинме?** Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре иҫәбенән туған тел, шулай уҡ рус теле, туған телдә әҙәби уҡыу (туған әҙәбиәт) башланғыс дөйөм, төп дөйөм, урта дөйөм белем кимәлендә мотлаҡ өйрәнелергә тейешле фән булып тора.

**Башҡорт теле нисек өйрәнелә?** Мәктәптәр, төп дөйөм белем биреү программаларына һәм федераль дәүләт мәғариф стандарттарына нигеҙләнеп, төп белем биреү программаларын, шул иҫәптән уҡыу пландарын үҙаллы төҙөй. Федераль дәүләт мәғариф стандарттары Рәсәй Федерацияһы республикаларының дәүләт телдәрен өйрәнеү мөмкинлеген бирә. Мәктәп уҡыу планы нигеҙендә өйрәнеү өсөн бер нисә фәнде, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ башҡорт телен, этномәҙәни йүнәлештәге фәндәрҙе тәҡдим итергә хоҡуҡлы.

**Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы, Башҡортостан Республикаһы Башлығының Ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы.**

✔ *Ғүмер оҙон, әгәр ул тулы булһа ғына. Шуға ла ғүмерҙе ваҡыт менән түгел, ҡылыҡтарың менән үлсә.*

*(Сенека).*



БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ

VI CIOFF® WORLD FOLKLORIADA 2021 RUSSIA UFA

**Элек кейем кешенең ниндәй милләттән булыуын асыҡларға ярҙам иткән. Ул быуаттар дауамында формалашҡан һәм үҙенсәлектәре халыҡ йәшәгән тәбиғәт, хужалыҡ һәм көнкүреш шарттарына бәйле булған. Кейем - кешеләрҙең сәнғәтте, матурлыҡты тойомлауының иң камил өлгөһө, унда халыҡтың рухи донъяһы сағылыш тапҡан.**

Ниндәйҙер кимәлдә консервативлыҡ һаҡланһа ла, халыҡтың көнкүреш һәм художестволы мәҙәниәттәре кеүек үк, кейем даими рәүештә үҙгәреш кисереп торған. Быуаттар үтеү менән яңы төр материалдар ҡулланылған, тегелеше камиллаштырылған, әйберҙәрҙең формаһы үҙгәртелгән. Мәҫәлән, биҙәүестәрҙең мәрйен һәм көмөш менән бай биҙәлеше Урта быуаттарҙа Көнсығыш менән тығыҙ сауҙа бәйләнештәре булдырылып, башҡорт халҡының мөлкәт яғынан ҡатламдарға бүленгән осоронда барлыҡҡа килгән. XX быуаттың тәүге ун йыллығында кейем айырыуса ныҡ үҙгәрештәр кисерә. Беренсе донъя һуғышында ҡатнашыу, аҙаҡ граждандар һуғышы һәм социалистик төҙөлөштә алғы һыҙатта йөрөү ирҙәр кейемен тулыһынса тиерлек юғалтыуға килтерә. Тик оло йәштәге ирҙәр кейемендә генә ҡайһы бер боронғо традицион үҙенсәлектәр һаҡланып ҡала. Ҡатын-ҡыҙҙар кейеме ҡала йоғонтоһонда айырыуса ныҡ үҙгәрә.

Бөгөн бик күп йылдар башҡорт милли кейеменең сәхнә костюмдарында сағылыш тапҡан ҡайһы бер үҙенсәлектәрен генә күреп өйрәнеп, кейемдәребеҙҙең күп төрлөлөгөн, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың һәр әйберҙе күҙҙең яуын алырҙай матур итеп эшләрлек оҫта ҡуллы булыуын онотоп барабыҙ кеүек. Шуға гәзит уҡыусыларыбыҙға БР Милли музейында һаҡланған башҡорт милли кейеменең зауыҡлы үрнәктәрен сағылдырған карточкалар йыйынтығын тәҡдим итәбеҙ. Башҡорт милли кейеменең төрлөлөгөн сағылдырған йыйынтыҡтың төҙөүселәре - Р. А. Хафизова, А.Р. Хөснуллин, мөхәррире К.Р. Игбаев, яуаплы мөхәррире РФ һәм БР атҡаҙанған фән эшмәкәре, тарих фәндәре докторы, профессор Р. З. Янгузин.



*Алмиҙеү һәм селтәр - ҡатын-ҡыҙҙарҙың түшкә таға торған биҙәүесе. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондары*



*Элмә сигеүле алъяпҡыс*



*Ҡайталап сырмап сигелгән алъяпҡыс. Баҙыян биҙәк, свастикаға оҡшаған мотивтар*



*Ҡашмау. Көмөш, мәрйен*



*Затлы тауарға ука һалып тегелгән елән менән ҡәмәр атаҡлы башҡорт ирҙәренең байрам кейеме булған. Ирҙәр ҡалпағы*



*Ирҙәр өсөн һуғылған күлдәк. Күтәрел һуғылган биҙәкле һәм яғаһы сигеүле боронғо кейемдең бындай үрнәге һирәк осрай*



*Ирҙәр өсөн элмә сигеүле күлдәк - кәләш бүләге. XX быуат башы*



*Көмөш еп һәм сәйлән менән сигелгән бәләкәй ҡалпаҡтар*



*Балалар өсөн ҡусҡарлы сарыҡ. Ҡурған башҡорттарында ҡатын-ҡыҙҙарҙың байрам ҡатаһы*



*Сигеүле бейәләй менән ҡулъяулыҡ - кәләштең кейәүгә туй бүләге*



*Йәш килендең байрам кейеме. XX быуат урталары. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондары*



*Ҡатын-ҡыҙҙар кейеме: ҡулдан һуғылған туҡыманан тегелгән күлдәк, бәрхәт камзул, көмөш биҙәүестәр. Башҡортостандың үҙәк районлары*

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪ ИТЕП СЕР ӘЙТМӘ,

## дуҫыңдың да дуҫы бар

Мәңгелек ғазаптан ҡотолорға теләһәң, бер кемде лә ғәйепләмә, бер кемгә лә яла яҡма - Хоҙай быны яратмай.

**(Нил Синайский).**

Ғүмер оҙон, әгәр ул тулы булһа ғына. Шуға ла ғүмерҙе ваҡыт менән түгел, ҡылыҡтарың менән үлсә.

**(Сенека).**

Илай-илай тыуабыҙ, зарлана-зарлана йәшәйбеҙ, донъянан төңөлөп үләбеҙ.

**(Томас Фуллер).**

Кеше ғүмере шулай үтә: бәләкәй генә ҡаршылыҡтарға ҡаршы көрәшергә ҡурҡаһың һәм бер туҡтауһыҙ йәненә тыныслыҡ эҙләйһең, ә ундай ҡаршылыҡтар булмай башлағас, өлгәшелгән йән тыныслығы түҙеп тормаҫлыҡҡа әйләнә.

**(Б. Паскаль).**

Кем ниндәйҙер эште башлар алдынан уҡ үҙен яртылаш еңелгән тип иҫәпләй, ул, ысынлап та, көрәшкә тотонғанда уҡ яртылаш еңелгән була.

**(Д. Писарев).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Халҡы ярлы ғына йәшәгән бер дәүләткә яңы хаким килә. Халыҡтың йәшәйеш кимәлен күрһә лә, уларҙы ярлылыҡтан сығарыу тураһында түгел, тәүге көндән үҙенең матди хәлен яҡшыртыу тураһында уйлай ул һәм: "Быға тиклем дә фәҡирлектә көн күргән халыҡ был хәленә күнеп бөткәндер, бынан һуң да шулай йәшәүҙе дауам итә алыр. Мин үҙемдең ғаиләмде, балаларымды, ейән-ейәнсәрҙәремде тәьмин итергә тейешмен..." - тип ҡарар итә.**

**Шулай итеп, ул үҙенең был ниәтен тормошҡа ашырырға тотона. Ғаиләһен батшалар көнләшерлек һәр төрлө байлыҡҡа күмә. Хәҙер инде балаларының ғаиләләренә сират етә: был юлы инде уға тағы ла күберәк көс һалырға тура килә, ләкин ул барыбер үҙ ниәтенә өлгәшә, балаларының ғаиләләрен һәр батша көнләшерлек итеп байлыҡ менән тәьмин итә. Сират ейән-ейәнсәрҙәргә етә...**

**Шул саҡта был хакимдың ҡылыҡтарына Хоҙай үҙе иғтибар итә һәм уның ғәҙелһеҙ эштәренә сик ҡуйып, ғәҙеллек урынлаштырырға була. Байлығы кирегә аға башлағас, хаким сығынсылай һәм байлыҡ туплау эшен тағы ла нығыраҡ әүҙемләштерә. Ләкин был эшкә көсөн нығыраҡ түккән һайын, көсһөҙләнә бара. Үҙе лә хәлдән тая, балалары ла бөлә, ә ейән-ейәнсәрҙәр тыумай ҡала... Хакимдың бар тоҡомо ҡорой, ә ҡалған байлығын бурҙар ташып бөтә...**

**Шуның өсөн елгә оса торған байлыҡ туплауҙан һаҡланырға кәрәк. Елдән килгән елгә килә. Был Йыһан ҡануны..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21020

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
14 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.



«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 318/05